
Таңсулпан Ғарипова
Бөйрәкәй
III өлөш
Һандуғастың һайрар ғүмеркәйе

## Икенсе бүлек*

Март ҡояшының сағыу нурҙарына ҡойонған юл буйлап Мәҙинә ферма үренә атланы. Юл ситтәре ҡытырмаҡ боҙ селтәре менән ҡапланған, ҡар ярмаланып, мәрйендәй баҙыраған эре бөртөктәр булып уҡмашҡан. Иртән һалҡын әле, ә көндөҙ бынан, алтын уҡаларын емелдәтеп, камзул тәңкәләрен сылтыратып-көлөп әллә ҡайҙа ашҡынып йүгергән йәш киленсәктәрҙәй, йырғанаҡтар йырлап ағасаҡ.

Мәҙинәнең дә күңелендә аяҙ март ҡояшы бөгөн. Ниһайәт, ул Әптеләхәтенән сәләм алыуға ирешә. Сәләмде күршеләге Түбәнән бер оло ҡатын килтерҙе.

— Һинме Мәҙинә, Әптеләхәт исемле кешенең бисәһе? — тине ул ишектән инеү менән. — Һиндер. Һин булмаһаң, бы тикте матур булмаҫ инең. Әптеләхәт бабайға һине яман ныҡ матур тип әбрисават иткән.

— Әптеләхәт?! — Быуындары йомшарған Мәҙинә, толомдарын артҡа ташлап, иҙәнгә сүгәләне. — Әптеләхәт тереме, инәй?!

— Тор, ҡыҙым, тор... Алай сабырһыҙҙанма! Мына минеке ҡайтып та етте, аҙна ятҡан булды ла яҡты донъя менән хушлашып та ҡуйҙы. Атуса, ул үҙе килмәксе ине! Йүнәлеп, хәл йыйып алам да, китәм Мәҙинә ҡарындашты күрергә, тип хыялданып ҡына ятып йән бирҙе...

— Ҡайһылай аяныс!

— Инде... һауҙығын юғалтып ҡайтҡас, нимә эштәһен.

— Нимәләр һөйләне?!

— У гел һорашты. Һөйҙәмәне, шитай. «Аның нимәһен һөйҙәргә?!» — тип ҡул һелтәне лә ҡуйҙы. Бәлкем, хәле лә бумағандыр... Ней кеше күп килде. Уҡымышты ине бит у... Атаң мулла буған тип кенә харап иттеләр инде. Бәпәйең бар икән... Дауытмы исеме? Бабай әйткәйне. Ни бит ирең һиңә аманат ебәргән. — Ҡатын кеҫәһенән ҡулъяулыҡҡа ыҡсым итеп уралған кескенә төйөнсәк сығарҙы. — Мына, ошоно Мәҙинә сәсһен, үҫтерһен тигән. Был тигән, йөҙйәшәр ағас тубырсығы...

Мәҙинә изгеләрҙән изге әйбергә ҡағылғандай, тубырсыҡты ҡулына алды. Сәтләүек ағасы. Әле унан сайыр еҫе сыҡҡандай. Уны ҡулдарында ҡәҙерлеләрҙән ҡәҙерле кешеһе тотоп торған. Тубырсыҡҡа һөйгәненең йылыһы, һағышы, мөхәббәте һеңгән...

— Рәхмәт, инәй! — Мәҙинә тормош ауырлығын күп күреүе йөҙөнә һырҙар менән яҙылған ҡатынды ҡосаҡлап алды. Күҙ йәштәре апайҙың шәл суҡтарына тупылданы.

— Ила, балам, ила...

— Ҡайтам тимәгәнме Әптеләхәт?

— Һораным бабайҙан. Ҡатыны һинең кеүек бик ныҡ көткән булһа, моғайын, ҡайтыр, тине.

— Шулай тинеме?! Көтһә, ҡайтыр тинеме?

— Шулай тине, балам. Әйтте. Әйтмәгәнде мин һиңә анау саҡты ерҙән йәйәүҙәп килеп әйтте тип тораммы?

— Балаларығыҙ бармы, инәй?

— Юҡ, балам, ҡайһыһы сәсәктән, ҡайһыһы тифтан үлде. Мужит, аҙаҡ булыр ине, бабайҙы әпкитеп барҙылар.

— Ҡайтма, инәй, миндә генә тор, бергә йәшәйек!

— Әллә шу... Былай бабай ҙа әйтте шул һүҙҙе... Ул һине белгән кеүек һөйҙәне лә ятты бит! Ғәзимә, һин шул баланы эҙҙәп тап, яңғыҙыңа ологайғас ҡыйын булыр, тине...

Ул арала өйҙө сабый тауышына, сафлыҡҡа, ҡыуанысҡа сорнап бала уянды. Утлығына тере ҡуҙ төшкән самауыр геүләне, ҡулына бәйләмен тотҡан Маһинур килеп инеп шатлыҡ уртаҡлашты; ул, Дауытты ҡулына алып:

Һәтес, һәтес, һәтес тә,
Беҙҙең Дауыт бәпес тә.
Атаһы яратып туймаҫ —
Беҙҙең бәпәй йәтеш тә! — тип һамаҡланы. Күмәге бергә ҡыуаны-

* Аҙағы. Башы 8-се һанда.

ша-сөкөрләшә өс ҡатын ашъяулыҡ тирәләй ултырышты. Ҡунаҡ ҡатын үҙе менән килтергән күстәнәсен һипте ашъяулыҡҡа:

— Әйҙәгеҙ, ынтылығыҙ...

— Танау ҡысый ине, күстәнәскә булған икән...

— Күстәнәсен ашаған оҙон ғүмерле була...

— Мәҙинә, бәләкәй һыу ташып кит, ҡунаҡты мунса керетәйек... Мына шулай, Ғәзимә һеңдем, Мәҙинә менән таяуға терәк булып йәшәп ятҡан көнөбөҙ...

— Бырама һәйбәт! Ҡыҙым мине лә үҙ янына саҡыра әле!

Ике ҡатын сөкөрләшә-һөйләшә сәй эсеп ҡалды, Мәҙинә мунса ҡаҙанына һыу ташып тултырҙы ла китте. Ә тубырсыҡты үҙе менән алды. Әле ул костюмының түш кеҫәһендә ҡуйынын талғын ғына йылытып ята...

* * *

Әҙәм балаһы дуҫтарын онотһа онота, мәгәр дошмандарын иҫенән сығармай, тиҙәр бит. Ғәлимә Минһажева ла үҙенең оҙон булмаған ғүмерендә тормоштоң әсеһенән дә, сөсөһөнән дә байтаҡ ауыҙ итте. Хәйерсегә ел ҡаршы, тигәндәй, ата-әсәһенең иртә донъя ҡуйыуҙары өҫтөнә, кәнсәлә тыныс ҡына эшләп ултырған ерендә, бөтә ауылды аптыратып, Ғәлимәнең исемен ҡараға буяп, ҡыҙы, Сәмәрәһе, тыуҙы. Бик йәш булғанғамы, Ғәлимә нисек әсә булғанын үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Барыһына ла бер иртә сәбәпсе булды. Кистән уны ауыл советы председателе Ихсанбай иҫкәртте:

— Ҡыҙыҡай, иртәнге биштә һине күпер эргәһендә көтәм. Фермаға барып иртәнге һауымды үлсәр кәрәк. План буйынса! — тине.

Аңын-тоңон, айыш-тойошон аңламаған ҡыҙ иртүк сығып кашауай санаға түшәлгән ялбыр толопҡа сумды. Их, рәхәт! Исмаһам, әҙерәк йоҡлап алыр. Ихсанбай уны башынан аша бөркәп, толоп ситтәрен ҡымтыштырҙы:

— Йоҡла, бәпесем! Бәү-бәү...

Кистән клубта табанының ҡысыуы ҡанғансы бейегән Ғәлимә, ысынлап та, сана шыуған ыңғайға, толоп йылыһына йоҡоға талды.

Ғәлимә уянғанда таң әре-һәре яҡтырып килә ине. Эргәлә ҡарайып бесән кәбәне күренә. Ихсанбай ҡапыл атын туҡтатты, уяулы-йоҡоло ятҡан ҡыҙҙы толобо-ние менән күтәреп кәбән төбөнә һалды. Ғәлимәнең күҙенә күктә секерәйешеп янған йондоҙҙар бейегән, унан бергә уҡмашҡан һымаҡ булды ла ҡапыл байыған ҡояштай ҡыҙарып тонйораны...

— Ихсанбай, ағай, беҙ... уй...

Көндөҙҙәрен дә, төндәрен дә тынғы бирмәй һыҙлаған түшенең ауыртыуы кәмегәндәй Ғәлимәнең, етлеккән, иш һорап донъяны тарһына башлаған күңеленең ярһыуы баҫылғандай. Ихсанбай үҙе менән мул ғына итеп ит тә, араҡы ла алған булып сыҡты. Улар шул кәбән төбөндә төшкә тиклем маташтылар. Ғәлимәнең тешләнгән ирендәре күбеп, күҙ төптәре ҡара янып сыҡты. Ҡайтырға йыйына башлағас, Ғәлимә, наҙланып, ишенә һырығырға самаланы:

— Мине ташламаҫһыңмы, ағай?!

— Ҡара әле, ҡыҙыҡай, — Ихсанбайҙың күҙҙәре ҡырыҫлыҡ, буй етмәҫлек эрелек менән ялтыраны. — Кәрәккән-кәрәкмәгәнгә миңә һүҙ ҡушма һәм, ғөмүмән, бөгөнгөнө... төш тип уйла. Төшөндөңмө?

Фермаға барып торманылар, ауылға бергә инмәнеләр. Ихсанбай уны кисеүҙә үк төшөрөп ҡалдырҙы.

Унан һуңғы ваҡиғалар Ихсанбайҙы онотторҙо, ләкин шул таңдың иҫтәлеге булып Сәмәрә тыуҙы. Һуғыштан һуңғы ир-атҡа ҡырғын килгән йылдарҙа, ғиффәтле ҡыҙҙарға кейәү сыҡмаған бер мәлдә, Ғәлимә үҙенең әҙәмсә тормошҡа сығыуынан өмөтөн бөтөнләй өҙҙө. Ҡыҙын ул ҡайһы саҡ берҙән-бер йыуанысылай күреп, самаһыҙ, шашып иркәләне, ә ҡайһы ваҡыт, бөтә бәләләренең башын унан күреп, сабыйының былай ҙа арыҡ ҡабырғаларын һананы. Төҫкә Ғәлимәнең күсермәһе булып тыуған ҡыҙ бала-

ны ауыл халҡы, нисек тырышһа ла, берәйһенә йәбештерә алманы.

Бала тыуғандан һуң уны кире эшенә саҡырманылар, уға фермаға барыуҙан башҡа әмәл ҡалманы. Тик был юлы Ғәлимә юҡҡа ғына ҡурҡҡан булып сыҡты. Ферма мөдире уны эшкә килгәндең иртәгәһенә үк аҙбарҙың ҡараңғы мөйөшөнә ҡыҫты.

— Алдынғы яһайым! Герой, депутат итәм! Һин миңә ҡыҙ сағыңдан бирле оҡшайһың!

Тыржыҡ танаулы, шаҙра Саяф Шәмсетдинов Ғәлимәнең күңеленә хуш килмәһә лә, ир-иблис үҙенекен итте:

— Ярар, — тине быуыны ҡорой барған Ғәлимә, — тик мин барҙа башҡа бисәләргә ыҡшандама...

— Һин барҙа! — Саяф ҡатындың төймәһе өҙөлөп төшкәндән асылып киткән күкрәгенә ҡарап шаҡ ҡатты:

— Ну байлыҡ икән, әй, үҙеңдә! Бөгөндән башлап улар... минеке, Ғәлимә!

Үҙенән ете йәшкә оло, тамырҙа көйө ҡороған ағастай кипкән бисәһе менән сағыштырғанда, Ғәлимә ысынлап та Саяф өсөн ожмах баҡсаһы ине. Икәүҙән-икәү ҡалған саҡтарында һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәне, яратышып дармандары ҡороманы.

— Алам да ҡуям һине, Ғәлимә, — тине Саяф бер төшөрөп килгәнендә. Хатта:

Ҡулымдағы балдағымдың
Исемдәре Бәҙерей.
Ҡатын алһаң ал бисәнән,
Әҙер һыйыр, әҙер өй, — тип тамаҡ төбө менән һамаҡлап та ебәрҙе.

— Ә партияң?

— Әй, төкөрәйем дә партияһына! Уны үбеп буламы ла, ҡосаҡлап ятып буламы? — тип йәнә ғыж-ғыж хахылданы Саяф кәйефләнеп, батырайып алғас.

Әммә һәр миҙгелдең сиге бар, төн үтә, таң ата, ә таң менән эшкә, эштән һуң политучеба. Саяф — хөкүмәт әтәсе, ундай-быңдай сәйәси эштең үҙәгендә ҡайнай.

Шулай ғүмер үтә торҙо. Ғәлимә ауырға ҡалған һайын түбән ос Тайба ҡарсыҡҡа йүгерҙе. «Үлтермә, инәй... Ҙурайып бара! Һарығымдың көҙгө бәрәсе һиңә!» «Ҡара, ҡыҙыҡай, гонаһы үҙеңә!» Ҡурҡыуынан ағарған, йөрәген усына йомған Ғәлимә ҡаҡ иҙәнгә ятып, ҡарсыҡтың әмәл иткәненең көтә. Ошо хәлдәрҙән ул нисә тапҡыр ҡанһырап ятты, ятҡан һайын: «Ошонан тере ҡалһам, Сәмәрәмде бер ҙә ҡаҡмам!» — тип Хоҙайҙан ғүмер, ярлыҡау һораны, тәүбәһенә килде. Быңа әле лә ул кис менән ҡарсыҡҡа килеп йығылды, инәлде, ялбарҙы, барыбер үҙенекен эшләтте, ә ауыры һаман төшмәй. Ҙурайып киткән, тигәйне ҡарсыҡ, ысындыр. Ах, әгәр ошонан да ҡотолһа! Юҡ, ҡотола алмаясаҡ Ғәлимә, хәҙер бит Саяфҡа хисапсы өҫтәлде. Ғәлимәнән һорап та тормай, эшкә килеү менән ҡараңғы солан мөйөшөнә ҡыҫтаны шул гәрип. Иң сәйере шунда: Ғәлимә, эйе, был осраҡты бутап та, яңылышып та булмайҙыр, уның тын алышында, үҙен тотошонда, булмыш-бөтмөшөндә... Ихсанбайҙы таныны!

Ғәлимә, эсен бороп тулғаҡ тота башлағас, ҡата ғына эләктереп, ялан өҫ көйө бәҙрәфкә сығып йүгерҙе. Шаурап ҡан киткәс, артынса күкәй эсендәге себеште хәтерләткән, һабынлы һыуға тонсоҡҡан яралғы, яры күҙҙәрен сытырайта йомоп, бармаҡтарын көсәнеп йоҙроҡҡа уҡмаштырып, эбрәкәйҙең иҙәненә туп итеп килеп төштө. Дердер ҡалтыраған Ғәлимә уны ҡата кейгән аяғы менән тишеккә этте.

— Уф! Эшкә һуңлайым инде! — Шунан Ғәлимә ҡабалан-ҡарһалан кейенеп, тамағына ашап та тормаҫтан, ферма үренә тәнтерәкләне...

* * *

Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышынан һуң Ихсанбай фермалағы хәлдәрҙе тәртипкә һалыуға ныҡлап тотондо. Иң алда ул бөтә һауынсыларға ла һыйырҙар һанын тигеҙ бүлеп биреү мәсьәләһен ҡабырғаһы менән ҡуйҙы. Шул рәүешле Ғәлимә үҙенең ете «батрагынан» яҙҙы. Йәш

быҙауҙарға эсереүгә киткән һөттөң күләмен дә асыҡланы, һәм Ғәлимә шулайтып икенсе сығанағынан да яҙҙы. Саяф хисапсы менән бер нисә тапҡыр дәғүәләшеп тә ҡараны, ләкин тегенеһе аяҡ терәп үҙенең һүҙендә тороуын белде. Ахырҙа Ғәлимә уны үҙе аулаҡта осратып һөйләшеп ҡарарға булды:

— Нигә минең менән эттәшәһең, иптәш хисапсы?

— Эттәшергә мин һиңә этме?

— Нимә, Мәҙинәне алға сығарырға була тырышыуыңмы? Әллә ул... һәйбәтерәк бирәме?

— Кешенән оялмаһаң, Алланан ҡурҡ, Ғәлимә!

— Ах, һин үҙең Алланан ҡурҡа торған кешеме?!

— Миңә һин хөкөмдар түгел!

— Теге саҡ... кәбән төбөндә... минән бисә яһағанда... Алланан ҡурҡҡанға әйтәм оҡшағайның!

— Аҡылдан яҙғанһыңдыр! Ниндәй кәбән төбө? Һин нимә һөйҙәйһең?

— Буҡҡа тейһәң, иптәш хисапсы, еҫе китмәҫ! Минең менән булһаң, мандый алмаҫһың! Мин соҡона баштаһам, башыңды тығыр ер тапмаҫһың!

Хисапсыны шаңҡытып, Ғәлимә ишекте шарт ябып сығып китте. Асыуынан һыҙланыуҙарын онотоп, вагонеткаға мал аҫтын тейәй башланы Ғәлимә. Ахыры күберәк тә һалып ташлаған — көсө етмәгәс, вагонеткаға бөтә кәүҙәһе менән ятып этәрә башланы, маңлайынан хатта һалҡын тир бәреп сыҡты. Эсендәге үс, гәрлек — барыһы бергә ҡайнаны. «Ихтираз! Ҡайтҡан бит әле еҫәйрәлеп! Шуның арҡаһында Ғәлимә елэктәй сағында һүҙ күтәрҙе, ғәйептән бала тапты! Мунса бәрейе кеүек булып үҙгәргәс тә, кеше танымаҫ тигәндер! Арҙан! Өйөр айғыры!» — асыу-ярһыу менән Ғәлимә тағы ауалатҡансы вагонетка тултырҙы, йән асыуы менән этеүе булды — эсендә ниҙер өҙөлдө, тәне буйлап йылы тулҡын ағыуын тойҙо. «Уф! Ояты ни тора... Берәйһе күрһә... Былай ҙа...» — ул һыйырҙарға ышыҡланып, сүкәйеп ултырҙы. «Бәлки, үтеп китер, туҡтар, уның был һыйыр аҙбарына әҙ түле түшәлдеме?» Юҡ, ҡан шаурап ағыуын белде. Ғәлимәнең башы зыңлай, күҙ алдары ҡараңғылана, уҡшый башланы һәм, аңын юғалтып, көйөш алып тынс ҡына ятҡан һыйырҙың йылы ҡабырғаһына ауышты...

* * *

Ғәзизенән сәләм алған Мәҙинә осоп-ҡуныып, ҡанатланып-талпынып эшләне. Һауын бөткәс, һыу йылытып, һәүкәштәренең бер нисәһен йыуып та алды. Сират Бөйрәкәйгә етте. Һыйыр, ызылдап, Мәҙинәнең битен, ҡулдарын ялап алды. Йәнәһе, һағынған, ә Мәҙинә эргәһенә килмәй интектергән. Былай табан аҡһай-туҡһай хисапсы килгәне күренде:

— Иң күп һөт һиндә, Мәҙинә! Былай булһа, герой әхирәтеңдең танауына сиртәһең! — тине ул ғыжылдап.

— Ә мин, ағай, булғаны менән ҡәнәғәтмен. Миңә алға сығыу кәрәкмәй.

— Бәй, һинең герой булғың килмәйме ни? Батрактарын тартып алғас, быҙауҙар эскән һөттө айырып яҙғас, әхирәтеңдең танауы нисек төшкәнен күрһәң!

— Һәр кемдең үҙ мәйеле, ағай... Миңә былай ҙа һәйбәт.

— Тағы ла нығыраҡ һәйбәт булыуын теләмәйһеңме ни?

— Юҡ! Йондоҙ булһаң, табыналар... йәнә ҡаныгалар...

— Фәлсәфәң... ҡыҙыҡ икән...

— Кемгә нисектер инде...

Нисек һөйләшһә лә Мәҙинә күңеленә күпер һала алмаған хисапсы: «Туҡта әле... бил бирмәҫ батыр, кисеү бирмәҫ йылға булмаҫ!» — тип эсенән һөйләнеп ары туйтаңланы. Мәҙинә Бөйрәкәйен һылап-һыйпап йыуыуын белде: «Вә-эт... ҡайһылай матур булып ҡалды минең һәүкәшем!.. Минең дә бөгөн кәйефем шәп! Бөгөн минең байрамым! Күптән көткән сәләм килде миңә алыҫтан! Ах, Бөйрәкәй! Һөйләшә белһәң, эсемдәге шатлығымды бүлешер инем, исмаһам...»

Мал аҫтын тейәргә вагонетка кәрәк булғас, Мәҙинә Ғәлимә янына йүгерҙе һәм...

— Ғәлимә! Әхирәт! — Ул ҡурышып, тартышып һыйыр эргәһендә ятҡан ҡатынға эйелде, күтәрергә иткәйне — ҡулы ҡанға мансылды.

Ғәлимәне атҡа һалып алып, Мәҙинә уны өйөнә алып китте. Өй һыуынған. Мейес яғылмаған. Ҡаҡ һикелә бөҙрә сәсле, зәңгәр күҙле ҡыҙсыҡ бөршәйеп ултыра.

— Ғәлимә! Ас әле күҙеңде! Һиңә ни булды, Ғәлимә?

Аңына килә башлаған Ғәлимә күҙҙәрен асты:

— Нимә булғанын... күрмәйһеңме?

— Әллә... һәнәккә ултыра төштөңмө? Яраң бармы?

— Ниндәй һәнәк...

— Ә нимә булды һиңә?

— Ут яҡ, һыу йылыт!

— Ах, Ғәлимә!

— Үләмдер инде... Кеше... күрмәнеме... Көлөрҙәр инде, һөйҙәрҙәр...

— Күрмәне... Мин санаға һине үҙем һөйрәп һалдым. Ә нимә булды һиңә?

— Әллә ысынлап бер ни аңдамайһың, әллә... Һуң, һин дә бала тапҡан ҡатын да баһа!

— Бында бит бала... юҡ!

— Ҡан туҡтамай! Мин... — Ғәлимә йәнә иҫтән яҙҙы. Ҡанһырап ятҡан эсәһен күреп, балаһы буҫығып илап ебәрҙе. Бала илауы Ғәлимәне йәнә иҫенә ҡайтарҙы. — Балам етем ҡалыр микән ни, Мәҙинә! Иҫләйһеңме... Эй бейей инек! Йәш инек... Итек булмағас, тыҡылдап торһон тип, быймаларыбыҙҙы һыуға тығып алабыҙ ҙа туңдырабаҙ... Шунан бейейбеҙ... Баш әйләнә, ә беҙ бейей...

Мәҙинә ҡурҡыуға ҡалды. Нишләргә? Бәләкәй сағында Фәүзиә күршеһе уны үҙе менән ҡырға үлән йыйырға алып бара торғайны. Дарыу үләне күрһә, Мәҙинәгә: «Үләндән рөхсәт һорап, өҙ ошоно!» — тиер ине. «Инәй, ә нигә үҙең өҙмәйһең?» «Һинең, ҡыҙым, гонаһың юҡ, ҡулың еңел. Һин өҙгән үләндән файҙа күберәк», — тиер ине. «Ә был йоморо башлы үлән нимәгә?» «Ә-ә... Уның төнәтмәһе күп ҡан юғалтыуҙан. Ул ҡан китеүҙе туҡтата...» Әбейҙән белеп ҡалған дарыу үләндәрен Мәҙинә хәҙер үҙе лә йыя. Ул, ҡапҡа төбөндә егеүле торған атҡа ултырып, йәһәт кенә өйөнән шул үләнде килтерҙе, ҡайнатып төнәтмәһен эсерҙе, Ғәлимәнең ауыҙын шаҡарып тиерлек асып шәкәр эретмәһе ҡойҙо.

Бер аҙҙан Ғәлимәнең битенә ҡыҙыл йүгерҙе.

— Һыйырҙарҙы...

— Үҙем һауырмын. Торма.

— Их, әхирәт! Барлыҡ яраштыра, юҡлыҡ талаштыра. Һинең менән бүлешер нәмәбеҙ бармы ни беҙҙең?

— Талаштыра?! Талашҡаныбыҙ бармы ни беҙҙең?

— Юҡ та ул...

— Булмағас... Әйҙә, фермаға кил, бергә эшләйек, тип үҙең саҡырҙың...

— Эйе, эйе, әйттем... Кеше һораһа, йөрәге ауыртҡан, тип әйт, йәме!

— Әйтермен. Ҡыҙыңды ашаттым. Ҡуҙғалма... Үтеп китер...

— Хәҙер һин алға сығаң инде, Мәҙинә...

— Ай алла! Таптың борсолор нәмә! Башың иҫән ҡалғанға шөкөр ит Хоҙайға!

— Их, Мәҙинә! Һин әйтәһең дә ул... Һин сәхнәгә сығып бер йырҙаһаң бөтә ғәләмдең башын әйҙәндерәң, ә минең «алдынғы һауынсы» тигән исемемдән башҡа...

— Ҡыҙың бар, Ғәлимә...

— Ах, Мәҙинә, һиңә мине аңдау ҡыйындыр инде... Ул бала... миңә һәр саҡ халыҡ араһында кисергән оятсылығымды иҫкә төшөрә...

— Баланың ни ғәйебе?

— Әйтеүе еңел! Юҡ!.. Һин мине аңдауҙан... йыраҡһың! — Ғәлимә күгәреп ҡатҡан ирендәрен ҡымтып, стенаға әйләнде.

* * *

Ғәзимә Мәҙинә өсөн торғаны хазина булды. Килеү менән ең һыҙғанып кәсепкә кереште: кешенән йөн, кәзә ҡылы һатып ала ла, сандалиҙар бәйләй. Үксәһенә иҫке-

моçҡо итек ҡуңысын тегә, һәм бынамын тигән аяҡ кейеме килеп сыға. Ә иләгән йөнө! Әйтерһең дә уны кеше ҡулы түгел, Хоҙайҙың ҡушыуы менән илаһи еп һуҙыу ҡөҙрәтенә эйә үрмәксе яһай! Шул ептәрҙән биҙәктәр һалып кофталар, итәктәр бәйләй. Шуныһы ҡыҙыҡ: ул был эштәрҙе бик тиҙ башҡара. Хәҙер инде уға заказ биргән кешенең хисабы юҡ. Мәҙинәләрҙең өйө ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә оçтаханаға әүерелде лә ҡуйҙы. Маһинур ҙа шунда ҡайнай, оçтабикә уға әллә ни нәҙәкәт талап итмәгән эштәрҙе ҡуша, мөһимдәрен тик үҙе башҡара. Маһинурҙың кәзәләре байтаҡ. Ғәзимә:

— Бәрәсен мөгөҙө тирткәнгә тиктем имеҙһә, үҙе еткән. Быларҙы нигә һаман инәләренә ҡушаң? — тип аптыраны. Һәр нәмәнән файҙа алыу яғына башы эшләгән Ғәзимә бәрәстәрҙе тиҙ арала инәләренән айырҙы һәм, кәзәләрҙе һауып, ҡымыҙ яһау эшенә кереште.

— Эс, ҡыҙым, эшең ауыр, бирешеп, ауырыуға һабышып ҡуйма. Үпкәң бер йәнселгәс, ҡурҡыныс ул! — тип, Мәҙинәне бер өҙлөкһөҙ кәзә ҡымыҙы менән һыйлай башланы. Мәҙинә хәҙер беләгенә көс ҡунғанын үҙе лә тоя. Кәзә ҡымыҙы эсергә теләүселәр ауылда ла табылды, Ғәзимә уларға ҡымыҙ бирә, ә тегеләр он, ит, бойҙай килтерә. Бәйләгән-теккән әйберҙәренә лә Ғәзимә хаҡты тик ризыҡ менән ала.

— Ауылда тик ата ялҡау ғына ас йәшәй, — ти ураған һайын Ғәзимә. — Зингер машинамды ғына килтереп алайым! Дауытымды атаһы ҡайтыуға бурһыҡ балаһылай итеп ҡуймаһаммы!

Өйө ҡараулы, балаһы тәрбиәле булғас, ферма эшенән бушаған ваҡытын Мәҙинә үҙе ойошторған хорҙы көсәйтеүгә бирә. Музыка ҡоралдарында уйнай белгән кешеләрҙең өйҙәренә йөрөп сыҡты. Хыялы — башҡорт халыҡ йырҙарын дөрт тауышҡа һалыу һәм халыҡ инструменттары ансамбле оҙатыуында башҡарыу. Был теләк уға ятһа ла, торһа ла тынғы бирмәне, бар булмышын биләп, йәнен асмандарға ашырҙы. Әле ул бесән кәбәне аçтында туңмаған ерҙе соҡоп, ҡара тупраҡ алып инде. Үҙе юҡта ҡороған гөл һауыттарын соландан индереп, һәр береһенә ярмаланып торған ҡара тупраҡ тултыра башланы.

— Әллә инде гөл ултыртырға йөрөйһөң? — Ғәзимә, эшен ҡуйып, Мәҙинә эргәһенә килде.

— Теге тубырсыҡтағы ете сәтләүек морнаған...

— Шулаймы ни?

— Бына... аҡһыл ғына ҡойроҡтары бар.

— Бисмиллаһи-рахманир рәхим! — Ғәзимә, еңел ҡуҙғалып, үҙе лә эшкә кереште. — Әлегә өйҙә үçһендәр, аҙаҡ тышҡа сығарырбыҙ...

— Беҙҙә былар үçер микән?

— Ә нигә үçмәһен? Әле кем уның орҙоғон мында әпкилеп сәсеп йөрөгән? Улар бик һур булып үçә, тине минең бабай. Уның майын һығып эскән кеше йөҙ йәшәй, тине.

Орлоҡтарҙы тупраҡҡа күмгәс, һауыттарҙы тәҙрә төптәренә теҙҙеләр. Өйҙә моңһоу, өмөт менән мөлдөрәмә тулы тынлыҡ урынлашты. Һәр кем үҙенсә уй ебен һүтте.

«Бигерәк кенә йәш бит был Мәҙинә. Көтөп тә Әптеләхәте ҡайта алмаһа, ғүмеркәйе заяға үтәсәк бит бының! Был һылыулығы менән арыу ғына, Дауытҡа атай булырлыҡ кешеһе лә осрар ине... Ә үҙе һуң? Ғәзимәгә кешеһе осраманымы ла, Ғәзимәме көтмәне? Тик был бит бигерәк йәш, һылыу... Теге... экиәттәге хур ҡыҙы тигәндәре ошолай буламы икән?»

«Их! Теләгән теләктәрем ҡабул булып, Әптеләхәтем ҡайтып төшһә! Күңел яраларын бөтәштерерлек һүҙҙәр, тән йәрәхәтенә сихәт булырҙай дауалар минме тапмаç инем?! Бары ул ҡайтып: «Мәҙинә, мин һине яратам!» тиһен генә...»

Орлоҡтарҙың һәр береһен: «Саҡырығыҙ минең һөйгәнемде, теләкхыялдарымды елдәргә еткерегеҙ», — тип күмде. Кедрҙың изге ағас ика-

нен кемдәндер ишеткәйне Мәҙинә. Әптеләхәт тә был ағастың орлоҡтарын уға юҡҡа ебәрмәгән. Эй Хоҙайым! Бер генә нәмәне үтенәм һинән: мөхәббәтемдән яҙҙырма!..»

Башта Ғәзимә уйҙарынан арынды:

— Бөгөн нindәй көн әле?

— Йома... Мин, инәй, Таулыға, атайымдың хәлен белергә барып килергә ниәтләнгәйнем.

— Атаҡ, бар! Арыу итеп күстәнәс ал, балаң өсөн борсолма — беҙ бар. Һыйырҙарыңды алып ҡалырҙар...

Уйлаған эш — бөткән эш. Мәҙинә, биштәренә атаһына алмаш кейем, аҙыҡ-түлек һалып алып, Таулыға илткән оло юлға сыҡты.

* * *

Мал ҡышлатыу мәшәҡәтенән арынып бөтмәне, Камалетдинов өсөн йәнә яуаплы осор — яҙғы сәсеүгә әҙерлек башланды. Йыш ҡына МТС-тарға сыҡты, сәсеү техникаһының әҙерлеген үҙе тикшерҙе. Орлоҡ мәсьәләһе лә ҡырҡыу тора, уның өҫтөнә башҡалары ҡушыла. Тәүлектә утыҙ сәғәт булһа ла өлгөрә алмаҫын белә Әйүп. Һуғыш ваҡытында миктәп ҡалған хужалыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыуҙың ауырлығын үҙ елкәһендә татыған кеше генә беләлер... Унан һуң район советы башҡарма комитеты, райком бинаһы иҫкерҙе. Бүлмәләр етешмәй, ҡыйығынан һыу аға... Урманға юл ҡалмаҫ элек төкәтмә эшләтер өсөн ағас килтерергә лә кәрәк.

Таулының ултырған ере лә дүрт тарафтан өргән елдәргә түшен асҡан. Элек эшләгән баҡыр иретеү заводы тирә-яғындағы урманды «ашап-ҡырып» бөткән, хәҙер унда яланғас тау битләүҙәре генә ялтырап ята. Һәр нәмәгә рәссам күҙҙәре менән ҡараған Камалетдинов былтыр көҙҙән шул тауҙарға урман ултыртыу эштәрен башлағайны, ер ҡарҙан әрселгәс тә шуны дауам итергә кәрәк, ә был үҙ сиратында өҫтәмә сығымдар талап итә. Уның араһында клубтар, китапханалар, мәктәптәр... Бөтәһе лә иҫкергән. Бөтәһе лә ана йығылам, бына ишеләм тип ултыра. Ауылдар ҙа иҫкерҙе, ирҙәрҙең күбеһе һуғыштан ҡайтманы. Терәүҙә лә таяуҙа торған өйҙәргә инеп, һуғыш бөткәс тормош яҡшырыр тип көткән тол ҡатындарҙың өмөтһөҙ йөҙҙәрен күреү бәгерҙе телә...

Онотолоп китһәң, эшләйһең дә эшләйһең, тик бит әҙәм балаһы шулай яратылған: эштән генә тормай. Күрәҙәсе ҡарсыҡ менән һуңғы һөйләшеү һаман уға тынғы бирмәй. Эштән башы һил булған төнгө сәғәттәрҙә ул Мирхәйҙәров менән һөйләшеүен бер нисә тапҡыр хәтерендә яңыртты:

— Ауылда Хашимды күрә алмаған кеше бармы?

Мирхәйҙәров уйлана бирҙе:

— Теге шикәйәт буйынса әйтәһеңме?

— Хашимды ҡулға алыуға шул сәбәпсе булды бит.

— Белмәйем инде. — Һөйләшеү Мирхәйҙәровтың өйөндә, төндә барғанлыҡтан, улар ярым бышылдауға күсте. — Суд органдары ла эшләп еткереңкерәмәй. Фәүзиә ҡарсыҡтың да, Ихсанбайҙың да һөйәктәре янған өй урынында табылманы.

— Эште малайҙарҙың юғалыу ваҡиғаһы тотоп тора...

— Белмәйем инде... Хатта малайҙарҙы ысынлап та Ихсанбайҙыҡы тип уйлаған сүрәттә лә... Хашимдың ҡарсыҡты, Ихсанбайҙы, ике сабыйҙы бер ыңғайҙа юҡ итергә... Ю-у-уҡ... Хашим булдыра торған эш түгел был. Унан һуң, Әйүп Ғәзизович, суд органдары шул уҡ төндә Зарифаның, Хашимдың апайының, Ихсанбайҙың һөйәркәһененң юғалыу фактын иҫкә алмай...

— Ә... Зарифаның ире ҡайҙа?

— Ишмәмәтме? Хисапсы. Теге алйот Шәңгәрәйҙең атаһы.

— Эй-йе... Ептең осо бик ныҡ йәшерелгән. Ә Мәҙинә... теге ҡарсыҡтың кеме?

— Мәҙинәме? Бер кеме лә түгел. Күршеләр ине улар.
— Мәҙинәнең әсәһен бүре ашанымы инде?
— Халыҡ шулай һөйләй. Шул Ихсанбай, Ишмәмәттәр тартып алған һыйырын юллап Таулыға сыҡҡан булған бит инде ул…
— Нисек сисергә был сер йомғағын, ә, Азат Әһлиевич?
— Әллә инде…
— Суд органдары тағы бер кешене иҫкә алмай.
— Кемде?
— Ихсанбайҙың ҡатынын! Лоҡман Талиповичтың… һеңлеһен!
— Ә ул ҡайҙа?
— Ул психушкала, Азат Әһлиевич!
— У-һу-у!
— Беләһеңме, Азат Әһлиевич, һеҙ бында бер нәмә белмәй ятһағыҙ ҙа, — Камалетдинов үҙенең профессиональ разведчик булғанын Мирхәйҙәровтың иҫенә төшөрөп алырға булды, — минең разведка эшләп тора һәм һеҙгә шул мәғлүм булһын: ҡарсыҡ тере!
— Фәүзиәме?
— Фәүзиә түгел уның ысын исеме. Барсынбикә. Теге тимерсегеҙ ҙә Сибәғәт булмаған. Диңгеҙхан! Диңгеҙхан Моратов.
— Барсынбикә, Диңгеҙхан… Теге… тархан тоҡомонан килгән…
— Кем тоҡомолор, бик бай булғандар, шикелле.
— Ғәжә-әп… Ләкин мине тик ята икән был тип уйлаһаң, төптө яңылышырһың, иптәш генерал! Әле мин һинең янға шундай мәғлүмәттәр менән барырмын — суд органдарының ике ятып бер төшөнә инмәҫ!
— «Бирһен Хоҙай!» тиҙәрме әле былдай саҡта? Мин бер генә нәмәне — Мәҙинә һәм… ҡарсыҡ ниндәй ептәр менән бәйләнгәнен асыҡлай алманым.
— Уныһын әлегә… мин дә әйтә алмайым.
Бына шундай һөйләшеү булды улар араһында. Таң менән Камалетдинов юлға сыҡты. «Тәрән үҙәк»-те үткәнсе, Мирхәйҙәров уға тағы бер ат эйәртте.

— Нигә кәрәк ул? — тип Камалетдинов баш тартырға уйлағайны, Мирхәйҙәров уйынан дүнмәне:
— Бүре күп. Һунарсылар нимә ҡарайҙыр, — тип, Әйүптең баҡсаһына таш ырғытҡандай, һуҡранып алды.
Бына хәҙер Камалетдинов йәнә ҡарсыҡ ҡаршыһына барып баҫырға әҙерләнә. Нимә бирер уға был һөйләшеү?

* * *

Хашим байтаҡтан бирле камераһында ел олоуын тыңлап ята. Ул берсә йәш бала тауышын хәтерләтә, йә эс-бауырҙы өҙҙөрөр үкһеүгә әйләнә, йә ҡырағай йәнлектәрҙең шашып болоҡһоуын әләкләгәндәй тойола. Ул, тороп, карауатынан аяҡтарын һәлендереп ултырҙы. Төндә күргән төшөн инде нисәнсе ҡат хәтеренән уҙғарҙы. Имештер, Мәҙинәһе көҙгө ҡаршыһында торған да сәс тарай: «Атай, әллә бер генә толом үреп төшөрәйемме?» «Ҡуй, ҡыҙым, икәү ит. Һиңә пар толом килешә!» — ти Хашим. Ни күрһә лә Хашим былай ҙа юлға юрай, ә был бит асыҡтан-асыҡ юл төшө! Ҡыҙына толомон икенән үрергә ҡушып, Хашим һәйбәт итте. Һәр хәлдә, уның күңеленә шулай тойола. Балаһын, донъяһын ташлап, ҡыҙының килеп йөрөмәгәне яҡшы булыр ине лә… Бигерәк һағындырҙы бит әле үҙе! Ейәне ултыра ла башлағандыр инде… Оҙаҡланы Хашим, бик оҙаҡланы. Ҡайһы саҡ өмөтһеҙлеккә бирелеп китһә лә күңеле тыныс былай. Әле бына следователде алыштырҙылар. Ҡырҡты үткән ҡатын үҙен:
— Шакира Хисам ҡыҙы Әҙелғужина булам, — тип таныштырҙы. — Һеҙҙең эште мин алып барасаҡмын. «Дело» менән ныҡлап таныштым. Ҡайһы бер нәмәләргә генә асыҡлыҡ индергем килә.
— Рәхим итегеҙ…
Ҡатын, мул ғына сал төшкән ҡабарынҡы сәстәрен артҡа һыпырҙы ла уйлана төштө:
— Ҡыҙыҡ. Беҙ һеҙҙең менән бер дивизия кешеләре булып сыҡтыҡ.

— Шулаймы ни?! — Хашим күптәнге дуҫын күргәндәй шатланды. — Бына һәйбәт!

— Был әлегә... икебеҙ генә белгән сер булһын.

— Эйе, эйе...

— Инде эшкә күсәйек: Сәбиләнең ата-әсәһе тереме?

— Юҡ. Һуғыш мәлендә үк үлгән улар.

— Ниндәйерәк холоҡло ҡатын ине ул Сәбилә Моратова?

— Ниндәйерәк тип... Ул бит сығып, кеше менән бигүк аралашып йөрөмәне.

— Ауыл ерендә улай йәшәп була тиме ни?

— Ә нигә йәшәмәһен? Ире мал тапты. Ҡәйнәһе донъяға үҙе баш ине, шикелде. Эйе, эйе! Фәүзиә арыҫлан тотоп менерҙәй ҡарсыҡ ине бит инде ул...

— Таулыла уның туғандары бармы?

— Бар... Ағаһы. Балнистың баш врачы. Ихсанбайҙы һуғыштан ул алып ҡалды, тип һөйҙәнеләр...

— Хәҙер Сәбилә ҡайҙа?

— Унының белмәйем...

— Ихсанбай менән нимә бүлешмәнегеҙ?

— Беҙ... бер ҡыҙҙы яраттыҡ.

— Һинең... ҡатыныңды... Кем ине әле ул?.. Насибуллина...

— Ул Насибуллина йөрөмәне. Беҙ яҙылышмағайныҡ. Ул әсәһенең фамилияһын йөрөттө. Хоҙайғолова.

— Ә теге ике сабый. Улар...

— Малайҙар ҙа, ҡыҙ ҙа — минеке. Үҙемдеке.

— Насибуллин, һеҙ бит бөтәһен дә ихлас һөйләмәйһегеҙ. Шуның менән тикшереүҙе бик нығ бутайһығыҙ.

— Тимәк, дөрөҫөн мин түгел, һеҙ беләһегеҙ булып сыға? Улай булғас, тикшереү нимәгә?

— Мин һеҙгә ярҙам итергә теләйем, Насибуллин!..

— Ярҙам итергә теләгәс, Ихсанбай менән Фәүзиә ҡарсыҡты, Сәбиләне табыр кәрәк. Тик... малайҙарҙың үлемен улар ҙың да ниндәйҙер асыҡлыҡ индереүенә ышанмайым...

— Ышанмаҫҡа мөмкин, ләкин баш кейеме һәм сандали Фәүзиәнең өйөндә табылған!

— Унынһы — шулай. Ләкин ҡарсыҡ ул әйберҙәрҙе юҡ итә лә ала ине...

— Нисек уйлайһығыҙ, Насибуллин: Фәүзиә Моратованың һеҙҙең ғаиләгә мөнәсәбәте нисек булды?

— Гөлбаныуға... бик яҡшы ине. Мәҙинәнең һөйләүе буйынса, һуғыш мәлендә ул минең балдарға бик нығ ярҙам иткән.

— Ә Мәҙинәгә?

— Мәҙинәгә? — Хашимдың күҙ алдына малайҙарҙы эҙләгән ваҡытта Мәҙинәнең ҡумырыҡҡа батыу ваҡиғаһы килде. — Һәйбәт ине. Хатта... бик һәйбәт ине.

— Бөгөнгә ял итегеҙ, Насибуллин. Өҫтәмә мәғлүмәттәр тапҡас, осрашырбыҙ...

— Рәхмәт инде, Шакира Хисамовна! Һеҙ килгәс, эскә йылы инде.

Хашим урынына тынысланып, шул уҡ ваҡытта йөрәкһеп барып ятты. «Эйе, эйе! Фәүзиә ҡарсыҡ Гөлбаныуҙы ла, Мәҙинәне лә яратты! Гел ҡурсыны! Ә Хашим менән аңлашыуҙары? Уны оноторлоҡмо ни?! Мәҙинәнең атаһы бәләгә тарығанын белһә, Фәүзиә ҡарсыҡ, тере була торған булһа, түҙеп ятмаясаҡ. Тик нимәлер тота уны. Килергә, ярҙам ҡулын һуҙырға ниҙер ҡамасаулай...»

Шундай уйҙар өйөрмәһендә ятҡанында ишек асылды:

— Хашим Насибуллин, на выход! Һеҙгә ҡыҙығыҙ килгән! — Дежур милиционер Хашимдың торғанын көттө. — Ҡыҙың шундай сибәр... Ирҙәме ҡыҙың, ағай?

* * *

Атаһы менән һөйләшкәндән һуң Мәҙинә бер килгәндә следователдә лә күреп сығырға булды. Следователь ҡатындың күҙҙәрендә ул баштағы аптырауҙың ҡыҙыҡһыныу менән алмашыныуын күрҙе.

— Әйҙүк, сибәр ҡыҙ, һөйләп ебәр, миңә һеҙҙе ни килтерҙе?

— Мин, Шакира апай, Насибуллин Хашим тигән кешенең ҡыҙы. Исемем Мәҙинә.

— Ә-ә, Мәҙинә! Бына һин ниндәй икәнһең!..

— Ә ниндәй?

Следователь ҡатын көләмһерәне:

— Беҙҙең ҡәҙимгә тормош өсөн артыҡ сибәр тип әйтәйемме...

Мәҙинә лә бер ҡарауҙа уҡ үҙенә ышаныс, ихтирам уята торған атаһы йәштәрҙәге был ҡатын менән асылып һөйләшеүҙе хуп күрҙе:

— Ҡырыҫлыҡ талап иткән һөнәрегеҙ өсөн һеҙҙең дә йөҙөгөҙ бигүк тап килмәй...

— Һеҙҙеңсә, минең кеүек кешеләр ниндәй һөнәр эйәһе булырға тейеш?

— Уҡытыусы... йәки врач...

— Афарин! Кешенең йөҙөнә ҡарап булмышын билдәләй алаһың икән йәш булһаң да... (Следователдең «һеҙ»ҙән «һин»гә күсеүенән Мәҙинә иркен тын алды). Мин һуғышты ысынлап та шәфҡәт туташы булып үттем. Ә һуғышҡа тиклем уҡытыусы инем...

— Хәҙер был эш нығыраҡ оҡшаймы? — Мәҙинә һорауым урынһыҙ булды, ахыры, тип уңайһыҙлана төштө, ә оялдымы — йөҙөнә ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерә...

Следователь, Мәҙинәнең йөҙөнә ҡыҙыл йүгереүен күргәнгәлер инде, өндәшмәйерәк ултыра бирҙе, унан ҡарашын тәҙрәгә төбәне:

— Һорауың... урынһыҙ түгел, Мәҙинә һылыу. Беренсенән, һуғыш һәр эште, талымланып тормай, теүәл һәм еренә еткереп үтәргә өйрәтте. Икенсенән, күп яҙмыштарҙы күреү, үҙемдең дә бәндә ҡулы менән барлыҡҡа килтерелгән тамуҡ аша үтеүем, тән йәрәхәтенән тыш күңел йәрәхәте барлыҡты төшөндөрҙө. Ябай күҙгә күренмәгән йәрәхәтте дауалау өсөн... скальпель һәм шприцтар ғына ярҙам итә алмай...

— Шакира апай, ирҙәр мине ғәфү итһендәр, ләкин... тик ҡатын-ҡыҙ ғына эҙмә-эҙлелек, түҙемлек, аңлау һәм ваҡ-төйәк кеүек күренгән факттарҙы аша атлап үтмәйенсә, ҡурҡмайынса... эште ахырына тиклем атҡарып сыға ала кеүек.

— Һы-һы... «Дело»ла һине «Алға» колхозының һауынсыһы тип...

— Эйе, мин һауынсы. Тирәклелә йәшәйем.

— Мин былай ҙа һинең менән осрашыуҙы планлаштырғайным. Үҙең килеп һәйбәт иттең. Инде танышттыҡ, хәҙер һиңә бер нисә һорауға яуап бирергә тура килер...

— Яҡшы... — Мәҙинә, кире урынына ултырып, следователь ҡатындың күҙҙәренә туп-тура ҡараны. — Мин әҙермен, Шакира Хисамовна.

— Минең һорауҙар ябайҙан булмаҫ инде, Мәҙинә. Беренсенән, мине... Ихсанбай менән әсәйең Гөлбаныу мәрхүмәнең мөнәсәбәте ҡыҙыҡһындыра. Әлбиттә, яуап биреүбирмәү үҙ мәйелеңдә. Ләкин алдан уҡ шуны әйтеп ҡуям: мин атайыңдың ғәйепһеҙ икәненә ышанам.

— Рәхмәт, Шакира Хисамовна. Атайымдың Тирәклелә булған ул хәлдәрҙә бер ниндәй ғәйебе булмауын әлегә тиклем мин, йәнә Фәүзиә инәй генә белә ине. Тик ул юҡ. Ә әсәйем менән Ихсанбай ағайға килгәндә... Ихсанбай ағай мине ФЗО-ға ебәреүҙән алып ҡалды. Ә мин исемлектә беренсе торған булғанмын...

— Бына ул исемлек. — Следователь Әҙелғужина уның алдына ҡулдан яҙылған исемлек килтереп һалды. — Күр: уны Ихсанбай төҙөгән.

— Аһ!

— Ни булды?

— «Н» хәрефе...

— Уға нимә булған?

— «Н» хәрефен был рәүешле яҙыу... Беҙҙә көндәлек һауымды яҙып баралар, минең фамилияны яҙғанда... ошо уҡ ҡул...

— Ә кем тултыра табелде?

— Ишмөхәмәт ағай, хисапсы...

Әҙелғужина папкаһынан тағы бер дәфтәр бите сығарҙы:

— Бына ошо «Н» кеүекме? — Ул ҡыҙыл түңәрәккә алынған «Н»ға төртөп күрһәтте.

— Эйе!

— Тимәк, Хашим Насибуллин өҫтөнән яҙылған шикәйәт, ФЗО-ға алыныусылар исемлеге, Ишмөхәмәт Баҡтымбаевтың военкоматҡа яҙған аңлатмаһы һәм... фермалағы табель — бөтәһе бер ҡул менән яҙылған?

— Ләкин...

— Ашыҡма, туғаным. Ихсанбай Моратовтың үлеме иҫбатланмаған. Төп мәсьәләгә күсәйек: Ихсанбай Моратов менән әсәйеңдең мөнәсәбәте.

Мәҙинә был юлы ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарҙы: әсәһенең төндәрен Ихсанбайҙарҙың тәҙрәһенә ҡарап моңланғанын, уйланғанын, «Зөлхизә»не йырлағанын, аҙаҡ мендәрҙәре еүешләнгәнсе илағанын һөйләй алмай бит инде ул. Ә малайҙарҙың битендәге Ихсанбайҙыҡын хәтерләткән миңдәре? Көфөр, көфөр... Баланың әсә хаҡында уйлай торған уйҙары түгел былар.

— Мин... башҡаса... ни ҙә булһа... — Мәҙинә тотлоҡто һәм йәнә йәшкә тулған күҙҙәрен Әҙелғужинаға күтәрҙе. — Әсәйем... һәйбәт кеше ине минең... Тик бына атайым менән ихлас йәшәмәнеләр кеүек...

— Ихлас йәшәмәнеләр? — Шакира Хисамовнаның тауышы был юлы айырыуса иркә яңғыраны.

— Әллә... Ахыры, әсәйем... берәүҙе яратҡан, икенсегә кейәүгә сыҡҡан.

— Һәм ул яратҡан кеше... Ихсанбай Моратов булған. Шулаймы?

— Әлләсе. Бәлки...

— Әсәйең дә һинең ише бик сибәр инеме?

— Мин нимә?! Уның... күҙҙәре диңгеҙ төҫөндә, юҡ... күк төҫөндә ине! Ул... шундай сибәр, шундай һөйкөмлө һәм йәш ине!

— Һәм шундай...үлем! Ҡыҙғаныс, әлбиттә... — Әҙелғужина сигарет ҡабыҙҙы. — Ғәфү үтенәм...

— Фәүзиә инәй: «Мин уны бәндә хөкөмөнән ҡурсып ҡала алдым, Хоҙай хөкөмөнән аралау минең ҡөҙрәттә булмай сыҡты!» тине.

— Ә ниңә ул шулай тине икән?

— Белмәйем. — Мәҙинә шымды. Бәлки, ул был аҡыллы, миһырбанлы сырайлы ҡатынға артығын да ысҡындыралыр?

— Ә Фәүзиә... күрше ҡарсыҡ... килене, Ихсанбайҙың ҡатыны менән нисек йәшәне?

— Ул өйҙән артыҡ хәбәр сыҡманы. Шулай ҙа яҡшы йәшәгәндәр, тип уйламайым.

— Ни өсөн?

— Инәй беҙгә ризыҡты... килененән йәшереп ташыны.

— Мәҙинә, һеҙ... Фәүзиәгә бит сит кешеләр. Туғанлыҡ ептәре менән бәйләнмәгәнһегеҙ. Ә ни өсөн ул, ҡаршылыҡтарға ҡарап тормайынса, һеҙгә ярҙам итте икән?

— Белмәйем.

— Ә миндә ул ҡарсыҡ шундай фекер уята. — Шакира Хисамовна бармаҡтарына ҡараны. — Бына улар... бишеһе биш башҡа тора, ләкин уларҙың ҡайһыныһын тешләһәң дә... берҙәй ауырта...

— Әсәйемдең әсәһен... Шәһәрбаныуҙы ерләгәндә лә Фәүзиә инәй бик ныҡ ярҙам иткән.

— Шәһәрбаныу Хоҙайғолова тураһында миндә справкалар бар. Сабаҡлы ауылы ҡыҙы булған бит Шәһәрбаныу. Әйткәндәй... Мин үҙем дә шул ауылдан.

— Донъяның... тарлығы!

— Тау менән тау ғына осрашмай, Мәҙинә һылыу.

* * *

Ҡояштай йылмайып, елдәй еңел хәрәкәтләнеп сығып киткән Мәҙинә артынан Әҙелғужина оҙаҡ ҡарап ҡалды. Әле Мәҙинә күҙҙән юғалғас та тәҙрәнән айырыла алманы. Был ҡыҙ ниндәйҙер менәндер үҙенең йәш сағын да хәтерләтә бирҙе. Иҫкене емерәбеҙ, яңы тормош төҙөйбөҙ тип дәртләнеп-хисләнеп, башына ҡыҙыл яулыҡ бәйләп, ҡоштай осоп йөрөгән саҡтары күҙ алдына килде уның. Айырма шунда: уның йәшендә Шакира күҙҙәрендә Мәҙинәнекеләй ғәм юҡ ине, буғай. Булмағандыр. Үҙҙәре хыял иткән тормош-

то төҙөү генә түгел, шуны дошмандарҙан яҡлап, һаҡлап ҡан да ҡойҙо Шакира. Тик ниңә һуң Шакиралар төҙөгән яңы тормош уларҙан һуң килгән яңы быуынды бәхетле итмәне? Белә ул Мәҙинәнең тарихын. Мәскәүҙә уҡыуын да, ирен дә, тик ул был йәш ҡатындың самаһыҙ һылыу икәнен генә белмәй ине. Яҡшы ат, матур ҡатындар тирәһендә тормош һәр саҡ шаулы, даулы, хатта ҡанлы булған инде ул. Өйөрмәләрҙең иң хәтәре улар тирәһендә ҡуба. Мәҙинәнең әсәһенең башына бүреләр еткән тиһәләр ҙә, төп сәбәбе уның һылыулығында, ахыры. Ә Мәҙинәнең һылыулығының ниндәй өйөрмәләр яһары алдалыр әле. Әгәр ҙә инде яһап өлгәрмәгән булһа... Күп нәмәне Мәҙинә, йәшлегенә барып, аңламай торғандыр. Әгәр ҙә шикәйәт һәм исемлек төҙөүсе кеше ферманың әленгә хисапсыһы булһа, йәшеренгән еренән ниңә сыҡҡан? Гөлбаныу күптән үлгән. Уйнаш иткән ҡатыны Зарифа ла юҡ. Нимә мәжбүр иткән уны ғәзиз ғүмерен (ә ул ғәзиз ғүмерен аяу арҡаһында һуғыштан ҡалған!) ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, Тирәклегә ҡайтырға? Эйе! Мәҙинәне күреү был ярайһы симәлгән «Дело»ға күп асыҡлыҡ индерҙе. Ә бит Мәҙинә эсендәген бөткәнсе асып та һалманы. Матур ҡатындар, ғәҙәттә, ҡылансыҡ, иҫәр була. Ә был — башҡа. Һылыулығы өҫтөнә аҡыллы ла. Тик тиҙ тәьҫирләнеүсән. Был, күрәһең, уның ижади булмышынан киләлер. Шулай булмаһа, йырсы ла була алмаҫ ине. Һылыу һәм ғорур зат. Гөлбаныу ҙа шундай уҡ булған. Бына кемдәр өсөн үҙенең йәшлеген дә, намыҫын да фиҙа ҡылған уның... Шәһәрбаныу апайы!

Бала күтәреп билдәһеҙ йүнәлештә, билдәһеҙ яҙмыш ҡосағына сығып киткән атаһының һеңлеһе уға һәр саҡ тынғы бирмәне. Шәһәрбаныу яҙмышы хаҡында бала сағынан уйланыуҙар Шакираны ошо һөнәренә дәл итте...

Шакира кире өҫтәл артына ултырҙы. Ҡағыҙға яҙылғандарҙан яҙылмағандары күберәк һөйләй уға. Ниңәлер... Инде нисәнсе тапҡыр... уға күңеле Таулының Кәкере ауыл яғында йәшәгән Мөғлифә ҡарсыҡты күрергә ҡуша. Был осрашыуҙы ул һаман кисектерә килде. Ә бөгөн, Мәҙинә һәм Хашим менән һөйләшкәндән һуң, фекер ебе өҙөлмәҫ борон ҡарсыҡты күреп ҡуйырға булды.

Мөғлифәне Шакираның һуғышҡа тиклем дә күргәне булды. Шакира урта мәктәптә ошо Таулыла уҡығанлыҡтан, ҡарсыҡ тураһында күп ишеткәйне. Ә бер саңғы ярышынан һуң аяғының быуыны сыҡҡас, тура шул әбейгә алып барҙылар. Ҡарсыҡ ҡараны, оҙаҡ хитланмай ғына быуынын ултыртты. Ҡырҡ бишенсе йылдың көҙөндә лә барҙы Шакира ҡарсыҡҡа. Мөғлифә ҡартайғайны, күҙгә мөсһөҙәйгән ине. Шакира уға аяғындағы уңалмаған яраһын күрһәтте. Әбей уға үләндәр бирҙе, шуның төнәтмәһен эсергә ҡушты, ниндәйҙер доғалар уҡып, өшкөрҙө. Шунан бирле инде бер ҙә бөтәшмәҫ тигән яра арыуланағайны, һуңғы ваҡытта йәнә ҡысый, ярһый, һыулана башланы. Шакира инде Мөғлифәгә күптән мөрәжәғәт итер ине — ҡарсыҡ ҡайҙалыр йәшәгән улынамы, ҡыҙынамы киткән дә ҡайтмаған, тинеләр. Ә һуңғы ваҡыт Кәкере ауылда йәшәгән күрәҙәсе хаҡында Шакира күп ишетә, хатта, ысын булһа, халыҡ араһында, Камалетдинов балаһын әбейҙән дауалата икән, тигән имеш-мимештәр йөрөй.

Шакира, бер ҡарарға килеп, папкаһын япты. Тороп кейенде һәм, бер аяғына һылтаҡлай биреп, һепертмә буран сығып тороуға ҡарамаҫтан, Кәкере ауыл яғына атланы.

* * *

Эҙәрмән Шакира яңы-юры кеше йөрөгәне тойолмаған, һепертмә буран һылап бөтәштерә башлаған һуҡмаҡ менән урам эсенә инде. Өй

тыш яҡтан үҙгәрмәгән кеүек, бары тик бүрәнә араларына, ҡыйыҡ, тәҙрә ҡапҡастарына ҡар һырыған-лыҡтан тәпәшерәк күренә. Солан ишегенең тотҡаһына тотонғас, эт өргән тауыш ишетелде.

— Себә, кил әле мында, мә! — Ҡарсыҡ ишектең келәһен ысҡын-дырҙы. — Әйҙә ин, эт тешләмәй ул... Буран сығырға итә, ахыры, этте соландан ҡыуып та сығарып булмай.

— Өрмәй ҙә, ебәрмәй ҙә ме?! — Шакира өйҙөң йылылығына, еләк, ҡарағат еҫтәре сыҡҡан һауаға ир-әйеп китте, тунын сисеп элеп, үҙе ширҙеккә барып ултырҙы. — Мине танныйһыңмы, инәй?

— Әлләсе, күргәндәй ҙә булам... Кеше күп була бит. Ҡайһы берeһен танып бөтәһең?

— Мин Шакира. Сабаҡлы ҡыҙы. Һуғышҡа тиклем иңбашымдың бы-уынын ултыртҡайның, һуғыштан һуң уңалмаған яраға һин биргән төнәтмә килешкәйне...

— Шулаймы? Әле ни йомош?

Шакира ҡарсыҡтың танымауын ғәжәпһенде. Ул тиклем хәтере насар кешегә оҡшамағайны бит ул. Ә йөҙөндәге янғандан ҡалған был эҙҙәр? Ә был һине үтәнән-үтә күрә торған ҡараш?

— Төнәтмә, шулай итеп, килеш-кәйне тиһең инде?

— Эйе, һыҙланыуҙарҙы баҫҡай-ны.

— Шулай... Күңел ғазаптарын баҫырҙай сара ғына юҡ. Башҡаһы-на дауа табыла. — Ҡарсыҡ, тороп, Шакираға яҡын килде. — Ойоғоңдо сис...

Шакира башта ойоғон, унан сей-ләнеп, һыуланып торған яраһына ураған марляны тағата башланы.

— Былай икән... — Ул, доғаһын уҡып, яраға өрҙө, ҡулын тейҙермәй генә өҫтә йөрөттө. — Теймә, урама, шул килеш ултырып тор.

Әбей бысранған марляны усаҡ-ҡа ырғытты.

— Инәй!..

— Кәрәге бөттө инде уның...

— Рәхмәт... — Шакира ҡулын йыуып самауырын ҡуҙғата башла-ған ҡарсыҡҡа йәнә бер уҡталып ҡарап алды. — Ә теге... бында йәшәгән Мөғлифә инәй... Ул ҡайҙа?

Бындай һорауҙы көтмәгән ахы-ры ҡарсыҡ. Ул самауырын кире урынына ҡуйҙы, Шакираның ҡар-шыһына килеп ултырҙы:

—Уның бында ризығы бөткән, күрәһең...

— Ә һин, инәй, Тирәкленән күп-тән киттеңме?

— Тирәкленән киткәнде белгәс, ваҡытын нигә һорайһың?

— Самалайым. Самаларға тыры-шам. — Шакира, ҡарсыҡ иҫен йы-йып өлгөргәнсе, тимерҙе ҡыҙыуын-да һуғырға булды. — Бөгөн миндә Мәҙинә булды.

— Мәҙинә?!

— Ул, меҫкен, атаһының яҙмы-шы өсөн борсола. Ҡыҙғаныс!

— Мәҙинә... — Ҡарсыҡтың борсо-лоуы йөҙөнә һирпелде. — Бик бире-шеп киткәнме ни Мәҙинә?

— Бирешмәҫлекме? Иң үкенес-леһе: шундай мәлендә ярҙам ҡулы һуҙырҙай бер кеме юҡ!

Оҙаҡ ҡына ваҡыт өнһөҙ ултыр-ғандан һуң, Шакира йәнә телгә кил-де:

— Ихсанбай Моратов... Улың ҡайҙа?

— Белмәйем.

— Ә киленең? Сәбилә?

— Ул... Быларҙың һиңә, ҡыҙым, ни кәрәге?

— Гөлбаныу юҡ. Өндәшмәй генә боҫоп ятып, Мәҙинәнең башына еткәндәрен көтәһеңме?

— Мәҙинәнең? Башына? Ауы-ҙыңдан ел алһын, ҡыҙым!

— Әләйһәң, йәшенеп ятыуың-дың серен сис!

— Мәле етмәгән...

— Ниндәй мәл? Ихсанбай ты-рышлығы менән яһалыр ҡорбандар һанының... йәнә бишкә тулырын көтәһеңме?

— Ауыр һүҙ әйтәһең...

— Улыңдың ҡылған ҡылыҡтары еңелме?

— Әҙәм тарафынан ҡылынған бер генә ғәмәл дә уның үҙенән бейек тә, ҙур ҙа була алмай.

— Һуғышта мин һин әле әйткәндең тап киреһен күрҙем.

— Мин һинең килеүеңә... мәсьәләне уртаға һалып һөйләшеүеңә шатмын, эҙәрмән ҡыҙым. Әммә үҙемдең хәлем дә бер-ике ауыҙ һүҙ менән һөйләп аңлатырлыҡ түгел. Мин Камалетдиновты көтә инем — һин килдең. Ҡайһылай ҙа һәйбәт. Ә Ихсанбайға килгәндә, ваҡытың булһа, тыңла бер ҡарһүҙемде... Бер сүл бүреһе ауылға барып ингән. Темеҫкенеп йөрөй торғас, мискәләге аҡ буяуға барып төшкән. Өйөрөнә ҡайтмай хәле юҡ. Ҡайтҡан. Ырыуҙаштарының уны күреп иҫе киткән: уйын хәлме, был бит ап-аҡ, береһенә лә оҡшамаған. Шакал да аптырап ҡалмаған: «Мин бит күктән төштөм! Мин изгеләрҙән изге илаһи бер йән!» — тип хәбәр һалған. Был рәүешле затты күргәндәре булмағас, уға ышанғандар, уны ололағандар, хөрмәт күрһәткәндәр. Әммә бер көн килеп ай тулған, бүреләр күмәкләшеп, айға ҡарап дәррәү олоп ебәргәс, изге йән үҙенең башҡаларға ҡушылып олоп ебәргәнен һиҙмәй ҙа ҡалған...

— Кинәйә менән һөйләгән ҡарһүҙеңдең мәғәнәһен дөрөҫ аңлаһам, һин, инәй, айҙың тулғанын көтәһең?

— Ҡалҡыуын ҡалҡҡас, айҙың тулмай ни әмәле? Ә тулған ай көслө теләк, ләкин мөсһөҙ аҡыл йөрөткән йән эйәләрен ҡасан да асылына ҡайтармай ҡалмай...

— Әгәр Мәҙинә... һинең ҡыҙың, йә ейәнсәрең булһа... Ай тулғанын, моғайын, көтөп ятмаған булыр инең!

— Ә һин минең көтөп ятҡан-ятмағанды ҡайҙан беләһең?

— Тимәк, теге төнгө фажиғә...

— Мин уны, ҡыҙым, фажиғә булмаһын тиеүҙән, сараһыҙлыҡтан килеп сыҡҡан ваҡиға, тип атар инем... Инде һин миңә яуап бир: мин — мин инде, һинең был эштәргә ни ҡыҫылышың?

— Мин ҡасандыр Сабаҡлы ауылынан бала күтәреп сығып киткән Хоҙайғолова Шәһәрбаныуҙың... ике туған һеңлеһе булам.

— Һин... Шәһәрбаныуҙың һеңлеһе?

* * *

Таулыға килгәндә береһенән төшөүгә икенсеһе осрап торғанлыҡтан, ҡайтыр юлында ла атмы, тракторҙы, машинамы осратыуҙан өмөтөн өҙмәгән Мәҙинә юлға сыҡты. Таулыға яҡын ятҡан ауылдарҙың береһенә етеүгә, уны сана таҡҡан трактор ҡыуып етте. Трактор Түбәгә тиклем үк килгәнлектән, Мәҙинә иркен тын алды: былай булғас, төндө бында уҙғарһа, иртәгә йәйәүләп булһа ла Тирәклегә ҡайтып етәсәк.

Әсәһе менән Түбә баҙарына килгән саҡтарында төшөп йөрөгән әбейҙә йоҡлағас, Мәҙинә йәнә ҡараңғылы-яҡтылынан юлға сыҡты. Бер ниндәй машина, йә трактор үтмәгән, бәлки сана юлы ғына үләмһерәп ятҡан юл буйлап атлағанда атаһы менән осрашыуын, эҙәрмән ҡатын менән һөйләшеүен бер нисә тапҡыр зиһененән үткәрҙе. Атаһы бик миктәмәгән, тик ябығыбыраҡ киткән, ҡояш, ел күрмәүҙән йөҙөнөң ҡарағусҡыл төҫө кәмеп, сырайына һарғылтлыҡ бәреп сыҡҡан. Ә күҙҙәре элеккесә, уларҙа көс тә, ышаныс та кәмемәгән. Атаһын күргән һайын яңынан асҡандай була Мәҙинә. Эсеүҙән, типтереүҙән башҡаны белмәгән кешене донъя бына ҡайһылай үҙгәртте! Әсәһе тере булһа, моғайын, иренә һуғыштан һуң яңынан ғашиҡ булыр ине. Ихсанбайҙарҙың тәҙрәләренә ағылған күләгәләргә ҡарап илап ултырғанса, үҙ иренең күңел әрнеүҙәрен баҫыр һүҙҙәр эҙләр, иркәләр, наҙлар ине...

Атлаған һайын елдең көсәйеүен тойҙо Мәҙинә. Түбәләге фатир хужаһы: «Тиреҫтән килгән буран ҡапыл көсәйеүсән була, юлға сыҡмай тораһыңмы әллә, ҡыҙым?» тигәйне лә, ҡайҙа инде тыңлау! Тиҙҙән

юл күренмәй башланы. Мәҙинә артына әйләнде: әле генә атлап үткән аяҡ эҙҙәрен, ҡойроғо менән эҙен йәшергән төлкө кеүек, буран ҡаплаған. Инде нишләргә? Өҫтөнә кейгән тунының итәктәренән, сабыуынан ектәп, ҡарлы ел тәненә һыуыҡ тынын бөркә. Аҙымын ҡыҙыулатыуҙан үҙе лә тирләп-янып сыҡты. Сама менән ул хәҙер Тәрән үҙәктән өҫтәрәк булырға тейеш, ләкин бер нәмә күренмәй, күҙ алдын геүләпғыжлап, һыҙғырып-тулап торған аҡ томан ҡапланы. Алға барыуҙан өмөтөн өҙгән Мәҙинә аяҡ аҫтында ерҙең йомшарыуын тойҙо: был, моғайын, кәбән төбө. Тимәк, Мәҙинә юлдан ситкә сыҡҡан, баҫыуға килеп ингән. Хәҙер ул атлаған һайын юлдан алыҫҡараҡ китәсәк... «Балам! Дауытым!» — Аҙашыуын аңлаған, йөрәге өҙөлөр сиккә еткән Мәҙинә, хәле бөтмәҫ борон, кәбән төбөн үҙе һыйып ятырлыҡ урын яһар өсөн соҡой башланы...

* * *

Күкбүре төнгө күктә йөҙөп йөрөй торған есемдең көндән-көн тулышҡанын, йомороланып ҙурайғанын күҙәтте. Күк есеме кәмеһә лә, тулһа ла илаһи сабырлығын, һауалы олпатлылығын юймай. Эргәһендә бихисап нурҙар сәсеп һикерешкән, өйөрҙәге тай-тулаҡтай уйнаҡсылаған ялтыр-йолторҙо ул күрмәгәндәй, шәйләмәгәндәй. Уның өсөн улар әллә бар, әллә юҡ. Хатта уның үҙенә ҡарап, ул тулыша барған һайын йөрәкһегән, шартлар сиккә етеп болоҡһоған Күкбүрелә лә эше юҡ. Ә бит улар төндәрен икеһе генә ҡала. Күктә — ҙур түңәрәк, Ерҙә — Күкбүре. Күкбүре сырайына бер бошоноу ғәләмәте сығармаған мөлдөрәмә тулы түңәрәккә ҡарап олоп та алғылай, ә теге — һүҙһеҙ. Эре, тәкәббер, битараф... Уның Күкбүренең яңғыҙ йәнгенәһенә йәм табалмай элекке хужаһына ҡайтыуында ла, ул Хужаның кәнтәйҙе, ҡыутомшоҡ эт шайы ла күрмәй, ирек һөйөүсән булмышын, яусыл-даусыл асылын аямай, сынйырға ултыртыуын да күрмәй. Сикһеҙ битарафлыҡты аңлауҙан, сараһыҙлыҡтан шартлар сиккә еткәндә, әмәлгә ярағандай, Ер менән Күктең, айырым-айырым йәшәүҙән тәҡәттәре ҡороп, буран яһап, бер-береһенә олғашып, ҡауышырға сарсауы ҡотҡарҙы. О! Күкбүрегә таныш был хәлдәр! Уҙаман кеүек көслө, мөһабәт заттың саҡырғанын оло буран шипкерт тауыш менән белдерһә лә, бынау бығауҙы сәйнәп-шартлатып, бөйөк ирек һәм ҡандырыу көҫәгән нәҫелүрсем тәҡәтенә дауа эҙләп сығып сабыр ине ул.

Оло буран тулай, торған һайын шәберәк, етеҙерәк, бейегерәк һәм бөйөгөрәк була бара. Буран ҡаплаған күк йөҙөндә һирәк-һаяҡ ҡына тулыша-түңәрәкләнә барған яҡты есемдең шәүләһе салынып ҡала. Ул бураны, ул бынауы... Күкбүренең түҙеп торорлоҡ әмәле лә ҡалманы шикелле, бынау сынйырҙы бүрәнәгә ҡуша ҡағылған сөйө-ние менән йә һурып сығарасаҡ, йә түҙеме ҡороуҙан, эсендәге ирек ҡомарына шартлауҙан йығыласаҡ...

* * *

Уянһа ла Сәрбиназдың иртәнге ризыҡ әҙерләүен түшәгендә тыңлап ята биргән Мирхәйҙәровтың иҫенә ҡапыл таулыға киткән Мәҙинә төштө. Әгәр балам, эшем тип йөрәкһеп, сабырһыҙланып юлға сыҡҡан булһа!

Ҡапыл тороп кейенә башлаған иренә ашъяулыҡ түшәй башлаған ҡатыны көләмһөрәп ҡараны:

— Өндәшмәйерәк торайым әле, күпме ятыр икән тиһәм...

— Эй әсәһе! Ятырһың— ятмай! Өсөнсө көн Мәҙинә Таулыға киткәйне бит.

— Буранға ҡамалып яталыр тиһеңме?

— Ятһа — бер хәл. Ҡамалдым тип түҙеп ята торған затмы ни ул?

— Сабый түгел инде...

— Уның йәшендә һин нисек инең?

— Йә, әйҙә, сәй эс әле...

— Эсеп тә тормайым... Бәйләнеште буран өҙөп өлгөрмәгән булһа, районға шылтыратам. Ҡайтырға сыҡҡан булһа, пажали, хәҙер үк эҙләргә сығыр кәрәктер...

— Ҡайһылай... Бураны буран ишеме? Нисек сыҡмаҡ кәрәк?

— Трактор бар, аттар... Юл бирәү бит... — Һуңғы һүҙҙәрен Мирхәйҙәров тунының еңен кейә-кейә әйтте лә, ишекте ҡаҡлыҡтыра ябып, аҡ үрәпсетеп тулаған өйөрмә эсенә инеп юғалды.

* * *

Телефон сымының теге яғында Мирхәйҙәровтың тауышын ишеткәс, Камалетдинов үткәндәге хәлде председателдең иҫенә төшөрөп алмай түҙмәне:

— Нимә, Азат Әһлиевич, тағы бесәнһеҙ, ауыҙығыҙҙы сөйгә элеп ултыраһығыҙмы?

— Юҡ, иптәш Камалетдинов, бесән етерлек. Тракторҙар урмандан ҡайтыу менән ҡырҙан ташып алып бөттөк. Был юлы икенсе мәсьәлә борсой: һауынсыбыҙҙы юғалтып ултырабыҙ.

— Һауынсыны?! Юғалтып?!

— Эйе, өсөнсө көн Мәҙинә Таулыға киткәйне. Атаһының хәлен белергә. Әле өйҙәренә инеп сыҡтым — ҡайтмаған.

— Так, так... — Йөрәге тамағына тығылғандай булды Камалетдиновтың. — Мин... күрмәнемсе... Миңә инәме ни ул? Хашимдың эшен хәҙер следователь Әҙелғужина алып бара. Һеҙ унда ваҡыт әрәм итмәгеҙ! Эҙләргә сығығыҙ! Юл ситтәрен яҡшылап ҡарағыҙ. Мин дә бында... — Шул саҡ бәйләнеш өҙөлдө. Тимер сымда бары тик тәбиғәт ярһыуынан ҡупҡан ауаздар геүләне...

* * *

Камалетдинов үҙен ҡапыл ярҙамһыҙ, ҡола яланда яңғыҙ ҡалғандай хис итте. Тәҙрәнән бер ни күрерлек түгел, әле бер, әле икенсе оста бәйләнеш өҙөлә, бындай көндө юлға сыҡҡан кешене эҙләү — кәбән араһына төшкән энәне күҙләүгә бәрәбәр. Ҡайҙан башларға? Районда бер вездеход бар. Һунарсылар берлегенән бер нисә саңғысыны ултыртып алыр. Ләкин юл оҙон, буран торған һайын нығыраҡ ҡотора. Әгәр ҙә ул алты көнгә һуҙылһа? Әле башы ғына. Мәҙинәне бөгөн, хәҙер эҙләргә кәрәк.

Сымдың икенсе осонда ҡатынҡыҙ тауышы ишетелде:

— Эйе, мин, Әҙелғужина.

— Хашимдың ҡыҙы... Тирәкленән Мәҙинә булдымы?

— Булды.

— Ҡасан?

— Кисә.

— Ә һеҙҙән сыҡҡас ҡайҙа барырын өндәшмәнеме?

— Ул, Әйүп Ғәзизович, оло юл менән ҡайтыр яҡҡа йүнәлгәндәй булғайны! Эйе, эйе... «Өҫтө лә йоҡа, берәй транспорт осраһа ярар ине!» тип уйлап ҡалдым.

Тимәк, Мәҙинә Тирәклегә атлаған. Әгәр транспорт осраһа, ул Түбәгә килеп йоҡлаған булырға тейеш. Эйе, эйе... Транспорт Таулы менән Түбә араһында туҡтауһыҙ йөрөй. Машиналар руда ташый, почта...

Һунарсылар ойошмаһынан егеттәр килеп етеү менән юлға сыҡты Камалетдинов. Машина Кәкере ауылға инеү менән хәтеренә күрәҙәсе ҡарсыҡ төштө: инеп сыҡмай булмаҫ. Мәҙинә хаҡына ул бөгөн бөтә сараларға мөрәжәғәт итергә әҙер.

Ишекте шаҡыһа ла яуап биреүсе булмағас, Камалетдинов тотҡаны үҙенә ҡарай тартты, ҡарсыҡты сәстәре туҙған, намаҙ уҡығандағы шикелле йөгәнәкләп ултырған килеш күргәс, туҡтап ҡалды. Ҡарсыҡ инеүсегә иғтибар ҙа итмәне... Аптыраған Әйүп уның һүҙҙәренә ҡолаҡ һалды:

— Тәңрем! Ырыу ҡото булыр баламдың ейәр ризыҡтарын, эсәр һыуҙарын өҙмә, зинһар! Ете быуын

әруахтарым, ата-әсәм, баҡшы Бәндәбикә, өләсәм Күкһыу рухтары, ярҙам итегеҙ Мәҙинәмә. Әсәләрен һаҡлай алмағанға күрә, үҙенең аяттары, салыр ҡорбандары менән гүрегеҙҙе яҡтыртыр ейәнсәрегеҙгә ғүмер һорағыҙ мәүләнән! И раббым! Аллам! Барыһы ла һинең ҡөҙрәттә! Ярҙамыңды ебәр! Ҡөҙрәтең йәлләмә! Йөрәге тибә? Ул тере, ул һуға! Йә Хоҙай! Ҡөҙрәтең ҡылдың! Ҡулдарымдың ҡайнарлығы арта! Ҡулдарымдың ҡайнарлығы Мәҙинәгә күсә! — Әйтерһең дә ул алдына Мәҙинәне һуҙып һалған да, һылай ҙа һыйпай...

Камалетдинов тамаҡ ҡырҙы, өндәшһәң дә ҡыйын, өндәшмәй сығып китеүе лә. Шул саҡ башын күтәрмәй генә ҡарсыҡ телгә килде:

— Ваҡыт әрәм итмә! Түбә менән Тирәкле араһы... Тәңребирҙе йылғаһынан өҫтәрәк... баҫыу сите... Юл ситендәге еректәр... Һайыҫҡандарға иғтибар итегеҙ... Улар ҡайҙа күберәк... Ул тере! Барығыҙ! Мине күҙ алдына килтер! Минең ҡул ҡайһы яҡҡа һуҙылһа, шунда атла!

Камалетдинов сығып йүгерҙе...

* * *

Күкбүре, сынйырын һөйрәткән килеш, Ер менән Күкте тоташтырып тулаған буран эсенә инеп олаҡты. Ауылдан сығып Тәңребирҙе йылғаһы үҙәненә төшөү менән таныш еҫкә юлыҡты: өйөрҙәкөләр! Кәнтәйе йәш... Арланы оло. Яңғыҙ ҡалған был арланды Күкбүре күптән белә. Бер мәл уның оҙонтороҡ кәнтәйе менән сәйнәшеп тә алғайны. Көстөң тиң түгелен аңлаған Күкбүре сигенде ул саҡта, тешен шаҡылдатып, ҡойроғон бот араһына ҡыҫтырып, урманға ҡасты. Йәшкә әйләшкән икән дарман эйәһе. Былар... ниндәйҙер эҙҙән килгәндәр... Эйе, эйе, һыйыр, тиреҫ аңҡыған эҙҙән... Эҙ күп ерҙә күмелгән, ләкин яңыюры үткәнлектән, еҫ көсөн юймаған. Ҡайһы бер урындарҙа түңәрәк яһаған, тапаған еренә кире килгән. Эҙҙәр ереклек буйындағы һалам өйөмөндә туҡтаған... Һалам өйөмө... Эсенән йылы бөркөлә, үҙенән бойоҡ йөҙлө, Күкбүрене туйындырған, башынан иркәләп һыйпаған еҫ килә. Ләкин был йәш еҫ. Эйе, эйе! Йәш! Ырыуҙан ҡалмаған, эсендә бихисап үрсем һаҡлаған еҫ! Күкбүре лә шундай! Уның эсендә лә йоморо сабыйҙар булып йәнде иркәләр үрсем ҡомары ҡымырйый. О! Был еҫ уға таныш! Был еҫте ул күптән белә! Был еҫ уны көсөк сағында эттәр өйөрө талап ташлауҙан ҡурсып алып ҡалғайны. Күтәреп алып ҡайтып, ҡапҡа аҫтынан төлөгөнә индереп ебәргәйне. Эттәрҙән ҡурҡып дер-дер ҡалтыраған көсөк рәхмәт йөҙөнән уның муйынын ялағайны...

Күптәнге һағыштан Күкбүре сыйнаны, һаламды соҡоп, шул еҫте өҫкә сығарғыһы килде. Ләкин... янында ғына киҫәтеүле ырылдау ишетелде! Тоҡомдаштары! Теге йәш кәнтәй менән дарман биреүсе! Улар ошо еҫ эҙенән килгән... Ҡорбан туйы яһарға яҡында ғына ҡасып ятҡандар! Йәш кәнтәй, бөтә йәш-елкенсәккә хас әрһеҙлек, маһайыу, иркәлек тыуҙырған һаҡһыҙлыҡ менән Күкбүренең алдына килеп ултырҙы. Уның бар булмышы:

— Был һинең нишләүең? Был — беҙҙең табыш! — тигәндәй.

Күкбүре лә бирешмәне, уның үҙенән дә әрһеҙерәк төҫ алып, йәшбикәне әрһеҙлек менән еҫкәп ҡараны. Фу! Ас бөйөр! Ҡыҙығырлыҡ нимәһе бар? Дарман хужаһы ла бының ише менән бысраныр икән...

Күкбүре ул арала дарман хужаһының алдына барып ятты. Шуның менән үҙенең ихласлығын белдерҙе. Ләкин... эт, мал, йорт, кеше еҫе аңҡып торған Күкбүренән арлан ҡапыл ситкә янтайҙы, тештәрен күрһәтте. Ул был хәрәкәтте Күкбүренең үрсем көсөн еҫкәп тә ҡарамаҫтан яһаны! Ниндәй тәкәбберлек! Асыуы алҡымына тығылған Күкбүре һалам өйөмөнә, кеше ятҡан тәңгәлгә баҫты. Әммә арландан яҡлау тойған Йәшбикә унда Күкбүренән алдараҡ килеп баҫырға

өлгөрҙө. Арландың сирҡаныуынан ғорурлығы кәмһетелгән, сикһеҙ рәнйетелгән һәм ырыуҙаштары тарафынан ситләтелгән, үҙенең яңғыҙлыҡҡа дусар ителгән ҡотһоҙ яҙмышынан,үрсеү теләгеннән баҫыуҙан өмөтө өҙөлөүҙән ярһыған Күкбүренең эсендә ниҙер тулышты, күҙҙәрен ҡыҙартып нәфсеһе башына бәрҙе, өйөрҙәрҙе тетрәтеп тотҡан Башбүренең даусыл, яусыл булмышы баш күтәрҙе —Күкбүре ҡанға ҡан менән яуап бирер өсөн тиңһеҙ алышҡа әҙерләнде...

* * *

«Алға» колхозының стена гәзитенең редколлегияһына һайлағастары, эш күплеккә һылтанып, баш тартырға ла уйлағайны Хөсәйен, аҙаҡ йышыраҡ клубҡа йөрөйәсәген, ситтән генә Мәҙинәнең таяҡ болғап хор алдында баҫып тороуын кинәнеп күҙәтерен күҙ алдына килтергәс, ризалығын бирҙе. Һүрәтте һәйбәт төшөрә тиһәләр ҙә Хөсәйендең ул яҡтан әллә ни барымы юҡ кеүек: аттары ғына шәп килеп сыға. У-у-у! Үҙ ғүмерендә ат һарайына һыйындырып яһалған ҡарауылсы йортонда әҙме ат һүрәтен яһаны ул! Бик шәп сыҡҡандарын стенаға ҡаҙаҡлап ҡуя. Хөсәйендең был үҙенсәлекле күргәҙмәһендә Һарайғырҙың ғына нисә һыны бар.

Аттарҙы тәрбиәләп ингәс, Хөсәйен ҡулдарын яҡшылап һабынлап йыуҙы һәм ҡоротҡансы һөрттө — һүрәт төшөрөр алдынан ул гел шулай итә. Шунан гәзиттең редакторы, колхозға яңыраҡ килгән баш зоотехник Рәсүл Юлдашев килтергән ватманды өҫтәлгә йәйеп һалды. Рәсүл был ватманға өс һүрәт яһарға ҡушҡайны, Хөсәйен ул килтергән дәфтәрҙе асып яҙыуҙарҙы уҡырға кереште. Беренсе һүрәт: айыу, ләкин башы һыйырҙыҡы, осло мөгөҙҙәре бысылған, эргәһендә йәмһеҙ бер әҙәм, мылтығын шул айыуға тоҫҡаған. Икенсе һүрәт: тауыҡ башын әлмәккә тыҡҡан, ҡанаттары менән ептең осон түшәмдәге сөйгә бәйләп маташа, иҙәндә бик йыуан бер ханым йомортҡа тауы өҫтөндә был тамашаға аптырап ҡарап ултыра. Өсөнсө һүрәт: трактор, машина, аттар ҡулдарын бөйөрҙәренә таянып көләп тора, ә һыйыр һабанға егелеп, ер һөрөп китеп бара. Хөсәйен, буяу ҡәләмдәрен һәйбәтләп ослап алды ла, телен арҡыры тешләп, һүрәт яһау эшенә тотондо...

* * *

Башы әйләнеп, күҙ алдары ҡараңғыланып торһа ла Ғәлимә эшенә китте. Фермала алмаштырыусы булһа ла Ғәлимә ялға туҡтамай. Быны үҙенә күрә сәбәптәре бар: бүтән һауһа, Ғәлимәнең һауымы асылда күпме икәне асыҡланасаҡ. Ғәлимә — район советы депутаты, бәлки Геройҙы ла бирерҙәр, уның рәсеме район үҙәгендә «Дан таҡтаһы»нда. Ҡолаһаң, тауҙың бейегенән ҡола, тиһәләр ҙә, Ғәлимәнең йығылырға уйы юҡ. Бейектән ҡолауҙың һыҙланыуы ла көслөрәктер ул, имгәнеүең дә бар. Юҡ. Ғәлимә тауға теше-тырнағы менән йәбешеп, тырмашып-тырнашып үрмәләне. Үҙенең асманға ашыу юлында әҙәм баштары аша ла атланы, ҡырын эштәрҙән дә сирҡанманы. Данға илткән юлында Ихсанбайҙың ҡапыл пәйҙә булыуына ла күҙ йомдо: теләһә ни эшләһен, тик Ғәлимәгә генә теймәһен. Был ғәриптең һуңғы ваҡыттағы ҡылыҡтары ғына һарыуын ҡайната. Мәҙинәне алға сығарыу өсөн һыйырҙар һанын тигеҙләтте, быҙауға эсергән һөттө айырым яҙыуҙы талап итә! Ихсанбайҙан ҡурҡмай Ғәлимә, ләкин ҡулында был ғәриптең Ишмәмәт түгеллеген раҫларлыҡ дәлил юҡ. Ғәлимә яҡшы аңлай: ул берәүгә лә барып: «Уның менән йоҡлап ҡараным! Ҡатын-ҡыҙ үҙен бисә яһаған кешене бер ҡасан да башҡалар менән бутай алмай!» тип һөрән һалмай бит инде. Шуға күрә лә, бөтә күңеле менән эштең ниҙә икәнен һиҙһә лә, серҙе сисер әмәле юҡ. Әгәр ҙә Ғәлимәнең ҡулында берәй төрлө дәлил булһа, балаһының

атаһы тип ҡарап тормаç, бөгөн, ошо минутта бар донъяға фаш итер ине! Әлегә ул тешен ҡыçа, түҙә... Ауырынан ҡотолғас өçтөнән тауҙай йөк төшкәндәй еңеләйеп ҡалғайны ла, ауыр уйҙары тынғы бирмәй. Ғәрип хисапсыны юлынан алып ырғытырға бөгөн көсө етмәй. Ә теге Тирәкле һандуғасын... Мәҙинәне үҙенән алға сығармаç өсөн ул барыһын да эшләйәсәк! Бының өсөн уны өсдүрт һөтлө һыйырынан яҙҙырыу етә. Ундай ғына эштәр үттеме Ғәлимә ҡулынан! Хоҙай уға маңлай бәхете бирмәгән икән — Ғәлимә уны яулап алырға тейеш. Оялмаған бойормағанды ашаған, тиһәләр ҙә, тормош шуның киреһен раçлай: кем оялмай — шул ашай, шул данға үрләй. Ә кем ояла — шул үҙенә тейеште лә ала алмай. Бушҡа ғына, әрле әрләнеп торғансы, әрһеҙ эшен бөтөргән, тимәйҙәрҙер әле. Ғәлимә шуға ла фермаға иртәрәк килде. Мәҙинә район үҙәгенән килгәнсе ул ҡылыкты ҡылып өлгөрөргә тейеш!

* * *

Ихсанбай, йоҡоһоҙ үткәргән төн ялҡытҡангамы, иртән иртүк тора. Иренең иртә тороуы Раузаға ҡыйынлыҡ тыуҙырмай, кәнсә ҡараған сағынан гәзәтенә ингәнгәме, ул да иртәсел. Һөйләшмәй генә иртәнгә сәйҙе шуптырлатып эскәс, Ихсанбай фермаға йүнәлә, Рауза Шәңгәрәйҙе сәйгә индерә. Икенсегә уның менән ултырып сәй эсә. Сәй урынын йыйғас, ризыҡ тотторол, Шәңгәрәйҙе юхалап-йомалап, Хөсәйенгә ебәрә, ә үҙе магазинына юллана.

Ихсанбайҙың аҙабы ла, ғазабы ла — Мәҙинә. Уны башынан сығара, хәтеренән юйҙыра торған һис бер ниндәй көс юҡ донъяла. Күҙен йомһа ла, асһа ла — ул, Мәҙинә. Ҡайһы саҡ улар Гөлбаныу менән бер һынға уҡмаша. Мәҙинә әсәһенә шулай нык оҡшамаған булһа... Юҡ шул. Бер үк төç, бер үк һын, бер үк булмыш. Эсендә бөгәрләнеп ятҡан нәфсе-ужарын баçыр өсөн Ихсанбай Ғәлимәне лә баçып ҡараны. Юҡ, Рауза ни, ул ни... Ит күрмәгәнгә һурпа ла аш, тигәндәй, Ғәлимә килешкән Саяфҡа килешһен. Әле бына Мәҙинәнең район үҙәгенә китеүе булды, Ихсанбайҙың күңел донъяһы ишелеп төштө, ҡотһоҙланды. Ә Мәҙинә бар сағында ул эшкә байрамға барғандай йыйына. Их күңел! Ниңә ул тән гәриплеге менән әҙерәк иçәпләшмәй ҙә, ниңә ул яҙғанына ғына риза булып йәшәүен белмәй икән?! Маҡсаттарың үҙеңдән ҙурыраҡ булһа ғына кешемен тигән кеше булып йәшәрһең, ти торғайны әсәһе. Ихсанбайҙың маҡсаты буй етерлекме? Мәҙинәне үҙенеке итеү өсөн көрәшеп гәриплек, өйһөҙлөк, илһеҙлек алды Ихсанбай. Ниңә әле Гөлбаныу йә Мәҙинә тип яһаған һәр аҙымы, ынтылышы Ихсанбай өсөн оло ҡазаға әүерелә? Шуны белә тороп, һис киçәмәй, төңөлмәй, бер ниндәй ҙә еңеү вәғәҙә итмәгән алышҡа яңынан ташлана...

Тышҡа сыҡҡас, Ихсанбай һағая төштө. Ел олоуын иçкә алмаһаң, ниндәйҙер сәйер тынлыҡ хөкөм һөргәндәй. Мәмерйә тормошо гәзәтенә индергән сослоҡ менән ул тынлыҡҡа ҡолаҡ һалды.

— Күкбүре!

Тауыш-тын юҡ. Ихсанбай, болдорҙан төшөп, эттең ояһына яҡын килде. Юҡ! Киткән кәнтәй! Сылбыры менән бергә тайған!

— Ҡәбәхәт! — Ихсанбай, туйтаңлап, өйөнә ығышты. — Эт ҡайҙа?!

— Уны мин ҡайҙан беләйем? — Бот һоноп сәй эсеп ултырған Рауза иренә аҡайтҡансы ҡараны. — Кемдең бәйҙә торғоһо киһен? Ҡасҡандыр.

— Ҡайҙа?! Ҡайҙа ҡасҡан?!

— Атаҡ-атаҡ... Эт буһын да ҡайҙа китҡәнен һиңә әйтеп китһен.

— Çиңмай! — Ихсанбай, ишекте йән асыуы менән ябып, йәнә тышҡа атлыкты. Аптырағас, Шәңгәрәй йоҡлап йөрөгән мунса ишеген төрттө — асылманы. Алйот ишеккә эстән тәртешкә һалып терәтеп йоҡлай. Иçәр булһа ла, үҙен һаҡлау сараһын ул да белә. Күкбүре Ихсанбай

өсөн табыш ине! Ишек алдында ул булғас, күңеле тынсығайны! Ниндәй хәйерһеҙ таң булды был?!

Арыған-алйыған Ихсанбай, бөтә донъяны эсенән һүгә-тиргәй фермаға килеп етте. Башта ҡураға инде — Мәҙинә урыны буш. Унда икенсе суҡанлай. Һыйырҙары бынан һауҙырмай, күрәһең, һауала тоҙло-боросло һүгенеү яңғырағы эленеп тора. Ихсанбай үҙе был һүҙҙәрҙе йыш ҡулланһа ла, ҡатын-ҡыҙ шуларҙы ысҡындырһа, сығырынан сыға. Ихсанбайҙың был хаяһыҙ бисәнең яңағына ҡундырғыһы килде, шуға күрә ул Мәҙинә һыйырҙары эргәһенән йәһәтерәк үтеп китеү әмәлен күрҙе. Бына уның күҙҙәре һыйыр һауып ултырған Ғәлимә ҡарашы менән осрашты. Ҡанһырап ҡайтып йығылған тиҙәр ине — сыҡҡан. Хәйер, кәнтәйгә...

— Төҙәлдеңме, Ғәлимә һылыу? Һаумы?

— Һау булмаһам, һау итәңме?

— Нигә улай тупаҫ?

— Үҙеңә күрә!..

— Соланда тотоп баҫҡанға үпкәләнең әллә?

— Юғал күҙемдән, сатан иблис! — Ғәлимәнең тауышы ыҫылдап, бик усал сыҡты. Ихсанбайҙың арҡа буйы семерҙәне: Ғәлимә үҙ башына ҡотора! Ләкин Ихсанбай ҙа элекке Ихсанбай түгел, таяҡты артыҡ бөгөп ташлап һындырыуҙан ҡурҡа... Ул, тешен ҡыҫып, ары, «Ҡыҙыл мөйөш»кә табан, сығыр яҡҡа атланы.

«Ҡыҙыл мөйөш», иртәнге һауын ваҡыты булғанғамы, буш ине. Мейестә генә, берсә һыҙғырып, берсә тел шартлатып аптырап, ут ләүкей. Ихсанбай өҫтәле өҫтөндә, инеүсене бар тип тә белмәй, сысҡан битен йыуа. Тапҡан тәрәт урыны! «Көш!» — сысҡан юҡ булды. Ихсанбай, ауыр тын алып, ултырғысына ялпашты. Ҡапыл уның күҙе стена гәзитенә төштө. Түбәнгә генә эленгән. Һүрәттәре ирмәк... Ҡайҙа, ҡайҙа... Бынһы ни? Һыйырмы, айыумы? Башы — һыйыр, кәүҙәһе — айыу түгелме? Ихсанбай айыуһыйыр ауыҙынан сығарып, түңәрәк эсенә алынған һүҙҙәрҙе уҡый башланы:

Тирәкле айыуҙарының
Осло икән мөгөҙө!
Ишмөхәмәт атып йыҡҡан,
Ҡурҡмайынса бер үҙе...

Ишкәндәр ишәк сумарын! Ихсанбайҙың алйыған ҡарашы икенсе һүрәткә йүгерҙе. Аҫылынырға торған тауыҡ бигерәк ирмәк килеп сыҡҡан, ә йоморҡа өҫтөндә аунап ятҡан йыуан ҡатын торғаны Рауза! Тауыҡ суҡышынан сыҡҡан һүҙҙәр түңәрәккә алынған:

Күлдәккә лә — күкәй,
Кәнфиткә лә — күкәй.
Түҙер хәлдәрем ҡалманы —
Аҫылынам, түтәй!

Ихсанбай, үҙенә ниндәйҙер таяныс, ярҙам эҙләгәндәй, өсөнсө һүрәткә күҙ һалды, секерәйеп, яҙыуына ҡараны:

Итемдән дә файҙа,
Һөтөмдән дә файҙа.
Егәләр ҙә, һауалар ҙа —
Колхоз аттары ҡайҙа?

Харап! Ихсанбай ян-яғына ҡараны. Бәлки, быны бер кем дә уҡып өлгөрмәгәндер? Кисә был стена буш ине!

— Ҡәбәхәттәр! — Ихсанбай гәзитте умырып алып йомарланы ла утҡа ташланы. — Һыйыр атҡан, имеш! Ә һин башта иҫбат ит! Маңҡалар! Хөсәйен, хөрәсән, әсәһен ҡайһылай рисуай иткән. — Ул енләнеп тышҡа сыҡты. Кем эше был? Хатта Рауза ла аңғарманы бит. Айыу ите тип, иттән ауыҙ итмәне. Тимәк, был уның эше. Шәңгәрәйҙеке! Күргән ул һыйырҙың урамға ингәнен, атыу тауышын да ишеткән, йөрөй башлағас, ғәләмгә айыу күрҙем тип шапырынған!

— Алйот! Ҡәбәхәт! Күҙеңдән ут күрһәтәм икән, инәһеҙ нәмә! — Күҙенә ҡан һауған Ихсанбай, асыуярһыу менән, бурандан да былай туҙынып, ауылға атлыҡты...

* * *

Мәҙинә түңәрәк эсендә, малайҙар, ҡыҙҙар уны уратып алғандар ҙа туп ырғыталар. Мәҙинә улай янтая, былай янтая, ырғый, эйелә-бөгөлә, әммә туп тейеүҙән үҙен нисек тә һаҡлап ҡала. Уйын ҡыҙғандан-ҡыҙа, Мәҙинәне түңәрәктән бәреп сығара алмаған малайҙар ярһый, сәмләнә, устарына төкөрөп, Мәҙинәгә яҫҡанған йөн тупҡа хикмәтле һүҙҙәр әйтеп бәреп тә ҡарайҙар.

— Ҡана әле, үҙем!

— Эшкинмәгән, мин...

— Хәҙер күрһәтәм мин һеҙгә, еүеш танауҙар, нисек...

Бәрәләр — теймәй. Мәҙинә ҡоралай кеүек еңел, тейендәй йылғыр. Ул янтайған еренән ҡапыл һиҫкәнде. Атаҡ, уны лаһаң оло кешеләр уратып алған! Телдәре ниңәлер эттекеләй һәлберәп тора. Һаҡаллы профессор, төрмә һаҡсыһы, Ихсанбай, Ишмәмәт, Ғәлимә, Саяф, тағы әллә кемдәр... Туп, ана, Мәҙинәнең башы аша осто. Аһ! Был бит туп түгел, ә... Мәҙинәнең йөрәге! Түңәрәктә торған бәндәләр әллә ниндәй ҡоторған ауаздар сығара, серәшеп шул йөрәкте Мәҙинәнең башы аша бер-береһенә елсәй. «Йөрәк! Йөрәгем!» — Мәҙинә үрелә, ләкин буйы етмәй. Йөрәкте тотоп алған кешегә барып йәбешеүе була, теге уны икенсе берәүгә ырғыта. Түңәрәктәгеләр бер-береһе менән сәйнәшәләр, тештәрен шаҡылдаталар, имәнес ырылдайҙар, сыйнайҙар... Ә йөрәк, осоп йөрөһә лә, тере! Ул һулҡ-һулҡ тибә, ялбара, ҡурсыу һорай! «Йөрәгем! Йөрәгемде бирегеҙ үҙемә!» — Мәҙинә ҡысҡыра, ләкин тауышы үҙенән ары китмәй. Бына ул манма тир булды, эскеһе килә...

— Һыу!.. һыу!

Эргәһендәге түңәрәк сайҡала, инде хәҙер теге заттар йөрәккә талашып бер-береһен таламайҙар, ҡара томан булып Мәҙинәне уратып алғандар ҙа ҡыҫалар, тын алыр әмәл юҡ... Ниһайәт ул ҡулына килеп эләккән йөрәген усына йомдо. Ҡайһылай бәләкәй икән ул йөрәк! Ҡулдан-ҡулға йөрөп осҡанда ул бик ҙур кеүек ине.

Бына кемдер уның ирененә һыу тамыҙа. Рәхәт! Әле генә йыртҡыс кеүек ырылдашалар, бәғерҙе теләләр ине. Аңламаҫһың. Ә бәлки улар, уны тирәләп торған шәүләләр, әҙәм затынан түгелдер? Мәҙинә хәҡикәтте асыҡларға тырыша: кемдәр былар? Күҙ алдында йәнә бала саҡтағы «Түңәрәк» уйыны, уға уйнап ҡына туп ырғытыусы бала-саға пәйҙә була. Аһ, кешеләр, сабый ғыналар. Йөҙҙәре болотһоҙ, аяҡтары себешләп бөткән, баштары төрлө-төрлө болон сәскәләрен хәтерләтә. Мәҙинә шуларҙы ғына ярата. Улар араһында уның Биктимере, Йәнтимере, йәнә... Дауыты һикерәндәй. Дауыт?! Дауыт!.. Мәҙинәнең күкрәгенән үткер ауыртыу телде. Асытып әрней йөрәк, түҙерлек әмәл юҡ. Дауыт! Уға, Мәҙинәгә, был һыҙланыу таныш, яҡын. Был әрнеү уның йөрәгендә, булмышында...

— Балам!

Уны тирәләп алған шәүләләр йәнә ҡыймылданы, хатта кемдер уға өндәшә кеүек:

— Мәҙинә! Мине таныйһыңмы, Мәҙинә?!

— Юҡ...

— Камалетдинов мин...

— Мин... ҡайҙа?

— Больницала... Таулыла.

— Минең... балам... — Мәҙинә күҙҙәренән йәш урғылғанын, тупылдап тамғанын тойҙо. — Минең йөрәккәйем...

— Тыныслан, тыныслан... — Шәүлә уға эйелде. — Укол! Уға борсолорға ярамай. Йоҡлаһын. Түше шешә башлаған. Һауығыҙ! Сыҡмаһа, бала килтерегеҙ!

Ишеткән һүҙҙәрҙән бер ни ҙә аңламаған Мәҙинә, ауырайып, талсығып йоҡоға талды...

* * *

Мәҙинә иҫенә килгәс, Камалетдинов ҡайтып түшәгенә ауҙы. Һаҡал баҫҡан, ҡарайып ябыҡҡан, күҙҙәре эскә батҡан иренә хатта

Мәликә, теле бик ҡысыһа ла, һүҙ әйтә алманы. Мәҙинәне бөтә районды аяҡҡа баҫтырып эҙләгәндәрендә Мәликә лә ул ҡатын яҡлы ине. Үҙе йәш, үҙе шундай һылыу, ә башына төшкәндәре... Мәликә үҙен унының урынына ҡуйҙы. Хашимды бикләгән кешеләрҙе ҡарғаны, Хоҙайҙан Мәҙинәгә балаһы хаҡына ғүмер һораны. Ә бына табылғайны... Шундай ҙур етәксе башы менән... өс көн буйы дауаханала дежурҙа тор әле! «Нимә, Камалетдинов, әллә һин хәҙер шәфҡәт туташымы?» — тиергә ине, юҡ, телен тешләне.

Мәликә, Әйүп йоҡлаһын тип, ҡыҙын тышҡа алып сыҡты, ҡайҙа барырға белмәй аптырап тора бирҙе лә Талип Лоҡмановичтарға табан атланы. Эйе, эйе... балалары уйнар, ә улар хәбәрсән Раиса Максимовна менән эстәрен бушатҡансы һөйләшерҙәр...

* * *

Баш мунса ташылай ҡыҙған, ҡолаҡтары шаулай, күҙҙә йоҡо заты юҡ. Камалетдинов, түшәгендә салҡан ятҡан килеш, һуңғы өс көндә булып үткән ваҡиғаларҙы хәтеренән үткәрҙе. Ҡарсыҡ дөрөҫ әйткән булып сыҡты: Мәҙинәне улар ереклеккә яҡын кәбән төбөнән таптылар. Һайыҫҡандар ысынлап та шул тирәлә шырҡылдаша ине. Саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ, ҡары осоп, түбәһе ҡарая биреп торған түбәләстә башта улар эт мәйетенә тап булды. Убаны ҡосаҡлаған кеүек дүрт аяғын тарбайтып һуҙылған йән эйәһе, ҡарашында еңеү тантанаһы шәүләһе ҡалдырып, күҙҙәрен гәрешкә текәгән.

— Эт!

— Бүре!

— Нишләп бүре булһын, сынйырлы бит!

— Һин дә үҙеңде һунарсымын тиһеңме? Томшоғона, ҡолаҡтарына ҡара!

— Ҡойроҡсо...

— Бына әкәмәт...

Һунарсылар тирә-яҡты соҡоштора, ҡаҙыштыра башланы. Кәбән төбөнән арыраҡ, ереккә яҡын ерҙә, йәнә бер бүре емтегенә тап булдылар. Абайлап ҡараһалар, кәбәндән алып ул ауған ергәсә ҡан таптары ҡалған...

— Былар бер-берен һенең... боғаҙын сәйнәгән...

— Бүре лә берен-бере сәйнәр икән!..

Камалетдинов бер ҡолағы менән һунарсыларҙы тыңлаһа ла уйы менән Кәкере ауыл ҡарсығына әйләнеп ҡайтты. Күҙҙәрен йомдо. Күрәҙәсене күҙ алдына килтерергә тырышты. Шулай уҡ ҡарсыҡ яңылыштымы? Әллә бүреләр... Ҡапыл Камалетдиновтың зиһене яҡтырҙы: Мәҙинә ошонда! Кәбән төбө юлдан әллә ни алыҫ түгел! Аҙашып йәһәннәмгә олаҡмаҫ өсөн, Мәҙинә шунда йәшеренгән!

— Ипләп кенә... бүрене ситкә алығыҙ. Көрәк, һәнәктәрҙе ҡулланмаҫҡа. Ҡул менән генә... Ул ошонда булырға тейеш!

Бүре ҡанына мансылған Мәҙинә күренгәс, Камалетдинов тик иҫтән яҙманы. Һунарсылар һауаға атты. Тиҙҙән Тирәкле кешеләре күренде. Камалетдиновтың иң ғәзиз йөктө үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр күтәреүҙән йөрәге дарҫлап типте. Тик ул тере генә булһын! Тере булһа, Мәҙинәне һауыҡтырыу өсөн ул бөтәһен дә эшләйәсәк! Йәненән дә артыҡ күргән татлы йөгөн бала кеүек күкрәгенә ҡыҫып, Камалетдинов машинаға инеп ултырҙы. Тирәклеләр Мәҙинә өҫтөндә ятҡан оло бүре емтеген шундуҡ тан311ны:

— Ихсанбай кәнтәйе. Күкбүре. — Улар, саналарына ике бүре үлеген тейәп, Тирәкле яғына юлланды.

Күҙгә һаман йоҡо инмәй. Камалетдиновтың иҫенән дауахана койкаһында иҫһеҙ ятҡан Мәҙинә сыҡмай. Ҡаштары ҡарлуғас ҡанатылай ҡыйылған, керпектәре ҡуйы күләгә яһап алһыу битенә һибелгән, сәс бөҙрәләре ҡулса-ҡулса булып тирләгән маңлайына йәбешкән, ике ауыр толомо, йылан тиреһеләй йылҡылдап, шыма нәфис муйынына,

алҡынып, илаһи матурлыҡ менән тонйорап ятҡан түштәренә һылашҡан. Ошо илаһи йөҙгә нәзәкәтлек, нәфислек биргән танауы, ювелир оҫталығы менән яһалғандай ҡолаҡтары... Камалетдиновтың уның янында яңғыҙ ҙа ултырып ҡалған саҡтары булды, мәгәр ошо матурлыҡ аллаһы булырҙай һынға, эсбауыры өҙөлөп, йәне-тәне тартышыр сиктә тамһынһа ла, йоғонманы. Бөйөк ине Мәҙинә иҫһеҙ килеш тә. Илаһи ине. Хатта бер мәл Әйүптең башынан: «Был илаһи матурлыҡ эйәһен Әптеләхәт нисек ҡатын итергә... баҙнат итте икән?!» — тигән уй йүгерҙе, йоҙроҡтары уҡмашты.

Уның ҡарауы Камалетдинов хәҙер Мәҙинәнең һәр йөҙ һыҙатына тиклем белә. Ул уның ебәктәй нәфис, йомшаҡ булған, хәҙер һыйыр һауыуҙан, ауыр эштән ҡыҙара төшкән бармаҡтарын йәлләне, йөҙөнә ҡуңырлыҡ өҫтәгән елдәрҙе әрләргә лә, маҡтарға ла белмәне. Мәҙинәнең ҡара сәстәренең ут яҡтыһында ҡыҙыл нур сәсеүенә, ә тәненең ҡараңғыла фосфор фигура кеүек баҙлап-яҡтырып тороуына ғәжәпләнде. Ошо илаһи һын ҡараған һайын Камалетдиновтан берсә алыҫлашты, ә берсә магнит кеүек үҙенә тартты. Үҙ-үҙе менән көрәшеп-серәшеп, Камалетдинов Мәҙинә янында йоҡоһоҙ төндәр үткәрҙе...

Йоҡоһоҙ төндәр үткәрһә лә, ваҡыты-ваҡыты менән ул ойоп киткәндәй ҙә булды. Ата-әсәһенең ҡаны тамған ергә ҡайтып үс алыу тойғоһо менән һуғарылған Әйүп балалар йортонан гел ҡасты, гел ошонда атлыҡты. Ҡасып йөрөүе арҡаһында колонияға ла эләкте, урам шпаналары менән дә аралашты. Мәҙинә эргәһендә ултырған төндәр шул ваҡиғаларҙы хәтерендә яңынан тергеҙҙе. Балалар йортонан беренсе тапҡыр ҡасҡас, колонияға килеп юлыҡты. Ундағы тәүге һынау, тәүге сирҡаныс... Малайҙар уның аяҡ бармаҡтары араһына гәзит ҡыҫтырып, ут төрттөләр, ә Әйүп, аяҡтарын болғарға, ләкин ҡысҡырмаҫҡа тейеш. Әйүп ауыртыуҙан ирендәрен сәйнәп ҡанатып бөттө, ә гәзит һаман янып бөтмәй ҙә бөтмәй... Мәҙинәне осратҡас, ул ошо язаларҙы онотҡандай булды, сөнки был әрнеү хәҙер уның йөрәгенә күсте...

Колониянан ҡасҡас урам шпаналары менән йөрөгәндә лә еңел булманы. Кейемен аҡ уҡа кеүек һырып алған бетле кейемдәрҙе рельсҡа һалып, таш менән туҡмайҙар, унан, йән эйәләре осоп бөтһөн тип, күлдәк-ыштандарын елгә ҡаршы тотоп, товарняктарҙың өҫтөнә баҫалар ҙа, тиҙлек менән елгән поезд өҫтөндә баралар. Поезд еләә, күмер тейәгән вагондарҙан осҡан саң һырыған ҡара шайтандар, беттән ҡотолоу хаҡына ғүмерҙәрен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, билдәһеҙ йүнәлештә сапҡан вагон өҫтәндә аяғөҫтө килә... Ә Камалетдиновтың хәҙерге хәле? Ул шунан шәберәкме? Цирк аты кеүек бер урында тапанған райондың етәксеһе булыуымы бәхет уға? Туҡтауһыҙ алышынып торған хөкүмәт етәкселәре, миллионлаған гонаһһыҙ кеше һөйәктәре өҫтөндә ҡалҡып сыҡҡан яңы ҡоролошмо ҡыуаныс? Үҙҙәре икмәк үҫтереп, ашлыҡты кисеп йөрөп ас йөрөгән крәҫтиәндәрҙе, һайрар өсөн тыуып та, ғүмерен тиҙәк араһында үткәрергә мәжбүр бынау һылыуҙы күреү шатлыҡмы уға? Әйүп һаман да яланғас тәнен елгә ҡаршы ҡуйып, товарняк өҫтөндә елгәндәй хис итә үҙен. Елмәҫ ине — тәнен бет ашай, вагон өҫтөндә лә ҡурҡыныс — секундтың һәр өлөшөндә ҡолап, йәнтәслимгә тәгәрәп ятып ҡалыу ҡурҡынысы һағалай.

...Иң ҡыйыны — күпме йөрөһә лә, ҡасһа ла Әйүп кире балалар йортона әйләнеп ҡайта торған булды. Башта, ҡорсаңғынан, беттән арындырғансы, изоляторға ябалар. Бербереһенә тамсы кеүек оҡшаған көндәр теҙмәһе һуҙыла. Һин — тотҡон. Ишектәге тишекте теләгән

ваҡытта асалар һәм һине күҙәтәләр. Үҙең тотҡон, үҙең сәп-сәп кеүек яланғас. Әйүптең хәҙерге хәлеме шунан яҡшыраҡ? Өҫтө бөтөн, тамағы туҡ, ә эшләгән урыны — хәс тә изолятор: бер кем дә борсомай, ләкин һинең тормошоң, һәр аҙымың бөтә ғәләмгә асыҡ. Әйүптең яратырға ла, яратам тиергә лә хоҡуғы юҡ. Тотҡонмо эсир, әллә эсирҙәрҙе ҡарауыллаусымы тотҡон — бар, әйтеп ҡара...

* * *

Ҙур ғаилә ҡараған, бушамаған кеше рәүешле йәшәү, бер яғынан, Раузаға оҡшап ҡалды. Сәғәттәр буйы урам уртаһында тороп ләкәп һатырға ла, сүбәккә ҡалдырғансы кеше сәйнәргә лә ваҡыты юҡ. Яңғыҙ улының өйләнмәй, ҡурпы-үрсем ебәрмәй ҡаҡ сауыл кеүек йәшәүенә лә бик иҫе китеп бармай. Күп ғүмере магазинда үтә, килгән бер, инген бер кеше хәбәрен һөйләй. Кемдең нимә ашаған-эскәненән алып, кемдең ниндәй күлдәк-ыштан кейгәненә тиклем белә Рауза. Ана, әле Ғәлимә килеп инде кәпрәткә. Итәгенән эске күлдәге ике аялай күренеп тора. Берәү селтәрле эскейем кейгәс ни... Бының ише эске күлдәкте Раузаның һатҡаны юҡ илла! Күрше ауыл магазиндарында булыуы ла икеле — бөтәһе лә тауарҙы бер базанан ала.

— Ғәлимә, әллә Мәгәнит барып ҡайттыңмы?

— Юҡсы! Ә нигә?

— Эске күлдәгең ят... Минең мындайҙы һатҡаным юҡ.

— Һатмаһаң, һинекенән башҡа кәпрәт бөткәнме? — Ғәлимә һүҙҙе икенсегә бороп ебәрҙе: — Анау ҡыҙға йәтешле күлдәк кәрәк ине.

— Аһ-аһ! Нигә аны сразы әйтмәй тораң? Мына, күк сәскәле генә күлдәк! Бы ни килешер ул ҡыҙыңа...

— Ни хаҡ?

— Күкәйгә ул. Хаҡы — алтмыш күкәй.

Ғүмерендә тауыҡ аҫырамаған, ферма эшенән бушамаған Ғәлимәнең битенә тимгел-тимгел ҡыҙыл бәреп сыҡты:

— Күкәйем булһа, үҙем ашар инем! Аҡсаға әйбер алырға хаҡым юҡмы әллә?

— Сәй-шәкәр — пажалыста!

— Миңә күлдәк кәрәк!

— Күкәйеңде һал да, ал!

— Күкәй, күкәй ти торғас, гәзиткә лә төшкәнһең бит әле, түтәй!

— Ниндәй гәзиткә?! Гәзиткә мин ништәп төшәйем?! Кеше йәрен урҙап һөйгән бәндә лә, ирһеҙ бала тапҡан бисә лә түгелмен!

— Тәүбә әстәғәфируллаһ, Рауза апай, телең! Алайға китһә, яңғыҙ бисә булһам да, кәртәмә килеп ингән кеше һыйырын атып ашап ятмайым!

— У ниндәй һыйыр?

— Һеҙ айыу майы һөрткән һыйыр! Мәҙинәнең Билдәше!

— Ах кәнтәй! Һин нимә һөйҙәйһең?! Айыу итен Ишмәмәт һатып алып ашаны! Ғәрип франтауиктан көләң!

— Франтауик! Ағас франтауик! Яҡшы булһағыҙ, икәүләп «Ҡармаҡ»ҡа төшөп ятмаҫ инегеҙ! Яҡшы кешенән балаһы карикатура яһамай! Ыстырам!

— Ауыҙыңды иптәп ас, ҡыҙыҡай! Ауырыңды убырнайға таштап йөрөгәс тә, әҙәм белмәй ята тиһеңме?! Нисек алдыңғы булыуыңды ла беләбеҙ! Үгеҙ аҫтына ятаһың ғына ҡалды былай ҙа!

— И һәм ятырмын да! Хәлемдән килә! — Ғәлимә ишекте лә япмай сығып китте.

Раузаның күңеле болоҡһоно, үкереп илағыһы килде. «Туҡта, бы ниндәй хәбәр булды әле? У ниндәй гәзит?» — Рауза, магазинын шарт ябып, өйөнә ашыҡты.

— У ниндәй гәзит һөйҙәй халыҡ? — Рауза ярһып өйөнә килеп инде. Ҡапҡа, ишектәр асыҡ булғас, Ишмәмәтте өйҙәлер тип уйлағайны. Юҡ. Ҡайҙалыр олаҡҡан! Рауза эт ояһы артындағы утын өйөмөнә күҙ йүгертте: баш ятасы?! Әйе, әйе... Күкбүре бер нәмәне талай ине шул.

Һыйыр башы! Мөгөҙҙәре осло булғанға күрә бысылған... Күкбүре ҡайҙандыр һөйрәп килтергән! Эт бит. Ә хәҙер теге ни... аҡ эттең бәләһе ҡара эткә тигәндәй... Эйе, эйе... Мәҙинә меҫкендең һыйыры был. Был ҡыутомшоҡ Күкбүре, йәне йәһәннәмгә олаҡҡыры, Ишмәмәтте итәки ғәйепте итә бит! Ярһыған Раузаның ҡолағына үкергән, аҡырған тауыш салынды. Бындай тауышты Рауза бала сағында урыҫ ауылына ызнакумдарына барғанда ишеткәйне. Баҡһаң, сусҡа салғандар икән. Ҡото алынып ҡайтып, аҙаҡ өләсәһе ҡот ҡойҙороп әҙәм итеп алғайны үҙен. Атаҡ! Тауыш кәртәнән түгел, мунсанан килә! Шәңгәрәй, ипһеҙ, бешеп йәнып ята былай булғас!

— Шәңгәрәй! — Хәле бөтөп мунса ишеген асып ебәргән Рауза күҙҙәре күреп өлгөргән имәнес күренештән ултыра төштө. — Юҡ! Юҡ! Юҡ! Эй, кешеләр! Ярҙамға! Ярҙамға! — Тороп йүгерер ине, аяҡтары тотмай, хәле бөттө, күҙ алдары ҡараңғыланды һәм... Сибәғәттең үлемен ишеткәндәге кеүек иҫтән яҙҙы.

* * *

Ҡасимдарҙың ҡолонон күрергә барған Хөсәйендең күңелендә бөгөн байрам. Уға бынау буран нимә? Пүстәк. Ә ҡолон ысынлап та шәп: ҡолаҡтар шәм кеүек, муйын оҙон, һығылмалы, танау тишектәре иркен, күҙҙәре осҡор, тояҡтарын текә сәнсеп тора, бәкәлдәре нәҙек, түше ғәйрәтле, үҙе һары ғына. Һарайғыр нәҫеле! Әсәһе артынан юртҡанын да күрҙе. Юртаҡ! Һарайғырҙың үҙгенәһе инде!

— Ағай, ҡолондо көн дә килеп ҡарап торормон инде, йә һеҙ тәрбиәләй белмәҫһегеҙ... — тине күҙҙәренә йәш эркелгән Хөсәйен.

— Ҡолон ғына ҡараған бар, ҡустым...

— Был бит ябай ҡолон түгел, толпар нәҫеле!

— Шулаймы икән...

— Шулай, ағай, шулай!

— Йә, ярар, хәйерлегә юрайыҡ...

— И-и-и генә... — Хөсәйендең ҡолондо һыйпаған һайын күҙенә йәш эркелде. Эркелһен. Илаһын. Мәҙинәнең табылғанын ишеткәс бер илағайны. Бына тағы...

— Мәҙинә балнистан ҡайтҡас килеп күрер әле...

— Күрһен, күрһен!.. Мәҙинә ат ярата бит.

— Һарайғыр ныҡ яратты Мәҙинәне!

— Яратҡандыр, яратҡандыр! Мәҙинәне һуң кем яратмай?!

— Ну Һарайғыр бигерәк тә яратты! Ныҡ яратты!

Хөсәйен урам буйлап атланы. Шатлыҡтан, буран тип ҡарап тормай, тунының төймәләрен ысҡындырып ебәрҙе. Ҡыуанысын кем менәндер уртаҡлашҡыһы килде. Әсәһе! Ниңә әле ул бер ҙә әсәһенә инеп сыҡмай? Әсәһенән яҡын уның тағы кеме бар?

Ҡапҡа шар асыҡ, мунса яғында ишетер ҡолаҡҡа сәйер тауыштар сыға, буранмы шулай олой әллә...

«Ярҙамға!» Әсәһе тауышы?! Хөсәйен аяҡ аҫтында ятҡан һайғауҙы эләктерҙе. Моғайын, әсәһен Ишмәмәттең Күкбүреһе талай! Ана, әсәһе мунсанан сыҡты ла ауҙы. Хөсәйен мунса ишегенән генә эскә ҡараны: ғәрип Ишмәмәт... Шәңгәрәйҙе... Был ни хәл?! Күҙенә ҡан һауған Хөсәйен һайғау менән Ишмәмәттең яланғас һыртына ебәрҙе!

— Әҙәм аҡтығы! Эт арзаны! Үлтерәм, ҡәбәхәт!

Тауышҡа Рауза күҙен асты, мәтәләй торғас, тороп, Ишмәмәт менән Хөсәйендең араһына инде:

— Уй балам! Үлтерә күрмә! Шаҡшы өсөн яҡшы башыңды әрәм итмә! Улым, мине уйҙа!..

Ишмәмәт сығып ҡасырға итте, әммә тубығына төшкән салбарына эләгеп йығылды.

— Убыр! Убыр эттәне! Әйттем бы минең атам түгел тип! Раужа әпшәй! Мине мында ҡалдырма! Әпшәй! — Шәңгәрәй, бала кеүек шарылдап илап, Раузаның аяҡ аҫты-

на йығылды. — Алып кит мине! Алып кит! Рауза әпшәй!

Шәңгәрәйҙең асырғанып илағанын күргән Хөсәйен отоҫо ярһыны:

— Үлтерәм шаҡшыны, тотма, әсәй! Әҙәм түгел был, әүернә!

Ул арала сатан булһа ла ҡасыуға йылғыр Ишмәмәт өйөнә инеп бикләнде. Ярһыған, ҡыҙған, илашҡан өс кешенән торған төркөм Раузаның элекке өйөнә атланы...

* * *

«Мәҙинә иҫән! Мирхәйҙәров, тағы бер нисә колхозсы уның эргәһенә барып ҡайтҡандар. «Аяҡҡа баҫыу менән Тирәклегә ҡайтам, хор коллективы менән «Азамат»ҡа репетиция башлайым. Мин уны хәҙер үк ишетәм кеүек!» — тип әйтеп ебәргән. Һыйырҙарын һорашҡан...» Ғәлимә дөрҫ-дөрҫ типкән йөрәге тауышына ҡолаҡ һалды. Әйҙә ул шул хоры менән булышһын, ә Ғәлимә эш кешеһе. Ул фермаға күпме көсөн һалды! Теге саҡ ул ниңәлер ҡаушаны. Ә был юлы... Раузаның Раузаһы Ғәлимәнең ырыҫынан көлөп маташты. Ғәлимә үҙенең нимәгә һәләтле икәнен күрһәтәсәк әле! Тик уға ҡамасауламаһындар! Саяф уның ҡулында, Саяфты ул берәүгә лә бирмәйәсәк!..

Раузанан ишеткән һүҙҙәрҙән һуң һаман тынысланa алмаған Ғәлимә ҡараңғынан тороп фермаға атлыҡты. Ҡапҡаһына еткәс, артына боролоп ҡараны. Ҡурағa үтте. Мәҙинәнең таналары эргәһенән үткәндә арҡаһы сымырҙаны, йөрәгенең тибеше йышайҙы. Кистән әҙерләп ҡуйған еренән аммиак алды, бутҡаны биҙрәгә һалып, эргәһендә күнәк шылтырағанға тора башлаған Сыбарҡай менән Алаҡайҙың алдына ҡуйҙы. Әхирәттәренең шапылдағанына Бөйрәкәй ызылданы, муйынын һуҙып, аҙыҡ менән бүлешеүҙәрен үтенде, үҙенең ҡара уйҙарынан ярһыған Ғәлимә һәнәк менән уның мөгөҙ төбөнә сәнсте. Һыйыр, үкереп, башын сайҡап, ҡабырғаһына ауҙы...

— Беренселек миндә һәм тик миндә буласаҡ! — Ғәлимә, күнәктәрҙе сайҡатып түңкәрҙе лә, һауынсылар килә башламаҫ элек, ҡуранан сығып тайҙы...

* * *

Ауыр уйҙар ҡамауында ҡалған Ихсанбай төнө буйы эсте. Эйе... башҡаса бында ҡалыуҙың кәрәге бөттө. Үҙе ғәйепле. Сысҡан кеүек аҫтан ҡырҡып, боҫоп йәшәй белмәне. Әммә... уға Мәҙинәһеҙ ғүмер ниңә кәрәк? Һылыу ҡатын, яҡшы ат хаҡына кемдәр генә башын һалмаған? Бөтәһе лә, бәлки, бөтмәгәндер? Тирәкленән башҡа ерҙә лә тормош бар. Ихсанбай шөйлә яҙмыштан кәмһетелгән, ырыҫһыҙ бәндә лә түгел. Таулыла уның әсәһе бар. Эйе, эйе! Фәүзиә ҡарсыҡтың тере икәнен, Ишмәмәт өндәшмәһә лә, яҡшы төшөнә Ихсанбай! Фәүзиә аша ул Сәбиләһен, улын табыр. Сәбиләнең уға кәрәге юҡ. Ә бына балаһы... Мәҙинәне күрер кәрәк! Әгәр ул Ихсанбай менән китергә риза булмаһа? Ҡурҡытыр, янар! Ихсанбай ҡулына ялтлап торған бысағын алды. Бына ул! Әгәр Мәҙинә Ихсанбайҙыҡы булырға риза булмаһа, бер кемдеке лә булмаясаҡ. Ихсанбай бында ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, Рауза ҡарсыҡ менән йәшәр өсөн ҡайтманы! Мәҙинәһеҙ ҙә китер ул, әлбиттә. Улын алыр ҙа китер. Ҡаҙаҡ далалары, һарт яҡтары... Ҡайҙа ла бер Ҡояш, бер Ай. Тыуған ерендә кәрәк түгел икән, башҡа тупраҡ һыйындырыр. Был яғына ул, моғайын, тормоштан отолмаҫ. Отолоу ошонда тороп ҡалыр. Ә хәҙер китмәй булмай. Оло юлға сыҡмай ғына, Таулыға тура тартыр. Әсәй ҡарсығы барыбер һыйындырыр... Көн йылыға инде...

Ихсанбай биштәренә ризыҡ, кәрәкле әйберҙәрен тултырҙы, мылтығын алды. Хуш, Тирәкле! Байғош Ишмәмәт булғансы, Ихсанбай булып, үҙе булып ҡалғаны яҡшы! Ана, Күкбүре кире ҡайтһа ла ҡасты. Сынйырын һөйрәтеп тайған! Аяҡ-

тарына бығау һалмаç борон, Ихсанбайға ла һыпыртҡан яҡшы...

Буран ойоçҡотҡан ауыл урамы буйлап атлаған Ихсанбайҙы берәү ҙә күрмәне. Ферма үренә табан кемдер йүгергән кеүек булды. Хәйер, хәҙер кем булһа ла барыбер түгелме уға? Ихсанбай, оло юлдан сығып, ҡарағусҡыл һыҙат булып ҡабарып ятҡан Күктау һырттарына атланы. Ана улар, Ихсанбайҙы ике йыл буйы үҙендә йәшереп йәшәткән тауҙар! Тормош ул бер Тирәклелә генәме?!. Йән биргәнгә Хоҙай йүн дә бирә...

* * *

Раиса Максимовна Мәликәне ихлас ҡаршы алды:

— Үтегеҙ, һылыуҡайым, үтегеҙ! Килеп ҡайһылай яҡшы иттегеҙ!

Мәликә ғәҙәттә урыç кухняһынан килә торған эскелтем-сөскөлтөм еçле аш бүлмәһенә үтте:

— Әйүп Ғәзизович ял итә... бала ҡамасауламаһын тип...

— Ой! Әлбиттә! Әлбиттә! Ә Әйүп Ғәзизович... Ул нисек... Көндөҙ...

—Ах! Һорамағыҙ! — Балаһын сисендергән ыңғайға, барыһын бикләп, эсенә йыйып ултырған Мәликә күкрәгендәге быуа йырылдымы ни! — Ул бит, Раиса Максимовна, кеше өсөн үлә лә китә! Тирәкле һауынсыһы хаҡында ишеткәнһегеҙҙер?

— Ой, эйе! Талип һөйҙәгәйне, — башҡорттоң был яҡ һөйләшендә тәтелдәне Раиса-Рәшиҙә ханым. — Теге... бүре аçтында тере ҡалған ҡыҙ! Талип көлә. Бүре ул ҡыҙҙы үтә һылыу булғанға оялышынан ашамағандыр, ти. Шунан нимә?..

— Шунан ни шул: әҙләп табыуы етмәгән, иçенә килгәнсе эргәһенән китмәне...

— О, эйе! Ул бик шәп йырсы тиме? Мәскәүҙә лә уҡығанмы шул...

— Уҡыған... Әйүп Ғәзизовичтың дуçының ҡатыны бит инде ул...

— Бәй, ул ҡатын кешеме ни?

— Балаһы бар...

— Ул тиклемен ишетмәгәйнем. — Раиса-Рәшиҙә ханым өçтәлгә самауыр ултыртып булышҡан арала тутап, уйлана бирҙе. — Ни тиһәң дә, күңеле һәйбәт икән Әйүп Ғәзизовичтың.

— Эйе, бөтә кеше лә ундай... аҙымға һәләтле түгел, әлбиттә...

— Түгел, түгел... Ә һинең Флориданың нисек шәбәйгән! Просто невеста!

— Ә һеҙҙең Әбүбәкерегеҙ ҡайҙа?

— Өçтә! О, ул! — Хужабикә ҡул һелтәне. — Шундай деловой. Әллә нәмәләр яһап бөтә. Флориданы шунда индерәйек! Уйнаһындар! Беҙҙең Әбүбәкергә лә балалар менән аралашыу етмәй!

Флориданы күргәс, зәңгәр күҙле, матурлығы күҙгә ташланып торған малай ҡулын һуҙҙы:

— Курешәйек! Мам, ә нигә ул ҡул бирмәй?

— Ояла ул, улым! Невеста бит ул. Ул шулай оялсанырaҡ булыр инде...

— Ә ул һөйләшә беләме?

— Һөйләшә, әлбиттә, әҙерәк һиңә өйрәнһен дә...

Флорида уйынсыҡтарға әүрәне, малайҙың ҡаршыһына ултырып алды. Мәликәнең: «Юҡ, улым, ул һөйләшә белмәй», — тип әйтергә теле әйләнмәне.

Аçҡа төшкәс, ике түрә бисәһе тәмләп-яйлап сәй эсергә ултырҙы. Икеһе лә үҙҙәренең бушамауына зарланды. Зар шулай ҙа күберәк Мәликә ауыҙынан сыҡты. Донъяһы етеш, иренән һөйөлөп, балаһына һөйөнөп йәшәгән Рәшиҙә ханым гел Талибын маҡтаны:

— Ой! Он у меня тоже бик положительный! Әле бер ғәрипте аласыҡҡа йәшәргә индерҙе. Ашата, эсерә... Ярай, ат ҡарап булһа ла тамаҡ яллыҡ эшләр, ти.

Ул арала утын күтәргән, бер яҡҡа бик ығышып атлаған, кеше ҡарамаçлыҡ булып янған йөҙлө һаҡалтай килеп инде, утынын бушатҡас, хужабикәгә өндәште:

— Малдарға һыу эсерҙем, аттарҙың аçтын алдым, бөгөн кис бараһы ерем бар, юғалтмаçһығыҙ... — Ул сығып китте.

— Тауышы ниндәй имәнес! — Ҡурҡыуҙан ағарынған Мәликәлә

сэй ҡайғыһы китте. — Ҡайҙан таптығыҙ быны?

— Ой, ул бер ҡайҙа сыҡмай! Зыяны юҡ уның! Һуғыш бит... Ҡатыны көтмәгән...

— Мин ғәриптәрҙе күп күрҙем, ләкин...

— Пустяки... Унан хатта беҙҙең Әбүбәкер ҡурҡмай!

— Әбүбәкер? Һеҙ уға... баланы күрһәтәгеҙме?

— Ә нигә? Әбүбәкер буласаҡ врач. Яҡшыһын, яманын күреп үҫһен. Был ғәрип уны шундай ярата, ул барҙа балаға бер ниндәй хәүеф янамай!

— Хәүеф?! Уға ниндәй хәүеф янаһын?!

— Да мало ли чё... — Раиса Максимовна зәңгәр күҙҙәрен тәҙрәгә төбәп алды. — Дуҫыңдан дошманың күберәк, Мәликә аппағым...

— Уныһы шулай... Ләкин мин Флориданы белмәгән-күрмәгән кешегә ышанып ҡалдырмаҫ инем...

— Ах, красавица моя, һин әле йәш... Күп нәмәне аңлап бөтмәйһеңдер... Һинең тағы балаң булырға мөмкин. Ә Лоҡман менән миңә... Әбүбәкер у нас единственный. Ә беҙгә йортта тоғро кеше кәрәк. Был ғәриптең барыр ере, батыр күле юҡ.

— Мин китәйем инде! — Мәликәнең ҡапыл кейенә башлауы Раиса Максимовнала бер ниндәй ҙә шик уятманы. «Ой бедняжка!.. Ирен көнләй бит был меҫкен ҡатын!» — тип артынан йәлләп оҙатып ҡалды.

* * *

Мәҙинә яҡшы кәйеф менән уянды. Тороп тәҙрә эргәһенә килде һәм толомдарын тағатып, сәс тарай башланы. Көн ниндәй матур! Шундай яҡты, ә һауа шундай зәңгәр! Их!.. Алыҫта Күктау һырттары күренә. Күктауҙың теге яғында — Тирәкле. Тәңребирҙе, Аҡйылға... Оло Бейек, Ҡаратау... Аҡйылғаның эргәһендә генә уларҙың өйө. Хәҙер унда бәләкәс Дауыты менән Мәһинур инәһе иртәнге сәй эсәләр... Ә Ғәзимә! Әлдә ул бар яндарында. Ул, моғайын, Дауытҡа кәзә һөтө эсерәләр... Ә Мәҙинәнең һөтө ҡороно инде. Психиатр Лидия Николаевна, башҡа һөт төшмәҫ, ҡурҡыуҙан һөт эшләй торған биҙҙәрҙең функцияһы үҙгәргән, тине. Йә, ярай... Иң мөһиме — ул тере. Ошоға тиклем тормоштоң ҡәҙерен белеп етмәгән Мәҙинә. Баҡһаң, ғүмерҙең һәр көнө Хоҙайҙан оло бүләк икән!

Аяҡ тауыштары ишетелде, палатаға врач менән Камалетдинов килеп инде.

— Мөмкиндер бит?

Бер ҡат ҡына балнис күлдәгендә торған, сәстәре кәүҙәһен шаршау булып япҡан Мәҙинә уңайһыҙланды.

— Уф, йыйып өлгөрмәнем.

— Шунан, һылыуҡай, — врач койка ситенә, ә Камалетдинов ултырғысҡа ултырҙы. — Тирәкле һандуғасы һайрарға әҙерме?

— Һайрау түгел, осорға ине!

— Туҡта әле, эре ҡанат ярмай тор әле...

— Юҡ, ысынлап. Миңә ҡайтырға кәрәк!

— Ҡасан ҡайтыу мәсьәләһен врач хәл итә!

— Мин һеҙҙән... үтенәм!

— Нишләйбеҙ, Әйүп Ғәзизович? — Оло врач күҙлек өҫтөнән Камалетдиновҡа ҡараны.

Әйүп Ғәзизович тамаҡ ҡырҙы:

— Бөгөн, былай, Тирәкле яғына еңел машина сыға, инструкторҙар бара.

— Ләкин, ҡыҙыҡай, көймәҫкә, ҡыҙмаҫҡа, һалҡын тейҙермәҫкә ант итһәң генә сығаһың!

— Ант! Һеҙгә бөтәгеҙгә лә ҙур рәхмәт!

— Рәхмәтте үҙеңдең организмыңа әйт! Ҡөҙрәтең үҙеңдән ҙурыраҡ!

Мәҙинә, инструкторҙар тейәлгән «Победа»ға ултырып, Тирәклегә атлыҡты...

* * *

Камалетдинов, Мәҙинәне оҙатҡас, бушап, толҡаһыҙланып ҡал-

ған күңеленә йыуаныс таба алмай хитланды. Ауырыуҙан, ҡурҡыуҙан миктәгән Мәҙинә эргәһендә атаһының булмауы аяныс. Әйүп Ғәзизович, һуңғы көндәрен тик Мәҙинә эргәһендә үткәргәнлектән, Хашимдың эшенең нисек барыуы менән ҡыҙыҡһынырға ла онотто. Трубкала Әҙелғужинаның борсоулы тауышы һағайырға мәжбүр итте.

— Хашим Насибуллин…

— Ә нимә?! Уға нимә булды?

— Уға бер ни ҙә булманы. Ишмөхәмәт Баҡтымбаев — ул Ихсанбай Моратов.

— Ихсанбай менән Ишмөхәмәт… бер кеше?!

— Эйе, бер үк кеше. Ләкин Ихсанбай Моратов ҡасҡан.

— Мирхәйҙәров ни ти?

— Мирхәйҙәров унын Ихсанбай икәнен беҙҙән алдараҡ төшөнгән…

— Фу, шайтан!.. Ә миңә өндәшмәне!

— Партизан… Бөтәһен дә үҙе хәл итмәк булған. Факттар йыйған фашларға. Ә бер ҡыҙыу башы тотҡан да Ихсанбайҙы, йәғни Ишмөхәмәтте, «Ҡапҡан»ға төшөргән…

— Аптыраттың бит әле…

— Тирәклелә булдым. Ә, ғөмүмән, һәйбәт кешеләр унда, Әйүп Ғәзизович… Ә Мәҙинәне нисек яраталар! Әсәһен бик һағынып хәтерләйҙәр, Хашимға ла мөнәсәбәттәре яҡшы…

— Тирәклелә булып яҡшы иткәнһегеҙ… Ихсанбай Моратов, әгәр ул ысындан да Ихсанбай булһа…

— Беренсенән, әгәр ул ысындан да Ихсанбай булмаһа, ҡасмаç ине. Ихмөхәмәт ниңә ҡасһын? Икенсенән, ул ысынлап та ҡурҡыныс кеше, Әйүп Ғәзизович!

— Белеүемсә, Фәүзиә лә, Сәбилә лә тереләр… Ихсанбайҙың ғәйебе…

— Ә Зарифа?! Ә малайҙар?!

— Малайҙарҙың батып үлеү ихтималы…

— Ә Сәбилә ни өсөн ҡасҡан? Ихсанбайҙың әле ҡылған гонаһтары… Ҡәҙимге кеше ул енәйәттәрҙе эшләй алмай, иптәш Камалетдинов.

— Ихсанбайҙан бөгөн кемгә ҡурҡыныс янай?

— Иң беренсе сиратта, Әйүп Ғәзизович, Мәҙинәгә.

Тынүслыҡ эҙләп Әҙелғужинаға шылтыратҡан Әйүп шаңҡып, башын устары менән ҡысты.

* * *

Ихсанбай, нисә барһа ла ер үлсәгән, йә канау ҡаҙған кешеләрҙән үтеп, уларға күренеп үҙен фашлауҙан ҡурҡып, күрәҙәсе ҡарсыҡ йәшәгән өйгә яҡынлай алмай интекте. Кис менән дә барып ҡараны — инә алманы: эт лаулап өрҙө, тәҙрә ҡапҡастары ябылған, ҡапҡа ишектәре бикле, йорт үҙендә йән эйәһе барлығын белгерткән бер ниндәй билдә-шипкерт белдермәне. Өҫтәүенә, Ихсанбай йәшәгән баш табип аласығынан Кәкере ауыл алыç ҡына ара, гәрип аҙымы менән көнөнә әллә нисә барып урай торған яҡын ер түгел…

— Һыуһаҡ бабай! Бала эргәһендә ултырып тормаçһың микән? — Аласыҡ ишегенән башын тығып былай өндәшеүгә Ихсанбай шатлығынан саҡ ҡысҡырып ебәрмәне.

— Әлбиттә! Әлбиттә!

Рәшиҙә ханымдың уға Әбүбәкер атағанса «Һыуһаҡ бабай» тип өндәшеүе ҡыҙыҡ. Элек, Тирәклегә килеп йәшәй башлағас та, ауыл аша «Алла — һыуһаҡ! Алла һыуһаҡ!» тип һөрәнләп һәләмә кейемле ҡарт үтеп киткәйне. Ауыл халҡы унын тоғона ризыҡ һалды, малайҙар, тал аттарына атланып, ҡартты ауылдан сығып киткәнсе оҙата барҙы. Ихсанбай малайҙарҙан: «Был кем ул?» тип һорағайны, «Һыуһаҡ бабай!» тинеләр. Беренсе тапҡыр Әбүбәкерҙең болотһоҙ күк кеүек ҡараштары менән осрашҡан Ихсанбай үҙенә төбәп бирелгән һорауҙы ишеткәс, күп уйлап торманы: малай саҡта осраҡан шул ҡартты ҡапыл иçенә төшөрөп: «Һыуһаҡ бабай!» тине лә ҡуйҙы. Был исем уға шунан алып йәбеште, хәҙер, ана, малайға эйәреп, өлкәндәре лә шулай өндәшә.

Әммә Һыуһаҡ бабай фәрештә ҡиәфәтле был балаға ҡапыл яҡынламаны. Төндәрен усаҡ яҡтыһында ул ағастан ат, сана, арбалар, һыҙғыртҡыс кеүек уйынсыҡтар яһаны. Бөтә ихласлығын, быға тиклем күңеленең ҡайһы ерендәлер йәшеренеп ятҡан оҫталығын һалып юнған был әйберҙәрҙе малайға йә Рәшиҙә, йә Лоҡман аша бирҙерҙе.

— Мына, — тине ул сираттағы уйынсығын һуҙып, — малайға бирегеҙ. Һыуһаҡ бабай бирҙе, тип әйтегеҙ.

Семәрләп, урын-еренә еткереп, ысын арба, ысын ат кеүек итеп эшләнгән уйынсыҡтар аша, күрәһең, сабый күңелендә уны яһаусыға ҡарата ҡыҙыҡһыныу уянды, ул үҙе лә аңғармаҫтан был сәйер «бабай»ға тартыла башланы.

— Һыуһаҡ бабай ниңә килмәй? Минең уның менән уйнағым килә! — тип ҡайһы саҡ көйһөҙләнә лә башланы бала. Уның һәр теләген ҙур ихласлыҡ менән башҡарырға әҙер торған Рәшиҙә менән Лоҡман әлдән-әле, үҙҙәре берәй-яры киткән һайын, Һыуһаҡты бала эргәһендә ҡалдыра башланылар.

Бына улар тағы икеһе генә ҡалды. Сабыйҙы ҡулына алғас, Ихсанбайҙың бөтә тәне буйлап рәхәт тулҡын үтте. Был тойғоно, был балаға булған хисте, унда бығаса бер кем дә уята алғаны юҡ ине. Хатта Гөлбаныу ҙа, Мәҙинә лә... Был башҡа тойғо. Ихсанбай танауын баланың күкрәгенә терәне: еҫкәйҙәре! Ниндәй тәмле, ниндәй иҫерткес рәхәтлек бирә икән бала еҫе!

— Ах, улым! — Ауыҙынан был һүҙҙең ысҡынғанын Ихсанбай үҙе лә һиҙмәй ҡалды. Ҡайһылай йәтеш һүҙ: «Улым...» — Улым! Улыҡайым!

— Һыуһаҡ бабай, — бала нескә ҡулдары менән уның битенән һыйпаны. — Үҫкәс, мин врач булам.

— Ә нигә... врач?

— Врач булам да, битеңде дауалайым. Һине мату-у-ур... аппасыҡ итәм. Ә һинең аппасыҡ булғың киләме, Һыуһаҡ бабай?

— Аппасыҡ... — Ихсанбай көлөп, быларға ҡаршы ултырып алып бит йыуған аҡ бесәйгә ҡараны. — Бына ошоноң кеүек ап-аҡ иткең киләме мине?

— Унан да ағыраҡ! Ҡар мыһаҡ! — Шулай тине лә Әбүбәкер сыңғырлатып көлөп ебәрҙе, ҡарашы өйгә зәңгәр нурҙар сәсрәтте. Уға ҡушылып, ғыжылдығы сығып, Ихсанбай ҙа көлдө. Рәхәт! Бына бала уның алдына һыйынып йомғаҡтай бөгәрләнеп ултырып алды.

— Һыуһаҡ бабай, ә һинең... әбейең бармы?

— Әбейем? Әбейем... юҡ.

— Ә нигә... юҡ? Бабайҙарҙың әбейе була бит ул! Ә... малайың?

— Малайым бар.

— Ул ҡайҙа?

— Улмы? Ул... ҡайын башында, ҡаймаҡ ашап ултыра...

Әбүбәкер тағы сырҡ-сырҡ көлә, көлгән ыңғайға күҙҙәре зәңгәр нур сәсрәтә.

— Һин беҙҙә гел, гел булаңмы, Һыуһаҡ бабай?

— Гел, гел була алмам мин бында, балам... Китермен моғайын.

— Ҡайҙа?

— Алыҫҡа... Ә һин, улым, Һыуһаҡ бабайың менән алыҫҡа китергә риза булыр инеңме?

— Эйе-е...

— Тик был турала бер кемгә лә әйтмә, йәме!

— Йә... Ә һин, Һыуһаҡ бабай, мине ныҡ-преныҡ яратаңмы?

— Бик ныҡ яратам мин һине, сабыйым... Бик ныҡ... Быға тиклем һине яратҡан кеүек бер кемде лә яратҡаным... булманы. — Ихсанбай күҙенән атылған йәш бөрсөктәре һаҡалы буйлап аҡты.

— Мин дә һине ныҡ-ныҡ яратам, Һыуһаҡ бабайым!

* * *

Яҙғы шау-шыуға, гөрләүектәр йырына, йылыға кинәнгән ҡош тауыштарына, ирәйеп мөңрәгән-кешнәгән ауаздар күмелгән Тирәклегә ҡайтып инеү Мәҙинәгә ҡанат үҫтер-

гәндәй булды. Бында, үҙен көткән, яратҡан, һағынған донъяла, ул, әлбиттә, тиҙерәк аяҡҡа баҫасаҡ. Ана уларҙың өйө. Ҡолғаға беркетелгән сыйырсыҡ ояһында пыр туҙып сыйырсыҡ менән турғайҙар даулаша. Күрәһең, ҡошсоҡтар иленә ҡайтҡансы, өйҙәренә башҡалар урынлашҡан. Картуф баҡсаһы ла шөйлә асылған. Мәҙинәгә уны һөрҙөрөү йәһәтен күрер кәрәк. Ана, Фәүзиә инәһенең өйө. Кескәй тәҙрәләре менән ул да бөтә булмышына яҡтыртҡан ҡояшҡа баҡҡан. Мәҙинәнең тәҙрәһенә йәнә бер ҡояш ҡапланды, быяланы сәпелдәтә-сәпелдәтә, сабый әсәһен күреп шатланды.

— Дауыт!

Дауыт эргәһендә йәнә ике баш хасил булды. Береһе — битендәге һәр йыйырсығында нур уйнатҡаны — Маһинур, икенсеһе — тыйнағыраҡ, ләкин ҡәнәғәт йылмайғаны — Ғәзимә.

Мәҙинә аҙымын шәбәйтте, йөрәге алҡымында уҡ дарҫлап тибә башланы.

— Дауыт! Уй, һин ҡайһылай... уҫлаптай булғанһың!

— Ҡайтыуыңа бурһыҡтай итергә тырыштыҡ инде баланды! — Ҡулындағы бәйләмен ситкә һалып, Ғәзимә самауыр ҡолағына йәбеште. — Имеүҙе онотто инде Дауытың! Ҡабат иҫенә төшөрөп торма!

— Атаҡ... бәләкәй бит әле ул, — нескә күңелле Маһинур күҙҙәрендәге йәште яулыҡ осо менән һыпырҙы. — Баланың тәүге ҡайғыһы имсәктән айырылғас баштана, ти. У тиклем ни... имһен әле Дауыт! Кәзә һөтө тигәс тә, әсә һөтөнә етәме?

— Кәзә һөтөнөң күкрәк һөтөнән кәм ере юҡ, — Ғәзимә, яулығын артҡа ташлап, мейестән сөгөн сығара башланы. — Кәзә һөтөнә генә бойҙай бутҡаһы ултырткайным. Әйҙә, ҡул-һалығыҙҙы йыуа баштағыҙ.

...Тиҙҙән өс ҡатын һәм бер кескәй ир затынан торған ғаилә ашъяулыҡ тирәләй ултырҙы. Оло ҡатындарҙың береһе-бер ауырыу тураһында Мәҙинәгә һүҙ ҡатмай, йәнәһе, кәрәк булһа, үҙе һөйләр. Ә Мәҙинә шат. Уның күҙе баянан бирле гөл көршәктәрендә тиртеп сыҡҡан үҫентеләрҙе иркәләй. Бына улар, Себер кедрҙары! Уларҙың һәр береһендә — Әптеләхәттең күҙ нуры, һөйөүе, йылыһы, өмөтө...

— Эшкә... сыҡмаҫһың әле? — Сәй һыйаған Ғәзимә Мәҙинәгә һынабыраҡ ҡараны.

— Атаҡ, бәләкәй хәл ала бирерһең, — Маһинур, хәленән килһә, Мәҙинәне өйҙән бер аҙым да ситкә ебәрмәҫ ине.

— Кеше араһында күңел тиҙерәк яҙыла, Маһинур, — быныһын донъя күргән Ғәзимә әйтте. Мәҙинә күреп тора: Ғәзимә арҡаһында уның ғаиләһе асыҡмаған, етеш көн күргән. Тормош, ҡаҡҡылай торғас, уны шулай бөтмөр, сая һағандыр инде.

— Ике һыйырыңды иткә һуйҙылар, — Маһинур йәнә яулыҡ осо менән күҙен һыпырҙы.

— Нишләп?! Улар... таналар ғына бит әле!

— Эстәре күпкәнме, елене шешкәнме...

— Көймә! — Ғәзимә Мәҙинәнең сынаяғына үрелде. — Баш һау булһын! Һинең алға сыҡҡаныңды күрә алмаған кеше эттеге булды ул! Бөйрәкәйең дә ауырый тиҙәр ине... Көймә!

— Кешенән ишетһәң, ҡыйын булыр... Юғалған һыйырыңдың башы табылды.

— Ҡайҙа?!

— Ишмәмәт ихатаһында ята. Шәңгәрәй кеше апарып күрһәткән. И! Мында ниҙәр генә булманы! Ишмәмәт юҡ хәҙер ауылда. Сығып ҡасты. Шәңгәрәй бахыр Раузала йәшәй, ә Рауза үҙ өйөнә ҡайтты.

Бөтәһен аңлап бөтмәһә лә, күңеле менән ниҙер һиҙенгән Мәҙинә, кейенеп, фермаға атланы.

«Ҡыҙыл мөйөш»тә уны мөдир Сәйф киң йылмайып ҡаршы алды.

— У-у... кемде күрәм! Кемде күрәбеҙ! Һауынсы таба алмай йонсой инек, әлдә ҡайттың, ҡарындаш!

— Мин ҡайттым да ул... Минең иң һөтлө һыйырҙар... — Күңеле тулған Мәҙинә, йәшен күрһәтмәҫ өсөн, ситкә ҡараны.

— Әллә инде, үҙем дә ныҡ көйҙөм. Аммиакты үлсәмәй бирмәгеҙ тип күпме ныҡыйым!

— Эш аммиакта түгел бында, Саяф ағай!

— Һуң, аммиакта булмай? Уны бит бер грамм артыҡ бирергә ярамай!

— Уны үлсәмәй бирәү ҙә бирмәй! Ә Бөйрәкәй?!

Саяф елкәһен тырнаны:

— Бөйрәкәй, эйе, ауырый шул. Әле яңы тағы иткә заданье килеп төштө. Башмаҡтарҙы тапшырып булмай. Ҡайһы бер һыйырҙарҙы забраковать итербеҙ тип торабыҙ...

— Бөйрәкәй — мал ҡото. Уға тейергә ярамай!

— Ул бит былай ҙа өс имсәк!

— Имсәге кәмеһә лә һөтө кәмемәй уның! Етмәһә, быҙауы бар. Ул бит ҡотло, йыуаш тоҡом!

— Мин Бөйрәкәйҙе бөгөн һуябыҙ тимәйем бит! Ҡарарбыҙ... Миңә лә бит дәүләт план бирә. Үтәргә ҡуша.

Мәҙинә боролоп сығып китте. Ялан кәртәгә инеү менән, танаҡайҙары дәррәү баҡырып, елтәңләтә баҫып уны һырып алды.

— И малҡайҙар! Мин дә бит һеҙҙе һағындым! Ай алла! — Һыйырҙарынан ысҡына алмаған Мәҙинә шул китеүҙән эштә ҡалды. Бөйрәкәйҙе генә башта таный алмай торҙо: ябыҡҡан бахыр, йонсоған, һул күҙенә аҡ һалған. Хайуан башын Мәҙинәнең беләгенә һалды, ә күҙҙәренән сөбөрләп йәш аға. Ни булғанын, ниҙәр күргәнен һөйләр ине — теле юҡ малҡайҙың.

Мәҙинә, һауын бөткәс, Ғәлимә эргәһенә килде:

— Хәлең нисек, әхирәт?

— Хәл ни... хәлсә инде! — Битенә тимгел-тимгел ҡыҙыл йүгергән Ғәлимә берсә һәнәккә, берсә көрәккә тотондо. — Беҙ ни... эштән тик йөрөйбөҙ. Черный рабочийға чурт булһынмы? Ана, хисапсы донъяны тигеҙҙәргә йөрөй ине! Һине алға сығарам тип йән талаша ине!

Мәҙинә өндәшмәй генә әхирәтенең ҡыҙыуы баҫылыуын көттө. Унан эргәһенә яҡыныраҡ килде:

— Ғәлимә, мин һине аңлайым... Миндә әле һөтлө таналар байтаҡ. Ал шуларҙың икәү-өсәүен.

— Иң һөтлө таналарыңды... миңә?!.

— Иң һөтлөләре юҡ инде. Үҙең беләһең, зыянлағандар... Былары ла насар түгел.

— Ә үҙең?

— Мин яңы таналар өйрәтеп алырмын.

— Анһат! Тана өйрәтеү еңелме?! Әле үпкәһеҙ ҡала яҙҙың...

— Гел улай булмаҫ әле! Миндә лә бит... тәжрибә туплана!

— Әллә шул... Кеше ни тимәҫ...

— Кешелә ни эшең бар? Мин бит үҙем бирәм!

— Саяфҡа әйтһәң...

— Ул ҡаршы килмәҫ... — Мәҙинә, ихлас йылмайып, Ғәлимәне ҡултыҡлап алды. — Ҡайтайыҡ, әхирәт. Дауыт мине шундай һағынған — муйынымдан ҡыҫып ҡосаҡлаған да ебәрмәй.

— Әллә нимәм юҡ... Шулай ҙа... әйҙә миңә сәйгә! — Мәҙинә ҡолаҡтарына тиклем ҡыҙарған Ғәлимәгә күтәрелеп ҡараны: йәл уға, йәл әхирәте. Ниңә Мәҙинә кешеләргә асыу һаҡлай алмай икән? Белә ул, белә һыйырҙарына кемдең ҡоротҡослоҡ ҡылғанын, әммә... яуызлыҡҡа ҡаршы яуызлыҡ менән көрәшеүҙең файҙаһы юҡ икәнен дә яҡшы төшөнә...

— Сәйҙе икенсе ваҡытҡа ҡалдырайыҡ, әхирәт...

Мәҙинә инде өйөнә боролайым тигәндә, тыҡрыҡтан ҡулына ҙур төйөнсәк тотҡан Рауза яһырып килеп сыҡты.

— И-и... Мәҙинә! Ҡайтҡаныңды ишетеп киләм! Балнисҡа барып хәлеңде белә алманым, шуға килеп ултырам. Туҡта әле, мәйтәм, йылы икмәктең сауабы ҙур, икмәк тотоп инеп сығайым, тием. Һөйҙәр хәбәр

күбәйҙе! Анау ике аңра ҡарсыҡтарыңа һөйҙәп булмай бит инде аларҙы! Һөйҙәмәһәң, эс күмһей.

Мәҙинә, ел ҡапҡаны ҡунағы һыйырлыҡ итеп мул асып, ауыҙын япмай тәтелдәгән Раузаны эскә үткәрҙе.

* * *

Барсынбикә ҡарҙан әрселгән һуҡмаҡ менән өҫкәрәк менде. Үҙенә кәрәк үләнде ул бында йәй күргәйне. Ҡара көҙ килеп еткәс ҡаҙып алырмын тамырын тип, эргәһендә өйкөм-өйкөм үҫкән селеккә ҡыҙыл сепрәк бәйләп, тамғалап киткәйне. Әле бына шул тирәлә йөрөгән дә кеүек, мәгәр билге бәйләгән селек өйөмөн таба алмай. Үлән тамыры Мәҙинәһенә кәрәк. Тағы бер-ике аҙнанан ер йәшәрә, күҙәнәктәр буйлап һут китһә, һуң буласаҡ. Барсынбикә үҙендә мөғжизә һаҡлаған был үләнде йоҡола сағында ҡаҙып алырға тейеш. Һуңынан, уянғас, үҙен борсоған кешегә үлән рәнйейәсәк, рәнйеше төнәтмәһен эскән кешегә күсәсәк...

Арыған Барсынбикә яҙ ҡояшы йылытҡан ҡайраҡташҡа ултырҙы. Эйе, арынҡыраны ул. Мәҙинәгә төбәлгән ҡара көстәрҙе үҙенә саҡырҙы, шул зәһәр ҡеүәтте үҙендә һүндерҙе. Ул талсыҡты, уның ҡарауы Мәҙинәһе, яңынан тыуғандай еңеләйеп, Тирәклеһенә — балаһы янына атлыҡты. Мәгәр Барсынбикәгә әле көс күп кәрәк. Алда Ихсанбай менән осрашыр көн бар. Ай, ауыр буласаҡ Барсынбикәгә! Эҙләй уны Ихсанбай, эҙләй! Һуңлап килгән тәүбәһенә сәсәй-сәсәй, ниндәй ҙә булһа тере йәндең үҙен аңлауға сарсаған күңелен тырнай-тырнай эҙләй. Барсынбикәнең дә йөрәге таш түгел. Ах дәриға! Эй Яҙмыш! Һынауҙарыңды алдарыма өйә генәһең! Барсынбикәнең арырға, туҡтарға хаҡы юҡ. Алда яҡты йондоҙо — өмөтө Мәҙинә яҡтыра. Барсынбикәнең: «Мин — Барсынбикә, һинең өләсәң!» — тип ейәнсәре ҡаршыһына баҫаһы бар. Оло эсә. Тимәк, эсәһенән дә олораҡ эсә! Олоноң бурысы ла, күтәргән йөгө лә оло. Ләкин Ихсанбай ҙа уның балаһы. Ихсанбайҙың ошолай булыуына ул, Барсынбикә лә, ғәйепле. Барыһын да аңлай, барыһын да тоя Барсын. Әммә ул үҙе лә ҡәҙимге бер кеше. Уға кәңәш-ярҙам һорап күптәр килә, ә уның үҙенә кемгә бараһы? Өйөндә генә ултырып аҡыл таба алмағандай булды Барсын. Иртә яҙ булмаһа, был һиллектә, тәбиғәт кенә бирер тыныслыҡта оҙаҡ ҡына ултырыр ине әле ул. Күп һорауҙарына яуап, йәненә тынғы табыр ине. Йәшәйештең үҙе кеүек ҡарый, үҙен бар яһаған Тәғәләләй зирәк был тәбиғәт бәндә зиһенен асыу ҡөҙрәтенә эйә...

Барсынбикә, ҡолағына сыйылдаған тауыш бәрелгәндәй булғас, аяғөҫтө баҫты. Ҡарабаш! Ҡарабаш тауышы ишетеләсе!..

— Ҡарабаш! Мә! — Эт тағы сыйнаны, шыңшыны, ләкин үҙе күренмәне. Йомран күреп эҫендеме, әллә күргән тейененән күҙ яҙлыҡтырҙымы? — Ҡарабаш!

Барсынбикә тауыш килгән яҡҡа ыңғайланы. Ҡыраҙ таштар ҡыуышы янында туҡтап, ҡолаҡ һалды.

— Ҡарабаш! — Эт эргәлә генә шыңшыған кеүек. Эйе, ана үҙе! Ҡыраҙға һырындырып өйөлгән таш бурама эргәһендә ятҡан да шыңшый, башын юғары күтәреп, хәсрәтле ауаздар сығара. — Был нишләүең, Ҡарабаш. — Эт ҡуҙғалманы, өҙөлөргә торған тауыш сығарҙы ла, башын тәпәйҙәренә һалды.

Барсын, бурама өҫтөндәге йәйпәк яҫы ташты шылдырып, эскә күҙ һалды. Йә Хоҙай! Кеше ерләнгән бит бында! Ҡулын күкрәге тирәһенә ҡаушарып, салҡатан ятып, үҙен-үҙе йыйыштырып үлгән ҡатын-ҡыҙ һөлдәһен күргәндәй Барсын.

Гүр эйәһе уның күңеленә шул рәүешле инә...

Бармағына көмөш йөҙөктәр ҙә кейгән ахыры, муйынында күн менән тышланған бетеүе бар. Кешеләргә әйтер һүҙҙәре әйтелеп

бөтмәгән, уларҙы ул үҙе менән ҡәбергә алып китергә теләмәгән. Изге йәндәр, көслө рухтар ғына ошо рәүешле үҙҙәрен-үҙҙәре йыйыштырып киткән донъянан.

Барсын, кәшәнә эргәһенә тубыҡланып, әруах рухына аят сыҡты, унан, изге бәндә рухы яғылған таштарға һыйынып, уңайлап ултырҙы, ойоғандай булды, тынысланды. Уйҙарын ағытып ебәреп, үҙенең тын алышын, йөрәк тибешен һөйәнгән таштарына, тәбиғәткә яраштырҙы. Бер талай ултырғандан һуң, өҙөлгән уйҙары кире ялғанды. Йөрәген һулҡылдатып Ихсанбай иҫенә төштө. Барсынбикәгә ул бына-бына килер төҫлө. Уға ни тиер? Шул саҡ ҡолаҡ төбөндәме, йөрәк түрендәме тауыш ишетелде. Ҡатын-ҡыҙ тауышы:

— Аттың ялы аҡ та, саңы ҡара.

«Дөрөҫ, — тип уйланы Барсынбикә уға яуап итеп. — Ихсанбай яҡшы тоҡомдан, ләкин эшләгән эштәре, ҡылған ҡылыҡтары ҡара». Ошоно уйлап бөтөүгә, Барсынбикә йәнә тертләне.

— Саң таҙарыр ҙа, дан ҡалыр! Яман данды йыуып таҙартып та, ҡасып ҡотолоп та булмай шул...

Барсынбикә һиҫкәнде.

«Гүр эйәһе ахыры, шуны хәбәр итә!» Ошоно уйлап бөтөүгә тауыш йәнә ҡабатланды:

— Һандамаған сатанды сиған алдай!

«Быныһы ла хаҡ! Ихсанбай үҙе тураһында йөрөгән һүҙҙәргә ҡолаҡ һалманы, уларҙы һанға һуҡманы, шыма-кесерәйә белмәне...»

Тауыш йәнә ҡабатланды:

— Данына күрә — һаны...

«Улай тиһең? Их Ихсанбай... — Барсынбикәнең тәне эҫеле-һыуыҡлы булып ҡалтыранды. Күк тә тәпәшәйгәндәй, күн кискә ығышҡандай. — Изге ниәттәремде аңламаның, әйткәнемдә алманың!»

Тауыш көрһөнгәндәй булды:

— Алтындың һаны һирәк кешегә билдәле...

«Дөрөҫ әйтәһең дә бит, әруах, ләкин мин әсә! Миңә нишләргә?!»

— Данды һандамаһаң да дөрөҫ, атыңды һанда!

«Атыңды! Атым бармы ни минең?! Мин инде нисәнсе кеше исеме аҫтында йәшәйем! Исемһеҙ мин, әруах!!!»

Тауыш был юлы ҡәтғи яңғыраны:

— Отолғандың онотолған заты атында сағыла, һатылғандың даны тапандыла табыла.

«Рәхмәт, әруах, — бите буйлап һарҡып кипкән ирендәрен сылатҡан йәштәренең тоҙон тойҙо Барсын. — Рәхмәт кәңәшеңә».

— Атаңдың даны һиңә булмаҫ, сатандың саңы һиңә ҡунмаҫ! — Ошоно әйткәндән һуң әруах тынды, ҡанбабаларҙан килгән рух менән аралашыу, быуаттар төпкөлөнән килгән ауазды тыңлау Барсынбикәне тынысландырҙы. Йәненә һәм тәненә һиллек, ныҡлыҡ алған, бәгерен яндырып барған барса һорауҙарына яуап тапҡан Барсынбикә ҡараңғы төшөүгә өйөнә ҡайтып йығылды. Ҡарабашты саҡырһа ла, эт уға эйәрмәне. Күрәһең, элекке хужаһын, кәшәнә эсендәге Мөғлифә баҡшы һөйәктәрен ташлап китергә көсө етмәне.

* * *

Ваҡиғаларҙың көтөлмәгән боролош алыуы Әҙелғужинаны хафаға һалды. Ихсанбай Моратов ҡасҡан. Ә ҡайҙа һуң ул? Мәҙинәне һағалаһа, йә булмаһа әсәһе менән бәйләнешкә инергә булһа, ул Таулыла булырға тейеш. Ләкин күҙәтселәр Барсынбикә өйөнә сит кешенең килеүен күрмәгән. Ошо хаҡта Шакира Камалетдинов менән дә һөйләште. Яҙғы сәсеүгә әҙерлек ваҡыты булғанлыҡтан һис бушамаған Әйүп Ғәзизович үҙенең дә Ихсанбайҙың ҡасыуы сәбәпле ныҡ борсолоуын, берәй хәл килеп сығыуҙан ҡурҡытып, Мәҙинәне ваҡытынан алда дауахананан сығарыуҙарын һорауын әйтте. Шакира Хисамовна уның кабинетынан сығыр саҡта ғына Камалетдинов:

— Хашимды ҡайтарырға кәрәк. Эштәр былайға киткәс, судтың булыу-булмауы икеле. Һәр хәлдә, һеҙ уны судҡа тиклем сығарып тороуҙы юллай алаһығыҙ. Ҡағыҙ кәрәк булһа, яҙырбыҙ. Мәҙинәгә күҙ-колаҡ булыр ине ул, — тине.

Әҙелғужинаның бит осо ҡапыл алһыуланды, әммә үҙен тотто, ҡаушауын белдермәҫкә тырышып:

— Мин дә шулай уйлайым, — тине лә ишек тотҡаһына тотондо.

— Шакира Хисамовна, — Камалетдинов урынынан тороп Әҙелғужинаға табан атланы. — Мин бына нимә уйлайым: Ихсанбайҙы... баш врач... Лоҡман Талипович йортонан эҙләү хәйерле булмаҫмы?

— Лоҡман Талипович йортонан?! Ләкин Ихсанбай, белеүемсә, уның ҡарындашын, Сәбиләне, бер ҡасан да яратмаған! — Камалетдинов, ҡарашын алыҫҡа төбәп, тәҙрә ҡаршыһына барып баҫты. — Ләкин, Шакира Хисамовна, бисәне яратмау баланан ваз кисеү тигәнде аңлатмай...

— Ә ниндәй... бала?!

— Сәбилә ауылдан ауырлы көйө сығып китә.

— Ләкин... Сәбилә психушкала, Лоҡман Талиповичтың өйөндә... бер генә бала.

Ҡапыл Камалетдинов эҙәрмән ҡатынға бөтә кәүҙәһе менән боролдо.

— Лоҡман Талиповичтың психушкалағы ҡарындашының күкрәгенә... һөт төшкән!

— Һөт?!

— Эйе, иптәш Әҙелғужина!

— Һәм һеҙ... Ихсанбай Моратов... нисә йылдан һуң... донъяла барлығын белмәгән балаһын эҙләп...

— Мин үҙем дә атай кеше. Ҡыҙым бар. Ул тойғо таныш булмаһа, әйтмәҫ инем... Тик... Лоҡман Талиповичтарға ингәндә артыҡ һүҙ ысҡындырыуҙан һаҡ, үтә һаҡ булығыҙ.

— Эйе, эйе... мин аңланым һеҙҙе, Әйүп Ғәзизович.

...Һәм бына Әҙелғужина баш табиптың өйөндә ултыра. Ҡатын, мәрйә булһа ла, ҡунаҡсыл икән.

— Рәхим итегеҙ, бик ваҡытлы килдегеҙ, һөйләмәй йөрөйһөгөҙ, ҡоймаҡ майлайым, әйҙәгеҙ! — тип бар булмышы менән йылмайып сәйгә ҡыҫтаны.

— Мин эш менән генә. — Ул арала эргәләренә егеүле «ат» тотҡан малай килеп баҫты.

— О! Атың ҡайһылай шәп! Ҡайҙа йыйындың, улым?

— Йыраҡҡа!

— Йыраҡҡа?!

Раиса Максимовна көлөмһөрәне:

— Фантазер!

— Бер ҙә фантазер түгел! Һыуһаҡ бабай тик әйтергә ҡушманы!

— Һыуһаҡ бабай?! Ниндәй бабай тураһында һүҙ бара, Раиса Максимовна?

Следователь ҡатындың ниндәй йомош менән килеүе хаҡында ҡыҙыҡһынып та өлгөрмәгән ҡатын, һөйләшергә кеше табылыуға шатланып, тәтелдәй бирҙе:

— Ә!.. Ғәрип бер! Әбүбәкерҙең атаһы кеше йәнле бит ул! Йәлләп индергәйне...

— Ул ғәрип түгел! — Малайҙың зәңгәр күҙҙәре үткер осҡондар сәсрәтте. — Ул һәйбәт! Матур!

— О Господи! Кем һиңә бабайҙы насар ти? Мин бит уны калека тинем!

— Он не калека! — үсегеүҙән ауыҙы турһайған матур малай аш өйөнән сығып уҡ китте.

— Бына бала! Әллә ни ерен яратты бит шул һаҡалтайҙың! — Тулы кәүҙәле, түштәре халат сабыуынан бүҫелә яҙып торған сәләмәт йөҙлө ҡатындың зәңгәр күҙҙәрендә шәүлә хасил булды. Ҡурҡыу шәүләһе. — Нимә ти был окаянный малай? Китәбеҙ тиме?!

— Хафаланмағыҙсы, Раиса Максимовна! Бала ни һөйләмәҫ?

— Һеҙ белмәйһегеҙ! — Ҡатын ҡаушай төштө, сынаяҡҡа тип, яңылыш сәйнүк эсенә һөт һалды. — Господи!

— Ярай, ярай... — Әҙелғужина уны тынысландырырға тырыша, ә үҙенең иғтибарынан был инде йәш булмаған, ләкин яратылыр өсөн

генә тыуғандай Рубенс ҡатындары кеүек хужабикәнең һәр хәрәкәте ситтә ҡалмай. Ҡатындар бит ҡалбырҙап китеүсән, кисерештәре бындай саҡта шаңҡыған балыҡ кеүек өҫкә сыға...

— Ирегеҙҙең һеңлеһе... Сәбилә күренмәй...

— Ә... Һеҙ унық менән...

— Эйе, беҙ унық менән таныштар. Хәлен белеп сығайым тигәйнем...

— Ой, ул бит больницала! Ул бит сирләп китте. — Ҡатын шыбырлауға күсте. — Ирһеҙлектән микән... алышынды бит ул! Ҡурҡыныс булып алышынды! Башкирцевала ята. Хыялый ул хәҙер!

— Алай... Ярай, Лидия Николаевнанан һорармын хәлен...

— Ой! Кеше танымай бит ул! Моғайын, кәрәкмәҫ! Хәҙер уға һин ни, мин ни — барыбер! — Раиса Максимовна, таҫтамал алып, тир бөрсөктәре бәреп сыҡҡан шалҡандай аҡ маңлайын, шундай уҡ муйынын һөрттө, ҡапыл шиңгәндәй, хәлһеҙләнгәндәй күренде. — Был тормошта бер покой юҡ...

— Мин китәйем инде, Раиса Максимовна. — Әҙелғужина көлөмһөрәне. — Малайығыҙ бик оҡшаны миңә. Зирәк, матур, ихлас! Ул яратҡан Һыуһаҡ бабайға миндә ҡыҙыҡһыныу уянды хатта! Кемде ул шулай яҡлай икән? Миңә ҡалһа, Әбүбәкер ул ҡарт өсөн дуэлгә сығырға әҙер!

— Ой, әле ул ҡарт өйҙә юҡ. Кәкере ауыл яғына танышыма барам тигәйне, оҙаҡланы нигәлер.

Быларҙан сығыу менән Әҙелғужина атлы ылауҙы туҡтатты һәм үҙен Кәкере ауылға тиклем ултыртып алып барыуын үтенде.

...Ҡарсыҡтың ҡапҡаһы төбөндә гәзиттәгесә эт абалап ҡаршы алманы. Әҙелғужина өйгә инде — бер кем юҡ. Бары һап-һары итеп ҡырып йыуылған иҙәндән яҙ, ағас еҫе килә, көлдөксәлә йөнтәҫ бесәй йомарланып йоҡлай. Әҙелғужина кире ихатаға сыҡты. Аласыҡ! Ана бит унық ишеге шар асыҡ тора. Эстә ике кешенең берсә ҡыҙып, берсә көрһөнөп, кисерешкә бирелеп һөйләшкәне ишетелә. Ҡатын-ҡыҙ тауышын Әҙелғужина шундуҡ таныны:

— Башҡа ерҙә күрһәм, биллаһи, танымаҫ инем!

Икенсе тауыш ғыжылдап, тәрәндән өҙөлөп-йолҡоноп сыҡҡандай:

— Ул янғындан, күреүемсә, һин дә еңел ҡотолмағанһың... Былай булып ҡалырыңды белһәң...

— Өйҙө мин үртәмәнем.

— Ә кем? Кем үртәне улай булғас?

— Кемгә кәрәк — шул.

— Лоҡман тимәксеһеңме?

— Һорау алма минән, Ихсанбай. Мин һиңә барыбер әйтә алған тиклемен генә әйтәсәкмен!

— Ярай, Лоҡман да булһын! Ул, ул... Сәбиләне психушкаға тыҡҡан, минең баламдан... үҙенә ул һағаған! Нигә өндәшмәйһең, әсәй?! Әбүбәкер һинеке түгел, тимәксеһеңме? Өндәшмәйһең...

— Һин дә «балам» тигән һүҙҙе теләңә ала башлағанһың түгелме?

— Көлөүеңме был, әсәй? «Балам» тиергә... минең балам булғаны булдымы?!

— Ә... игеҙәктәр?! Гөлбаныу игеҙәктәре?!

— Улар ништәп минеке булһын?!

— Мутлашаһың һаман, Ихсанбай... Шуны бел: бала ата ҡеүәтенән ярала. Үҙ балаһын кеше... меңдәр араһынан таный!

— Һин һаман һаташаһың! Һаман әллә нимдәй...

— Ярай, мин оло кеше. Яңылышыуым да бар. Миңә ни килтерҙе һине?

— Кеше әсәһенә килмәйме?

— Беҙҙең мөнәсәбәттәр... күптән инде әсә менән ул мөнәсәбәте түгел.

— Ул һиңә генә шулай! Һин мине күрә алмайһың!

— Бәлки... Ләкин мәмерйәлә сағыңда кем төнәтмәләре менән һауыҡтың? Кем һине, яна-яна, үрт һалынған өйҙән һөйрәп сығарҙы?! Кем?!

— Әсәй... миңә һинән ярҙам бөгөн кәрәк...

— Ниндәй ярҙам?

— Әбүбәкерҙе... миңә... Мин унһыҙ йәшәй алмайым! — Һыңҡылдап, ғыжлап торған үпкәһен көсәндереп, буҫығып илаған тауыш ишетелде. — Ул шундай... матур, әсәй!!!

— Ә ниңә һин... Ишмөхәмәттең йәнен ҡыйҙың? Ни зыяны тейҙе һиңә ул кешенең?

— Миңә Тирәклегә... ҡайтыр кәрәк ине...

— Аһ! Тирәклегә! Мәҙинә ҡашына! Теге саҡ мин нимә тинем?! Кемлеген әйттемме, әйтмәнемме Мәҙинәнең?! — Ҡарсыҡ тауышындағы ҡырыҫ ноталар Әҙелғужинаның арҡа мейеһен семерҙәтте, башын зиңкетте.

— Ышанманым... Әле лә ышанмайым!

— Мына!

— Беләҙек... Фирүзә ҡашлы алтын беләҙек?! Әллә... Гөлбаныуҙың һөйәктәрен... — Ихсанбайҙың тауышы дерелдәне, өҙөлгәндәй булды.

— Иң ҡыҙығы... ике беләҙеккә лә — тегеһенә лә, быныһына ла боронғо хәрефтәр менән бер исем яҙылған: Күкһыу! Өләсәм исеме...

— Ҡайҙан алдың быны!

— Таптым. Өрлөккә ҡыҫтырылған булған. Был йортта йәшәгән изге бәндә Мөғлифә ҡалмыҡтарға әсир төшкән өләсәндең ейәнсәре булып сыға... Беләҙектең береһе — Мәҙинәлә. Гөлбаныу һинең игеҙ һыңарың булмаһа, был бәләләр булыр инеме? Мин һеҙҙең никахлашыуға ҡаршы килер инемме? Ниндәй әсә үҙ балаһына бәхет теләмәй? Гөлбаныуҙың... Күкһылыуымдың... килмәгән бер ере бар инеме?!

— Әбүбәкер... уға оҡшаған...

— Беләм. Күрҙем мин ул баланы! Күкһылыуым, ҡолонсағым, терелеп ҡайтты тип торам!.. Ә Мәҙинәм ул — мин. Минең йәш сағым.

— Ах, әсәй!.. — Өйҙә танау тартҡан, һулҡылдап илашҡан тауыштар сыҡты.

— Нигә былай... нигә былай килеп сыҡты һуң беҙҙең тормош, әсәй?!

— Дөрөҫ йәшәмәгәнгә... Яуызлыҡҡа ҡаршы көс ҡулланыу ҙурыраҡ яуызлыҡ тыуҙыра! Бәндәләрҙең аңын бутай... хәтерҙәрен ала... ҡанбабалар һабағын боҙа!.. Улды атаға, атаны улға ҡаршы һөслätә!

— Ләкин мин... игеҙәктәрҙе үлтермәнем! Улар өсөн мин... яуап бирмәйем!

— Ләкин улар һинең баҡсаңда ята!

— Һин...

— Мин... түтәл эргәһендә һыңар сандали, йәнә бер... фуражка таптым...

— Һин... беләһең?! Ғәфү ит мине, әсәй! Уларҙы... Күкбүре... көсөктәрен ҡыҙғанып...

— Ах Ихсанбай! Малайҙарҙы Күкбүре меҫкенгә япһаң да... Ҡулдарың Ишмөхәмәт, Зарифа ҡандарына... әсәһеҙ ҡалған Мәҙинә рәнйешенә, диуана Шәңгәрәй ҡарғышына, аҡһыҙ ҡалған һеңлең бәддоғаһына буялған! Ошоларҙы күтәреп, нисек йәшәрһең, Ихсанбай?! Улың, Әбүбәкерең, ҡыҙың Сәмәрә күҙенә... нисек ҡарарһың?!

— Сәмәрә?! Уныһы кем?

— Аҙғынлығындан яралған әсе бер емеш. Ғәлимәнең ҡыҙы.

— Ул... нишләп минеке булһын?!

— Ул бала ла һинеке. Әбүбәкер, ярай, бала көсәүҙән донъяға тыуҙы, Хоҙайҙан һорап алған сабый, ә Сәмәрә меҫкен — артыҡ йән, уның бер кемгә кәрәге юҡ.

— Нишләргә миңә... әсәй?! Үҙемде үҙем милицияға тапшырайыммы? Хөкөм һорайыммы?!

— Уныһын мин белмәйем.

— Әбүбәкерҙе алам да... тауҙарға ҡасам!

— Юҡ! Ҡасаҡ булыу ҡыҙыҡ булһа, мәмерйәндә йәшәр инең һаман! Тағы шуныһы үкенесле: бер ғәйепһеҙгә Хашим кейәүең интегә төрмәлә. Барып һөйлә! Ғәйебе юҡ икәнен иҫбат ит! Исмаһам, үҙ ғүмереңдә бер егетлек эшләрһең!

Әҙелғужина сигенде, ипләп кенә соландан сыҡты, эшенә, тотҡонлоҡта интеккән Хашим янына атлыҡты.

* * *

Әҙелғужина сығып киткәндән һуң Раиса Максимовна үҙен ҡайҙа ҡуйырға белмәне. Башта уҡ уны күргәс тә ҡалбырҙап киткәнен иҫенә төшөрҙө. Ахыры Шакираны күреү менән ниҙер һиҙенгән ул, тик был тойғоноң ҡайҙан һәм ни өсөн килгәнен генә тойомлай алмаған.

Следователь Шакира Хисам ҡыҙы Әҙелғужина Сәбилә менән ҡыҙыҡһына. Бында ниндәйҙер ғилләә бар кеүек. Ә Әбүбәкерсе? Күҙен дә йоммай, китәм тип тора! Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай тимә инде шунан. Раиса ла, Лоҡман да уға йәнен фиҙа ҡылырға әҙерҙәр, ә ул...

Раиса Максимовна йәшкәҙәгән күҙҙәрен ишектән алманы. Исмаһам, Үҙе ҡайтып инһә! Былай ҙа китәйек тип иренең теңкәһенә тейеп бөттө. Алтындары, аҡсалары төйнәлгән, мал-тыуары эш ителгән. Ҡиммәтле тиреләрен дә еләтеп һандыҡҡа тултырҙы. Алтай яғында уның туғандары. Шунда китһәләр, кәбәнгә төшкән энәләй юғаласаҡтар. Бының ише генә өй тапмам ти микән Лоҡман? Был башҡорт тигән халыҡтың иленә йәбешеп ятыуын һис аңламай Раиса. Кеше ҡайҙа яҡшы, шунда йәшәргә тейеш. Ҡайҙа бәхетлеһең — шунда һинең тыуған илең. Әгәр ҙә Раисаны Лоҡманға сикһеҙ ғишыҡ бәйләмәгән булһа, белер ине ул ҡайҙа һәм нисек китергә! Юҡ шул, Лоҡманһыҙ йәшәүҙе ул күҙ алдына ла килтермәй! Ул әлегә тиклем Лоҡман ҡосағында һары майҙай ирей, ебәктәй ишелә.

Ишек асылған тауыш уны һиҫкәндереп, урынынан торорға мәжбүр итте:

— Лоҡман!

Ире ҡурҡынған, йөҙө көлһыу төҫкә ингән ҡатынына шелтәле ҡарашын ташланы:

— Нимә йәш кәләштәй үрәпсейһең, Рәшиҙә?

— Лоҡман! Беҙгә китергә кәрәк! О! Ниҙәр генә булманы! Следователь... теге сатан Шакира килде! Сәбиләне һорашты. Ә Әбүбәкерең... — Раиса бала кеүек һыңҡылдап илап иренең күкрәгенә һыйынды. — Китәм, ти. Һыуһаҡ бабай менән йыраҡҡа китәбеҙ, ти! Әлегә Һыуһаҡ бабай әйтергә ҡушманы, ти!

— Һыуһаҡ бабай... Был етди хәл, Рәшиҙә. Мин дә Ихсанбай хаҡында күп хәбәрҙәр ишетеп килеп ултырам. Йыйынайыҡ. Һиҙенә инем. Бала күңеле һиҙгер. Эйе, эйе! Һин хаҡлы! Документтар әҙер. Аттарҙы ашатам, ә Һыуһаҡ килһә, һиҙҙермә, матур һөйләш, бала сирләп тора, тигән булып, янына индермә!

* * *

Лидия Николаевна Башкирцева асыҡ тәҙрәнән тышты күҙәтте: ағастарҙа бөрөләр тиртә, ҡоштар күңелле сырҡылдай, әллә ҡайҙан, йыраҡтан, тау йылғаһының шашҡан ярһыу менән түбән атылғаны ишетелә. Тәбиғәт уяна... Йыл миҙгелдәренең ниндәйе лә матур. Ләкин көҙ һағышлы, ҡыш олпат, моңһоу, йәй тыныс, ә бына яҙ!.. Ул ярһыу, сая, дәртле. Үҙеңдә бығаса булмаған көс уяныуын тойоу ҡыуандыра ла, ҡурҡыта ла... Эйе, Лидия был ҡырағай матурлыҡ төйәген бөтә күңеле менән яратып өлгөрҙө. Әммә уны үҙе уҡыған институтҡа саҡыралар, ғилми эшен оҡшатҡандар. Унан һуң, фатирында тороп ҡалған ҡатын да, олоғайҙым, ҡайт, тип яҙа. Ҡояшҡа, сихри матурлыҡҡа мул төйәкһеҙ нисек йәшәр Лидия? Ә йырҙары? Лидия күңеленән «Зөлхизә»не һуҙҙы. Эсенән генә ул шул йырҙы гел көйләй. Һүҙҙәрен әйтә алмай, ә күңеле был йырҙың әллә ниндәй нескәлектәрен, сихри бөгөлдәрен сағылдыра.

— Егерменсе бүлмәләге сирле...

— Ишектән ингән санитарҙы Ли-

дия Николаевна ярты һүҙҙән бүлдерҙе.

— Нимә, нимә булған?

— Булмаған, ишекте ярып килә!

— Хәҙер!

Лидия Николаевна ишекте асырға ҡушты, үҙе алғараҡ сыҡты:

— Ни булды, Сәбилә?!

— Минең... балам юҡ! Баламды урлағандар! Ишетәһегеҙме?!

— Туҡта, Сәбилә, яйлап һөйлә, мин бер ни ҙә аңламайым!

Сәбилә аҡайған, шашҡан күҙҙәрен бер карауатҡа, бер иҙәнгә ҡаҙай, асырғана, ситлектәге инә арыҫландай сапсына, тирткән имсәктәренән туҡтауһыҙ һөт саптыра.

— Юҡ! Урланылар! Йыуындырайым тип, сисендерә генә башлағайным — юғалды! Юҡ! Әбүбәкерем юҡ! Өләсәһе, ҡәйнәм ни тиер! Табығыҙ, табығыҙ баламды!

Ул арала санитар Сәбиләнең ҡулын артҡа шаҡарҙы, икенсеһе килеп укол ҡаҙаны. Сәбилә, хәлһеҙләнеп, карауатына ауҙы:

— Мин... табасаҡмын уны! Алыҫ китә алмаҫтар! Минән ысҡына алмаҫта-а-а-р...

Сәбилә йоҡлап китте. Лидия Николаевна ауырыу эргәһендәге ултырғысҡа ултырҙы. Карауатта тыҙып ятҡан «бала»ға ҡараны.

— Уйын тамам, Лидия Николаевна. Һине нишләтергә, Сәбилә?!

* * *

Әҙелғужина Хашим эргәһенә инергә уйланы ла, туҡтап ҡалды. Юҡ! Ихсанбайҙы үҙенең кабинетында көтөр кәрәк. Күрәҙәсе ҡарсыҡ уны барыбер Шакираға ебәрер.

Ҡул сәғәтенең тек-тек йөрөүен тыңлап, Шакира тынып ҡалды. Ҡыҙыҡ. Ул көтмәгәндә үҙен эҙәрмән булырға этәргән, зиһенен биләп, яҙмышына әйләнгән ғүмерҙәрҙең тормош юлдары киҫешкән нөктәнең уртаһында ҡалды. Нисек бутаған уларҙы тормош! Йәшәү өсөн көрәшә торғас, ҡарайып та, ғәрипләнеп тә бөткәндәр. Ә барыбер көслө тоҡом! Барсынбикә үҙе генә ни тора! Ул әле лә инә арыҫлан кеүек. Ул барында Мәҙинәгә, моғайын, бер ниндәй ҡурҡыныс янамаҫ. Ә Ихсанбай... Хәйер, ана ул үҙе инеп килә, үпкәһе туҙған гармун күрегеләй ғыжылдай.

— Инергә... мөмкинме?

— Мөмкин.

— Һеҙ... Әҙелғужинамы?

— Мин — Әҙелғужина.

— Хашимдың эшен, тимәк, һеҙ алып бараһығыҙ.

— Мин.

Ихсанбай көс-хәл менән ултырғысҡа ығышты. Күҙен Шакираға секерәйтте:

— Мин, иптәш Әҙелғужина, Хашимдың ғәйепһеҙ икәнен әйтергә килдем. Малайҙарҙы... ул үлтермәне. Уларҙы... минең кәнтәй тамаҡтаны.

— Ә һеҙ...

— Мин Ихсанбай. Ихсанбай Моратов.

— Тимәк, һеҙ... тере? Тимәк... — Әҙелғужина унын алдына военкоматҡа Ишмөхәмәт булып яҙған аңлатманы, Хашим өҫтөнән яҙылған шикәйәтте, ФЗО-ға китеүселәр исемлеген, фермалағы һауынсыларҙың һауған һөтө күрһәткесен килтереп һалды, — быларҙың барыһы ла һеҙҙең ҡул менән яҙылған?

— Минең ҡул менән.

— Ә хәҙер тағы бер аңлатма яҙығыҙ. Уларҙың барыһын да һеҙҙең ҡул менән яҙылыу хаҡында һәм Хашимдың ғәйепһеҙлеген раҫлау тураһында...

Ваҡыт яй аҡты. Әҙелғужина һаҡ саҡырманы, тырышып-тырышып аҡ ҡағыҙға ҡара эштәрен яҙған Ихсанбайға һүҙ ҡушманы. Үҙе килгән. Әҙелғужина — эҙәрмән. Ҡалғаны — органдар эше. Тәүбәгә килеп, ярлыҡау һорап аяҡ аҫтына йығылған бәндәне нисек бикләп ҡуяһың? Ихсанбайҙың эленгә әҙәм ҡотон осормалы ҡиәфәте Хоҙай тарафынан ебәрелгән яза түгелме? Ә бит Әбүбәкер, моғайын, атаһына оҡшаған. Мәгәр был әҙәмгә ҡарап, унын ҡасандыр фәрештә сүрәтендә

булыуын төсмөрләү мөмкин дә түгел... Әҙелғужина бөгөн Хашимдың «Дело»һын яба. Уның ғәйебе юҡ. Шакира уны, моғайын, Кәкере ауылды үткәнсә оҙата барыр. Тормошона мәғәнә, йөрәгенә дәрт, дарман биргән был суфый ҡиәфәтле кеше менән хушлашыу, моғайын, уға еңел булмаç. Тик нишләйһең? Ҡатын-ҡыҙҙың яҙмышы — һайлаусы ҡулында. Ә ғорурлығы — үҙенән ҙурыраҡ һәм... үҙенән алдараҡ тыуған.

— Яҙҙым. Ә хәҙер... миңә нишләргә?

— Һеҙгәме? Белмәйем. Мин бары Хашимдың «Дело»һын яптым. Уның ғәйепһеҙлеген иçбатланым. Хушығыҙ.

— Хушығыҙ... — Аптыраған Ихсанбай түрҙән тупһаға ығышты.

* * *

Башкирцева ҡапыл үҙен контузия алғандағы кеүек тынлыҡта хис итте. Баш шаулаймы, әллә тау йылғаһы шундай тауыш сығарамы? Тәҙрәгә ҡараны — унда өйөрөлөп, күк менән ерҙе тоташтырып, ҡар яуа. Ғәжәп. Әле генә ҡояш көлә, турғайҙар сырҡылдаша, ағас ботаҡтарында бөрөләр йылыға ирәйеп емелдәшә ине. Яҙғы көн — ярты аҡыл, тигәндәре шулдыр. Һыу ташыусы ҡарт: «Яҙ етте тип артыҡ ауыҙ йырмай тороғоҙ, сыбыртҡыһын бешә һелтәп «биш ҡунаҡ» килер әле, шунан һуң ғына көн рәтләнер», — ти ине. Ҡарт әйткән «биш ҡунаҡ» ошомо икән? Шулай ҙа шомло. Тын ҡыçыла, күңел тыныс түгел. Лидия Николаевна коридор буйлап атланы. Бәй... егерменсе булмә... асыҡ торасы?! Ишектән башын тыҡты: койка буш, бары туҙҙырылған «бала» ғына иҙәндә аунай...

Башкирцева санитарканы тапты.

— Моратова ҡайҙа?

— Бүлмәһендә, — иҙән йыуып йөрөгән ҡатын палатаға ашыҡты. — Әле генә ошонда инесе... Йоҡлай ине ул, мин һыу алыштырырға ғына... Аһ-аһ! Атаҡ, ул...

Бөтәһе лә йүгерешә, эҙләй башланылар. Башкирцева Лоҡман Талиповичтың өйөнә шылтыратты — трубканы алыусы булманы. Дауаханала ла юғалтҡандар баш врачты. Лидия Николаевна аптыраны, ҡапыл уның башына юлға сығыу уйы килде. Сәбилә бит әйтте... Юл тураһында низер һөйләнде... Ул шунда уҡ «Тиҙ ярҙам» машинаһын саҡырҙы.

Машина менән байтаҡ ер барып, бер кемде лә осратмағас, Лидия Николаевна шоферға кире боролорға ҡушты. Дауахана машинаһын былай ҙа рөхсәтһеҙ алды, эҙләрҙәр, кемгәлер кәрәге тейер. Күпергә етер алдынан шофер ҡапыл тормозға басты. Лидия Николаевнаның күҙенә күпер аçтынан ҡапыл ырғып килеп сыҡҡан, сәсе-башы туҙған, имсәктәре апсайған ҡатын салынды. Ҡатын, болоттай ҡабарып, үҙенә ҡаршы килгән пар ат ҡаршыһына сыҡты, аттар үрәпсене, икеһе ике яҡҡа тартылды, арбалағылар, Лидия Николаевна ни ҙә булһа уйлағансы, бейек күперҙән аҡ күбеккә сәсәй-сәсәй һарыҡташтар өçтөнән ҡайнай-тулай ташҡан йылғаға түңкәрелде.

— Балам! — Әсе тауыш ҡолаҡты ярҙы, тауыш эйәһе үҙе күҙ асып йомған арала тилереп, үкереп ташҡан дарьяға атылды.

— Ярҙамға! — Лидия Николаевна машинанан сығып аçҡа ҡараны. Ат та, кешеләр ҙә, тәкмәсләй-тәкмәсләй, аҡыра-баҡыра түбән аға, ә бала яр ситендә үçкән муйылға эләккән. Тулҡындар уның тирәһендә бына етәм, бына йотам тигән кеүек үрәпсей, бала меçкен ағастан ысҡынырға, үрмәләргә тырыша. Ах! Тағы бер һаҡһыҙ хәрәкәт һәм... ул ташҡын тәжжәленән йотоласаҡ! Уйланырға ваҡыт юҡ. Лидия Николаевна ярһыу тәүәккәллек менән текә ярҙан аçҡа шыуып төшә башланы.

* * *

Хашим, Шакира Хисамовна Әҙелғужина менән хушлашҡас, аҙымын ҡыҙыулатты.

— Бәлки, бөгөнгә юлға сыҡмаçһың, буранлап китте бит, — тине Шакира уңайһыҙланыуын нисек тә йәшерергә тырышып.

— Рәхмәт, Шакира Хисамовна, был бәләләрҙән имен-аман ҡотолһам, ғаиләм эргәһенән бер ҡарыш ситкә китмәм тигән һүҙем бар.

— Ҡыҙыңды... бик яратаһың, ахыры... — Ҡар өйөрмәһе Шакира Хисамовнаның йөҙөн шаршау булып ҡаплай, ләкин Хашим һиҙә: ул керпектәрен түбән төшөргән.

— Килеп сыҡ беҙгә, Шакира Хисамовна. Һөйләүегеҙ буйынса, зат та булып сыҡтығыҙ. Шәһәрбаныу ҡәйнәм тураһында ауыл халҡында бик күп матур хәтирәләр һаҡлана.

— Кешеләр хәтерендә яҡты иçтәлек ҡалдырыу һәр кемдең хәленән килмәйҙер...

— Беҙҙең ғаилә өсөн һеҙ — икенсе Шәһәрбаныу, Шакира Хисамовна!

— Рәхмәт инде, бигерәк ҙурлайһығыҙ!

— Көтәбеҙ һеҙҙе, Шакира Хисамовна!

— Хәйерле юл... Хашим!

Шулай хушлашты улар. Арттан берәй ылау килһә, моғайын, ултыртып алыр. Әллә инде алда... Бәй, күпер өçтөндә «Тиҙ ярҙам» машинаһы тора. Ул арала берәү килеп унының еңенән тартты:

— Ярҙам! Ағай, ярҙам ит! Лидия Николаевна, уф, бата! Үлә бит был мәрйә!

Хашим аçҡа ҡараны. Бер ҡулына бала тотҡан, икенсе ҡулы менән ботаҡҡа йәбешкән ҡатын ярты биленән һыуға сумған, ҡулы ысҡынһа, йә ботаҡ һынһа...

— Арҡан, йә... трос бармы?

— Бар, ағай!

Хашим йәһәт кенә фуфайкаһын сисеп ырғытты, арҡанды биленән уратып бәйләп, икенсе осон шоферға тотторҙо:

— Ныҡ тот! Ҡалбырҙама! — Хашим күҙ асып йомғансы бау буйлап ташҡын сайыуҙан таштары ғына ыржайып торған ярға атлыҡты...

* * *

Бөршәйеп, кесерәйеп ҡалған Ихсанбай Таулы урамы буйлап атланы. Ҡар ҡатыш ямғыр тағы ла көсәйгәндәй, еле лә аяҡтан йыға, һыуығы үҙәккә үтә.

Япа-яңғыҙ икән ул был донъяла. Улай тиһәң, улы бар. Үлеп күргеһе килә Ихсанбайҙың фәрештә сүрәтле шул баланы! Бер генә ҡарарға, тағы бер генә күрергә! Магазинға инеп бер ярты, тоҙло балыҡ алды. Шул яртыны балыҡ ҡойроғона ҡушып һурып ултырғанында ниндәйҙер урыç кешеһе килде эргәһенә.

— Ты хор-роший мужик! — тине теге, Ихсанбайҙың яурынынан ҡағып. — Дай бог тебе... — ирекәй тотлоҡто, ахыры, Ихсанбайҙың ҡиәфәтенә ҡарағас, ниндәй ҙә булһа теләк теләргә йөрәге етмәне. Ихсанбай эсеп бөтмәгән шешәне, ҡалған балыҡты уға тотторҙо ла ары туйтаңланы, аяҡтары үҙҙәренән-үҙҙәре фәрештә сүрәтле малай йәшәгән йортҡа алып китте. Әрләһендәр! Туҡмаһындар! Типкеләһендәр! Милиция саҡырһындар! Ихсанбайҙың улын күрмәй хәле юҡ. Бер ҡарар ҙа... унан... Унан ни булһа ла булыр. Ғәлимәләге ҡыҙын да күрергә тейеш әле ул. Әсәһе, Барсынбикә, тоҡом-үрсемен һаҡлайым тип, ниндәй генә хәлдәргә төшмәне! Күкбүренең теге арланысы?! Ҡашҡар! Ул үрсемен Ихсанбайҙың күҙе алдында, танауы аçтында ихатанан эйәртеп алып сығып китте! Юу-у-ҡ, Ихсанбай, нимә тиһәләр ҙә, кеше әле! Кеше булыуҙан туҡтамаған ул! Йөрәге тибә, башы эшләй. Тик, гәжәп, Лоҡман өйөндә ут юҡ, ишектәр шар асыҡ. Өй һыуыған, толҡа ҡалмаған, бала тауышы ла сыҡмай, ҡайнағаһының һимеҙ мәрйәһенән дә елдәр иçкән...

— Әбүбәкер! Улым!

Тауыш юҡ. Сәғәт кенә текелдәй. Сәғәтме, әллә Ихсанбайҙың сикә тамырымы? Юҡтар! Киткәндәр! Ҡапыл Ихсанбайҙың зиһенен бер уй телеп үтте: «Аттар!» Ул ҡураға атлыҡты: аттар ҙа, арба ла юҡ. Көрт-

тән әрселгән ергә ҡабат ҡар юрған һырыған, эҙ ҙә, өн дә юҡ. Тып-тыныс. Ихсанбайҙың арҡа буйын семерҙәтеп, башына эҫе бәрҙереп бер уй, ҡурҡыныс уй йүгерҙе: «Ҡасҡандар!»

* * *

Күбәләкләп яуған ҡарға башта борсаҡтай боҙ, аҙаҡ сәнскеле ямғыр бөртөктәре ҡушылды. Ҡаршы ел аяҡтан йыға. Ихсанбай һырмаһының еүешләнеп ауырайыуын тойҙо, елкәһенән һарҡҡан ҡарлы-боҙло һыу арҡаһы буйлап аға. Аяғына кейгән итек ҡуңыстары ла лыҡа һыу. Көсөм барҙа атлап ҡалайым тип, ул һаман алға ынтылды. Ләкин... араҡы еле бөттө. Баш геүләй, тамаҡ кибә. Ул, тәмәке көйрәтергә була, ҡулын кеҫәһенә тыҡты. Һыу! Бында ла һыу! Шырпы ла, тәмәке лә лысҡылдап ята. Йә Хоҙай! Өнмө был, төшмө? Май, хатта июнь баштарында ырашҡыла өшәнеп үлгән кешеләр бар. Шулай уҡ Ихсанбайға шулар яҙмышы яҙҙымы икән? Ҡырҡ өсөнсө йыл, Тирәкленән йыуаға тип сығып китеп, эсә менән ун йәшлек малай үлде. Уларҙың өйөлгән сытыр эргәһендә ҡулдарын «утҡа» йылытып ултырған кеүек ҡатҡан кәүҙәләренә Ихсанбай бит үҙе барып сыҡты! Юҡ! Ихсанбайға үлергә иртә әле. Әбүбәкерен табасаҡ ул! Сәмәрәһен күрәсәк! Әсәһе «уйнаш емеше» ти ҙә бит... Баланың ни гәйебе? Ихсанбай шул тиклем ниндәй гонаһ ҡылды? Бына шулай яҙ еткәс өшөп үләрлек нимә эшләне әле?! Зарифа үҙ башына үҙе етте... Малайҙарҙы... Эх! Күкбүре... ул...

Күкбүре... Ул да юҡ. Кешенән ҡасҡан булды, бүреләрҙе лә үҙһенмәне. Ә, бәлки, бүреләр уны үҙһенмәгәндер? Шулай булмаһа, тоҡомдашы менән боғаҙға боғаҙ килер инеме? Ах, Күкбүре... Кемдең башына һине ырыуҙаштарыңдан айырыу уйы килгәндер?

Ихсанбай хәҙер үҙенең күпме барғанын да белмәй, ә бына юлдан яҙғанын ғына яҡшы төшөнә. Ул инде атламай, һәрмәнә, ниҙер эҙләй. Кәбән төбө булһа икән! Ләкин ул күренмәй. Ут! Ут кәрәк уға! Һыуыҡ елегенә, үҙәгенә үтте. Ана ағас... Сатыры шундай ҙур... Төбө ышыҡ кеүек. Ҡоро-һары ла етерлек. Ихсанбай, талған, туңған аяҡтарын көскә шылдырып, тәнтерәкләп, шуларҙы бер урынға өйә башланы.

— Һинме был, Ихсанбай?

Ихсанбай турая бирҙе. Һағайҙы. Ҡайҙан килә был тауыш? Күкһылыумы өндәшә! Әллә Әбүбәкерме?

— Һин бында... нишләйһең?

— Ут ягам! — Ихсанбай эргәһендә тере йән булыуға ҡыуанды.

— Утты улай яҡмайҙар!

— Ишмәмәт?! Һин...

— Утты дөрөҫ яҡмайһың!

— Ләкин ул яна! Яна! Күрмәйһеңме, яна! Уф! Миңә эҫе, миңә бик эҫе булып китте, Ишмәмәт!

Ихсанбай өҫтөндәге кейемдәрен алып ата башланы. Ух! Бешерә! Эҫе! Усаҡ шул тиклем ҡыҙыу яна, түҙер әмәл юҡ. Тороп ситкә китер ине — аяҡтары тыңламай. Ә ел көсәйә. Ҡысҡыра, тулай, үкһей! Усаҡтар күбәйҙе! Улар берәү, икәү, өсәү... күп! Бик күп усаҡ! Көслө ел сыҡты. Өҫтән, ағас башынан, ниҙер шаурап ҡойолдо. Ихсанбайҙың алдына баш һөйәге, тағы аяҡтар, ҡулдар тупылдап ҡойолдо. Ул! Ишмәмәт! Әле генә ошонда ултыра ине. Ул, ул шаяра! Ихсанбай баш һөйәген утҡа ташланы. Янһын! Ихсанбайҙың ҡылған енәйәттәре янып бөтһөн, көлдәре күкә осһон! Ул балаһы ҡаршыһына таҙарынып, аҡтан-аҡ, пактан-пак булып барып баҫыр! Усаҡ бешерә, эҫеһе йөрәккә үтә, уның үҙен дә ялҡын ялманы, ул ут эсендә ҡалды! Ана, уның эргәһенә Әҙелғужина килә.

— Мине ҡулға алығыҙ, Әҙелғужина! Гонаһтарым янып бөттө! Мин таҙарҙым, ағарҙым, Шакира Хисамовна! Әбүбәкергә ап-аҡ атай кәрәк, Әҙелғужина!

— Миңә һеҙ кәрәк түгел. Хушығыҙ. — Әҙелғужина ҡараңғыға китеп юғалды, ялҡын эсенән сыҡҡандай, эсәһе пәйҙә булды.

— Әсәй!.. Ал мине бынан, әсәй! Теге саҡ ут эсенән алып сыҡтың бит, әсәй!

— Мин Күкһылыуымды эҙләп китеп барам... — Әсәһе туҡтаманы, артына боролманы.

Уф! Гөлбаныу! Ана, ул унының эргәһенә килеп ултырҙы. Көлдәксән. Бәй, игеҙәктәре лә иҫән икән. Имеҙеп ултыра бит шуларҙы Гөлбаныу. Ҡайһылай килешә уға бала имеҙеү! Үҙе ҡайһылай бәхетле!

— Ғәфү ит мине, Гөлбаныу... Һин шундай яҡтыһың!

— Һөйөү — бәхет. Мин бәхеттән яҡтырам, Ихсанбай!

— Иртәгә кәнфитте мәктәпкә өсәүҙе килтерермен. Бәпестәреңә лә ашатырһың...

— Һуғыш йылында тыуғандар кәнфит ашай белмәй, Ихсанбай!

Ихсанбай ҡулдарын Гөлбаныуға һуҙҙы:

— Ҡана әле, берәүһен миңә бир әле!

Тауышын ул үҙе лә ишетмәне. Өйөрөлөп яуған боҙлауыҡ яңынан ябалаҡ ҡарға әйләнде, күк менән ер тоташты, алға табан һуҙылған ҡулдарға ятҡан ҡар күптән инде иремәй, усаҡҡа тип өйөлгән сыбыҡтар өҫтөнә ҡарағастан дауылға һелкенеп килеп төшкән Ишмөхәмәттең баш һөйәгендә ҡапланы ҡар. Тирәяҡта ел, бүре олоуына, ағас баштары шаулауына ҡушылған, барыһы бергә буталған ҡуйы ҡараңғылыҡ төштө...

* * *

Аҡмаңлай, өйөрөн эйәртеп, биләмәләрен ҡыҙырырға сыҡты. Ырашҡы әҙәм өсөн генә бәлә. Бигерәк тә уларҙың юлда йөрөгәндәренә ҡыйын. Бүре нәҫеленә иһә ырашҡы — байрам. Күк менән Ер бергә тоташып олоған, үрәпсеп апсайған сағында өңөндә ни йөрәгең менән түҙеп ятмаҡ кәрәк? Аҡмаңлай атаһы Уҙаманға оҡшаған: көслө, ғәйрәтле, ғорур. Ул әҙәм төлөгөндә тыуҙы, әммә урманда, үҙ иштәре араһында үҫте. Ҡылыҡтарҙы ла уларҙан алды. Хәҙер ул — өйөр башлығы. Ошо тирәләге биләмәләрҙең хужаһы. Бөгөн ырашҡы, бөгөн байрам. Бындай көндәрҙә мылтыҡ тауыштары яңғырамай, ағас, йә таш артына ышыҡланып, һиңә бер кем көбәк тоҫҡамай. Аҡмаңлайға әллә күпме йәш-елкенсәк эйәргән. Тамаҡтары туҡ: ҡарт бер мышыны йығып ботарланылар. Юлдарында унан башҡа ла ваҡ-төйәк осраны, ҡыҙыл ауыҙҙарына инде. Уйнаҡлап килә бүре өйөрө, тәбиғәт менән бергә ҡотороп, тулап-аунаҡсып килә.

Ана, алда бер ҡараҫҡы күренә. Кеше. Сыбыҡ өйөмөнә ҡул һуҙған. Насар еҫ килә үҙенән. Тәбиғәттә бындай еҫ юҡ. Ул еҫ бары кешенән генә сыға. Йәне көйҙө Аҡмаңлайҙың. Ул туҡтағас, өйөр ҙә тынды. Барыһы ла кеше тирәләй сүктеләр. Кеше тере әле. Һирәк-һаяҡ унының ауыҙы ҡыбырҙай, алға һуҙылған яланғас бармаҡтары тартышып ҡуя. Кешегә ниҙер кәрәк. Ләкин яҡын барырлыҡ түгел: еҫе яман. Тәбиғәттә булмаған еҫ. Аҡмаңлай сирҡанды, үҙенең биләмәһендә яман еҫ таратып ултырған ҡараҫҡыны күрә алмауҙан тешен шығырлатты. Сит уға әҙәм заты. Әйтерһең дә, бүре һәм кеше бер ҡасан да тәғәм бүлешмәгән, ерҙәш йә һыуҙаш булмаған, бер-береһен бәлә-ҡазанан ҡотҡарышмаған. Әле бүре кешегә түгел, кеше бүрегә килгән. Һарыуы ҡайнаны Аҡмаңлайҙың. Яй ғына тороп, ҡараҫҡы эргәһенә килеп, һыңар ботон күтәрҙе. Бүре эсенән сыҡҡан бысраҡ һарҡындыны ел кешенең битенә сәпәне. Әммә кеше ҡыбырламаны, ҡымшанманы.

Аҡмаңлай артынса ошо ҡылыҡты өйөрҙәге һәр бүре ҡабатланы. Уларҙан һибелгән һарғылт шыйыҡса тиҙҙән боҙға әйләнде. Бүреләр тантана итте: һин үҙең айырылдың бөйөк Әсәнән — Тәбиғәттән — кеше! Һин өҫтөн ҡуйҙың унан үҙеңде! Һин! Һин! Һин ят бауыр иттең башҡа тереклеккә үҙеңде!

Боҙ һынға әйләнгән ҡараҫҡыны ҡалдырып, үҫе ҡанған өйөр ел ыңғайына артабан олаҡты.

* * *

Көн нисек тиҙ боҙолһа, шулай тиҙ рәтләнде. Күк йөҙө ҡара болоттарҙан әрселеү менән ҡояш килеп сыҡты ла үҙенең ғәфү иткеһеҙ оҙаҡ күренмәй тороуынан оялғандай, бар көсөнә яҡтырта, йылыта башланы. Ырашҡыла ергә ятҡан ҡар оҙаҡҡа барманы, бер-ике көндә йырғанаҡ булып аҡты ла бөттө. Ер өҫтөндә тәүге ҡыяҡтар йәшәрҙе, битләүҙәрҙә умырзаялар тиртте, сыйырсыҡтар иртәнән кискә тиклем бихисап йырҙарын яңғыратты. Ағастарҙа ырашҡыға тиклем үк бүрткән бөрөләрҙән ыуыҙ ғына ҡыяҡтар морнаны. Донъя инде нисәнсе мәртәбә үрсем-ҡурпы ҡалдырыу хаҡына сираттағы бөйөк миҙгелен башланы.

Барсынбикәнең дә бөгөн күңеле иләҫ-миләҫ. Өйөн генә түгел, урамының эсен дә, тышын да ялтыратып ҡуйҙы. Былтырҙан ҡалған сүп-сарҙы өйөп яндырҙы. Быйыл, бәлки, ул бында йәшәмәҫ тә. Күңеле унын Тирәклегә тарта. Ләкин бөгөн мәрйә врач ейәне Әбүбәкерҙе алып киләсәк. Шуға тулҡынлана Барсынбикә. Көтөп алған, шуны булдырыу, донъяға имен-һау тыуҙырыу хаҡына күп михнәттәр күрҙе ләһаң ул. Балнистан бөгөн сығаралар Әбүбәкерҙе. Барсынбикә унын эргәһенә көн дә барҙы. Үҙе лә сирләүгә ҡарамаҫтан, мәрйә врач Әбүбәкер эргәһенән китмәне, Барсынбикә алып барған ризыҡты ла ҡарап, һайлап ҡына ашатты. Ә бер көн врач менән Барсынбикә араһында шундай һөйләшеү булды. Һөйләшеүҙе шундағы аҡ халатлы йәш ҡыҙ һүҙмә-һүҙ тәржемә итеп торҙо.

— Мин һеҙҙең ейәнде, Әбүбәкерҙе, бик яратам,— тине мәрйә, бер аҙ күҙгә-күҙ ҡарашып ултырғандан һуң.

— Рәхмәт,— тине Барсынбикә.— Уны һин ҡотҡарҙың. Сәбилә тыуҙырҙы, һин үлемдән алып ҡалдың.

— Тимәк, икенсе әсәһе мин булам?

— Шулай тип тә булалыр. Ул аҙымды һәр кем яһай алмаҫ ине.

— Ләкин... Хашим килеп сыҡмаһа... Бала ла, мин дә һыу төбөнә...— Мәрйә кескәй устары менән битен ҡапланы.— Ах! Баланың шул мәлдәге күҙҙәре! Уның шул тиклем йәшәгеһе килә ине!

— Шуға ла һауыҡты ул. Йәшәгеһе килгәнгә тием.

— Ул миңә бик ҡәҙерле, инәй! Мин тиҙҙән Ленинградҡа ҡайтам. Унда минең фатирым бар. Яҡшы эш көтә. Баланы... үҙем менән алайым, инәй! Мин уны уҡытырмын! Ҙур кеше итермен!

— Һин үҙең... беҙҙең яҡтарға нисек килеп сыҡтың, ҡыҙым?

Башкирцева ҡыҙарҙы, тәмәке ҡабыҙҙы.

— Ул — оҙон тарих, инәй. Ҡатмарлы. Быға минең фамилиям һәм... һеҙгә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған йөҙөм сәбәп. Мин... туғандарымды эҙләнем.

— Таптыңмы?

— Юҡ.

— Алай... — Ҡарсыҡ, күҙҙәрен аҫҡа төбәп, һүҙһеҙ ҡалды.

— Ләкин... йырҙарығыҙҙы үҙ иттем. Үҙемдең ысынлап та башҡорт икәнемә төшөндөм.

— Изге ниәтеңә рәхмәт, ҡыҙым. Ләкин һин Әбүбәкерҙең дә, ҡырҡты артылғас, күңеле болоҡһоп, туғандарын эҙләп ил гиҙеүен теләмәйһеңдер бит?

— Юҡ. Быны мин бер кемгә лә теләмәйем! Ләкин... Әбүбәкергә бында еңел булмаясаҡ. Әсәһе лә, атаһы ла юҡ. Һеҙ ҙә бик оло йәштә.

— Мин, әлбиттә, ейәнемә тик бәхет кенә теләйем. Ләкин, өлөшөнә яҙмыш тарафынан ниндәйҙер ғазаптар төшкән икән, уларҙы бәндә нисек яҙлыҡтырһын?! Икенсе бер кеше уны бәхетле лә, бәхетһеҙ ҙә итә алмай, духтыр!

— Мин һеҙҙе төшөнмәнем, инәй!

— Минең ейәнем үҙенә яҙған ғүмерҙе ҡалай ҙа үҙе үтер. Беҙҙең ата-бабалар, ғөмүмән, ир баланы ете йәшенә тиклем олатай-өләсәй тәрбиәһендә ҡалдырған.

— Тимәк, миңә баланы бирмәйһегеҙ?

— Әлегә — юҡ. Йәйҙәрен кил беҙгә, аралаш. Үҫкәс — күҙ күрер...

— Рәхмәт, инәй! — Мәрйә ҡапыл уның алдында тубыҡланды, Барсынбикәнең ҡулдарын алмаш-тилмәш үбә башланы. Барсынбикә көләмһерәне:

— Ҡасан яратып өлгөрҙөң был баланы? Балнистамы?

Мәрйә ҡаушаны. Тороп, тәҙрә эргәһенә килде.

— Бөтәһен дә һөйләп... һүҙ менән аңлата алмам кеүек. Бәлки, йән биргәнендә Сәбиләнең яратыуы миңә күскәндер... Белмәйем. Һәр ҡатын-ҡыҙ бала хаҡында хыяллана. Бәлки, хыялымдағы бала Әбүбәкер сүрәтендә булғандыр. Мин һеҙҙең киленегеҙҙе лә, Сәбиләне, бик йәлләй инем...

Ошондай һөйләшеү булды Барсынбикә менән Башкирцева араһында. Барсынбикә үҙе лә моңһоу күңелле мәрйәне яҡын күреп өлгөрҙө. Ләкин баланы бирә алмай. Үҙ балаларына бирә алмағанын кеше ейәндәренә бирә, ти бит. Барсынбикә Әбүбәкерен, Мәҙинәнең, йәнә Ғәлимәнең ҡыҙын әҙәм итеү өсөн барыһын эшләйәсәк.

Барсынбикә, йөрәкһеп, ҡапҡа тышына сығып баҫты. Ана килә улар! Башкирцева бер ҡулы менән Әбүбәкерҙе етәкләгән, икенсе ҡулында — ҙур ғына төйөнсәк.

— Һаумыһығыҙ, инәй!

Алыҫтан уҡ сәләм биргән врачтың ҡулынан ысҡынып, Әбүбәкер уҡ кеүек Барсынбикәгә атылды:

— Өләс! Ура! Өләс! Мине сығарҙылар, өләс!

* * *

Камалетдинов, коридорҙа һуңғы аяҡ тауыштары тынғас, иркен тын алды: бөгөнгө сыбар көн дә үтеп китте! Ул, ирәйеп, урынынан тороп, тәҙрәне асты — танауға баҡсала ҡотороп сәскә атып ултырған муйылдың иҫерткес еҫе бәрелде. Ҡыҙыҡ, былтыр, ҡороған кеүек булғас, Әйүп шуны ҡырҡып ырғытырға ҡушҡайны, ә быйыл был әбей ағас танырлыҡ та түгел. Эйе, сыбар булды бөгөнгө көн, бик сыбар... Район, беренсенән, сәсеүҙе тамамланы. Дауаханаға мәрхүм булып ҡалған Лоҡман Талипович урынына яңы баш врач килде. Үҙ һүҙендә тора торған, ныҡлы ғына егеткә оҡшаған быныһы.

Камалетдинов, муйыл еҫенә туйынған һауаны күкрәге тулғансы рәхәтләнеп һулағас, кире өҫтәле янына килде. Өҫтәл ситендә тоноҡ емелдәгән әйбергә эйелде: ручка. Көмөш тышлы ҡәләм. Тағы онотоп ҡалдырған уны Лидия Николаевна! Ләкин был юлы Әйүп уны хужаһына тиҙ генә кире ҡайтара алмаясаҡ. Майор Башкирцева менән улар бөгөн генә, ошонда хушлаштылар.

— Һеҙгә инмәй китеүҙе килештермәнем, — тине Лидия Николаевна, тынлыҡты беренсе булып боҙоп.

— Хушлашмай китерһегеҙ тигән уй башыма инеп тә сыҡманы. — Әйүп ҡапыл тотлоҡто, был моңһоу күҙле ҡатын менән һаубуллашыуҙың былай ауыр булырын әле генә төшөнгәнлектән, арҡа буйы семерҙәне, тамағына төйөр тығылды. — Яманлап иҫкә алмаһағыҙ ине, Лидия Николаевна. Эштән бушап, бер иркенләп һөйләшеп тә ултырып булманы.

— Эйе, уныһы үкенескә ҡалды... — Лидия Николаевнаның йәш юшан төҫөн хәтерләткән күҙҙәре йәшкәҙәне. — Һеҙ ҙә... Эш бит... төрлө саҡтар булды.

Шунан икеһе лә тынды. Араларында ҡара шәүләләй торған Лоҡман Талиповичты иҫкә төшөрҙөләрме — оҙаҡ ҡына шып-шым ултырҙылар. Башта Әйүп Ғәзизович телгә килде:

— Әйберҙәрегеҙ күп булһа, оҙатырға кеше бирәйем.

— Минең ни... — Лидия Николаевна көләмһерәне, — әллә нәмәм юҡ инде. Үҙемде белә башлағандан бирле йөрөткән бер фотокарточкам, китаптарым, аҡ халатым...

— Фото тигәндәй... Ҡыҙыҡ... Бер рәсемде мин дә ғүмер буйы йөрөтәм үҙем менән. Ҡайһы саҡ шул фотолағы малай-Әйүптән кәңәш һорайым.

— Ә минең фотола үҙем юҡ. — Лидия Николаевна торҙо, Әйүп тә

аяғөҫтө баҫты. — Мин ул рәсемдәгеләрҙән юлға сыҡҡан һайын фәтиха һорайым.

— Барып еткәс, үҙегеҙ тураһында, зинһар, хәбәр итегеҙ, Лидия Николаевна!

— Һис шикһеҙ. Мин әле был яҡтарға киләсәкмен. Әбүбәкер ҡала бит!

— Сәсеү бөтөү менән, саҡ ҡына бушағас та, барып хәлдәрен белермен.

— Рәхмәт. — Лидия Николаевна Әйүптең ҡулын йомшаҡ ҡына, үҙ итеп, йылы итеп ҡыҫты. — Рәхмәт бөтәһе өсөн дә...

Шунан китте. Был ҡәләм ҡайһы арала, нисек ятып ҡалғандыр — Әйүп хәтеренә төшөрөргә тырышһа ла, иҫләй алманы, әммә бойоҡ ҡарашлы һылыу докторһыҙ ҡалған Таулы Әйүпкә толҡаһыҙ һәм буш кеүек күренде. Ярай әле бынау ҡарт муйылды көҙҙән ныҡышып ҡырҡтырмаған. Шунан таралған хуш еҫ Лидия Николаевна менән киткән йылы тойғонан ҡалған бушлыҡты тултырғандай.

— Инергә... яраймы? — Әйүп эңер ҡараңғылығына сумған кабинеты ишеге асылыуға башын күтәрҙе.

— Һеҙ?!

— Эйе, мин. Барсынбикә Моратова. Мөхәммәт тауға килмәһә, тау үҙе килә торған булған тиҙәр уның ҡаршыһына.

— Мин һеҙгә күптән йыйына инем. Ултырығыҙ. — Әйүп, өҫтәл артындағы ултырғысынан тороп, ҡарсыҡты тәҙрә эргәһендәге ҡәнәфигә ултыртты, үҙе уның ҡаршыһынан урын алды. — Ниндәй йомоштар килтерҙе һеҙҙе бында, инәй?

— Асылыма ҡайтырға ҡарар ҡылдым. Шуны юллап килдем.

— Асылыңа?!

— Эйе, асылыма. Әбүбәкерем менән Тирәклегә ҡайтып китмәксемен. Мәҙинә ҡолонсағым янына. Мин унда үҙ исем-шәрифтәремдә ҡайтырға тейешмен.

— Үлгән иреңдең дә, үҙеңдең дә реаль шәхестәр икәнлегегеҙ хаҡында архивтан документтар күптән алынған. Әбүбәкерҙе...

Барсынбикә ҡәнәфигә сумып, бөршәйеберәк ултырған еренән кәүҙәһен турайта төштө:

— Ейәнемде һау саҡта үҙем ҡарайым. Бәлйерәп бөткән ҡарсыҡ түгелмен әле.

— Дөрөҫ уйлайһың, инәй... — Әйүп тынғыһыҙланып урынында борғоланды. — Тимәк, Мәҙинә үләсәйле булды. Эй шатланыр инде!

Әре-һәре генә яҡтылыҡта сырыштары, битенең янғандан ҡалған йөйҙәре артыҡ күҙгә ташланып тормағас, Барсынбикә йәшерәк күренгәндәй, сөм-ҡара күҙҙәрендә нур сәсеп осҡондар һикерешкәндәй.

— Мәҙинә кеүек баланың үләсәһе булыу тимә бер кешенең өлөшөнә теймәй торғандыр!

— Мин дә шулай уйлайым... — Камалетдинов йәнә тотлоҡто, ҡолаҡ остарына, сикәләренә ут ҡапҡанын ярай әле әбей күрерлек түгел, ҡараңғы.

— Мин дә бик һағындым, инәй, ейәнсәреңде.

Ҡапыл ауыҙынан ысҡынған һүҙҙәрҙән һуң Камалетдинов бөтөнләй ҡаушаны, тороп, асмалы тәҙрә ҡаршыһына баҫты, папирос ҡабыҙҙы. Ҡараңғылыҡ ҡуйырғандан-ҡуйыра барған бүлмәлә уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты. Бер талай өндәшмәй ултырғандан һуң Барсынбикә һүҙҙе үҙе ялғарға булды, ахыры:

— Һағындым, тип, яусы ебәрергә ятмайһыңдыр бит?

Камалетдинов төпсөгөн тәҙрә аша ташланы.

— Бик ебәрер инем...

Барсынбикә Камалетдинов ауыҙынан көрһөнөү, ыңғырашыу ҡуша сыҡҡан ауазға ҡаршы ҡаты итеп тамаҡ ҡырҙы:

— Ебәрәм тиһәң дә ебәрә алмайһың шул...

— Ниңә?

— Һы, — Барсынбикә уйнаған һымаҡ башланған хәбәрҙең олоға олғаша барыуын тойҙо, һүҙ айышын һаман төшөнөп бөтә алмағанлыҡтан, тотҡан ерҙән һындырмай кинәйәләп һөйләшеүен белде: — Нигә тип... Сәүит осоронда түгел,

хан заманында ла ул һиңә сыҡмаҫ ине. Беренсенән, иренең яу аты, аты булмаһа, эйәр-өпсөндәре ҡайтмаған...

— Уныһын мин дә аңлайым...

— Ә ниməһен... аңламайһың?

— Беренсенән тигәс, икенсеөсөнсө сәбәбе лә була торғандыр?

— Ә-ә... — Барсынбикә кире килеп ҡаршыһына ултырған Камалетдиновтың күҙенә тура ҡараны. — «Икенсенән — йәш айырмаһы», тиер был ҡарсыҡ тип көтәһеңдер. Аны әйтмәйем. Аныһын үҙең дә беләһең. Икенсенән, ул һинең дошманың — Сибәғәт ҡурпыһы.

— Уныһы инде, үткән эшкә — салауат... — Камалетдинов һүҙен нисек осларға белмәй интекте. Үҙе лә бик яҡшы аңлай бит инде ул хәлдең мөшкөл икәнен: партия ағзаһы, етәксе, өйләнгән, балаһы бар... Әммә көнөн-төнөн яндырған, эсе-тышын өткән һөйөү утынан ҡотолор башҡа сара ҡайҙа?! Шуға күрә ҡарсыҡтан бигерәк үҙен тынысландырыр өсөн, ахыры: — Кеше бер һөйләр ҙә тынар ине әле, — тиеү менән сикләнде.

— Эй Әйүп, һыу ағып китер ҙә ул, таш ҡалыр.

— Таш? Ниндәй таш?!

— Ғүмер буйы күңелеңдә йөрөткән таш!

— Мәҙинәнең... ни ғәйебе?!

— Ғәйебе юҡ Мәҙинәнең, һин дөрөҫ әйтәһең. Ләкин... Ихсанбай Гөлбаныуҙың игеҙәктәрен уйы менән тыумаҫ элек үлтергән кеүек, һин дә Сибәғәт тоҡомона ғүмер буйы теш ҡайрағанһың, уны юҡ итеү теләге менән янғанһың! Мәҙинәне башыңдан сығар! Һеҙҙең ҡушылыуҙан тамыр йәйерлек сәләмәт ҡурпы ҡалмаясаҡ!

— Һин, инәй, ярай, әүлиә лә бул ти. Ләкин һин хаким түгел! — Урынынан ырғып торған Камалетдинов, нишләргә белмәйенсә, ут ҡабыҙҙы. Ҡабыҙҙы ла, башын артҡараҡ ташлап, ғорур баҫып торған Барсынбикәне күрҙе. — Ғәфү итегеҙ... Мин, ахыры, ҡыҙып киттем. Мин был турала һүҙ башларға тейеш түгел инем. Нисектер... ҡапыл килеп сыҡты. Ҡыҙым бар, Флоридам...

— Эйе, һин, улым, һүҙ башларҙан алда ҡыҙың тураһында уйларға тейеш инең. Ул һинең ярҙамға бөтәһенән нығыраҡ мохтаж.

* * *

Мәликә иренең эштән ҡайтҡас оҙаҡ ҡына гәзит уҡып ултырыуына гәҙәтләнгән. Баланы йоҡлатҡас, йоҡо бүлмәһенә үрелеп ҡараны ла аптырап ҡалды: Әйүп мендәргә ҡапланған, ауыр тын ала.

— Әйүп! — Тауышына эсендәге хафаһы сыҡты Мәликәнең. — Йә Хоҙай! Һиңә ни булды?

— Йоҡлайым! — Әйүп башын стена яғына борҙо. — Утты һүндер.

— Сүн... Һүндерермен, — ашыҡҡанда йә тулҡынланғанда Мәликә «үҙ теленә» күсеүсән, һиҙеп ҡалһа төҙәтә, һиҙмәһә инде сутылдай бирә. — Әллә эштә берәй...

— Арығанмын, Мәликә, йәнгә теймә. Бар, ана, бала янына ят.

— Син ҡыуа тип кенә... — Мәликә үҙен ҡулға алырға тырышты. Тормош, бигерәк тә Камалетдинов менән йәшәү йылдары, уны ла бит күп нәмәгә өйрәтте. Хәбәр әйтерҙән алда иренең кәйефен байҡарға ла, ауыҙын үлсәп асырға ла — барыһына — ул ир ҡатыны булғас ҡына төшөндө. Элек булһа, ире тупаҫ һөйләшә тип, үсегеп, ҡырт боролоп сығып китер ине, хәҙер ул башҡасараҡ эш итә. Бына ул Әйүп ишетерлек итеп ауыр көрһөндө, юрғанды, күтәрә биреп, иренең иңбашына тартып япты, ситтәрен ҡымтыны. Ошоларҙы эшләгән ыңғайға:

— Япраҡ еле һалҡынса, тәҙрәләрҙе йыуғайным, үтәнән-үтә өрә. Эшең дә күп шул, йә, йоҡла. Үҙем дә иртәрәк ятһаңсы тип әйтергә ингәйнем, — тип һөйләнде. Инде хәҙер утты һүндереп сығып китергә кәрәк, ләкин, улай итһә, Мәликәнең күңел төбөндә ятҡан һорауы бөгөн дә бирелмәйәсәк. Көн артынан көн үтә, ә төйөн, сиселмәгәс, һаман ҙурая. Унан һуң бит Кәкере ауылдағы ҡарсыҡ та, моғайын, мәңгелек түгелдер, оло бит инде ул...

— Бөгөн бер ҡарсыҡты ерләйҙәр ине...

Ҡатынының тупһыҙ, атһыҙ-юлһыҙ төндә былай һүҙ башлауы Әйүптең ташҡан талағын сайпылдыра торған һуңғы тамсы булды.

— Көнө бөткән — көн дә үлә!

— Шулай инде, тик мин... теге Кәкере ауыл ҡарсығы булмағайы тип кенә... Флорида бит...

— Кәкере ауыл ҡарсығына... нәмә булһын? Иртәгә ул паспорт аласаҡ, ә унан... Тирәклеһенә һыпыртасаҡ!

— Тирәклеһенә? Ә ниңә?

— Мәҙинәһенең тупһаһына ятып, эт шикелле ҡарауыллап ятырға — бына нимәгә!

— Мәҙинәнең?! — Таулылағы һуңғы ваҡиғалар Мәликәне бер нәмәгә лә аптырамаҫҡа өйрәтһә лә, ул ҡатын-ҡыҙ асылын еңә алманы, төпсөшә бирҙе. — Ә ниңә... Мәҙинәгә?

— Мәҙинә уның ейәнсәре булып сыҡты. Бына нимәгә!

Кәйефе үҙгәргән Камалетдинов, әйләнеп, арҡаһына ятты, кеше менән һөйләшкәс уға еңелерәк тә булып ҡалды, шикелле. Һәр хәлдә, йөрәгенә шыналай ҡаҙалған ауыртыу ебәргәндәй булды.

Хәҙер, моғайын, ҡатыны менән дә арыулап һөйләшә алыр. Бер уйлаһаң, бында, Әйүптең Мәҙинәне яуапһыҙ һәм ярһыу мөхәббәт менән һөйөүендә, Мәликәнең ни ғәйебе? Ҡатыны уның йәмһеҙ түгел, әммә ул ошо рәүешенән ун түгел, йөҙ тапҡырға матурыраҡ булһа ла, барыбер күңеле Мәҙинәлә булыр ине. Әйүп әлеге хәлендә үҙен йотом һыуһыҙ, сүллектә, селлә ҡояшы аҫтында тороп ҡалғандай хас итә. Эшенән дә тәм тапмай. Юғарыла болғаналар. Маленков менән Хрущев араһында иғлан ителмәгән йәшерен көрәш бара. Никита Сергеевич партияның Үҙәк Комитетының беренсе секретаре булып алды. Крәҫтиәндәргә паспорт бирә башланылар, төрмәләрҙән сәйәси тотҡондар ҡайта. Илдә баҫып, иҙеп барған көсөргәнеш кәмеүен Әйүп тә тоя, ләкин был хәл уны шатландырмай. Көндәрҙең береһендә Әптеләхәттең дә бит ҡайтып төшөүе бар, тигән уйҙан ғына ла йөрәге өшөй. Мәҙинә Әйүптеке һәм тик уныҡы ғына. Мәҙинә уның хистәргә, ярһыу кисерештәргә бай төштәрендә, Мәҙинә уның ил, кеше ғәмен ғәмләп үткәргән тынғыһыҙ көндәрендә, уйҙарында, теләк-хыялдарында. Етмәһә, Барсынбикә менән булған һөйләшеү бәғерҙе өтә.

— Ҡыҙыңды... әсәһенең тыуған ерендә дауалар кәрәк, — тине ҡарсыҡ, Мәҙинә хаҡындағы һөйләшеүҙән һуң байтаҡ тынып ултырғандан һуң.

— Ни өсөн? Флорида бит минең дә ҡыҙым. Ә мин ошо ерҙә тыуып үҫкәнмен, — тине Камалетдинов.

Барсынбикә Камалетдинов тауышындағы ҡатылыҡты ишетмәнеме, әллә ишетмәмеш булдымы, һүҙен нисек ойотоп башлаған, шулай дауам итте:

— Мәликә тыуған өй ҡаршыһында ҡарт бер сәтләүек ағасы үҫә. Ҡыҙыҡай оҙайлы ваҡыт шуның һөтөн эсергә тейеш.

— Ағастың һөтө буламы?

— Мин күргәнемде әйтәм. Ул ябай ағас түгел. Ҡатының башта ете тәүлек буйы көнөнә етешәр көйәнтә һыу ҡойһон шуның төбөнә. Раббынан үҙенең һәм ете быуынының гонаһтарын кисереүҙе һораһын. Ағас төбөндә зат-зәүере ҡылған ҡара эштәрҙе йылғанан әсе тир сығарып ташыған һыу менән сайҙырһын. Етем-еһергә көн дә хәйер өләшһен, үҙен тәрбиәләгән ҡатындың һуңғы көндәрен еңеләйтешһен. Үҙен үҫтергән тупраҡтың хәйер-фәтихаһын алғас ҡына үҙе теләгән яҡҡа юлланыр...

Ошондай һөйләшеү булды улар араһында. Тик быларҙы нисек итеп Мәликәгә аңлатырға?

— Мәликә, һин тыуған йорт алдында ниндәй ағас үҫә?

Ҡапыл бирелгән һорау Мәликәне аптырауға һалды:

— Ә ниңә кәрәк ул һиңә?

— Ҡарсыҡ Флоридаға шуның һөтөн эсерергә ҡуша.

— Ах, шулаймы? Кедр ағасы ул. Беҙҙә, ысынлап та, унан һөт яһайҙар! Шул ярҙам итер тиме?

— Эйе, ләкин унда оҙаҡ йәшәр кәрәк...

— Ах, Әйүп! Ә бит мин... күңелем менән һиҙә инем шуны! Күп тапҡырҙар уйланым, төштәремдә күрҙем. Мин кедрға йылғанан һыу һибәм, имеш, ә ағас беҙгә күнәк-күнәк һөт бирә...

— Ә ҡарсыҡ ысынлап та һиңә һыу һибергә ҡуша уға!

— Ах, Әйүп! Баланы һауыҡтырыу әмәле төшөмә кергән булған бит! Ә мин, сантый... Ә һин, һине эштән ебәрерҙәрме? Беҙҙәге тәбиғәт! Әйүп, кит эшеңдән! Һин һүрәт төшөрөрһөң! Һин бит иҫ киткес оҫта төшөрәһең рәсемде!

— Йә, бар, ял ит. Иртә кистән хәйерлерәк. Иртәгә үҙең барып сыҡ ҡарсыҡҡа. Мин ышанып бөтмәйем, әлбиттә.

— Әйүп!

— Бар, ят, йоҡла. Башым тубал кеүек.

— Тыныс йоҡо.

— Һиңә лә.

Мәликә сыҡты. Бүлмә эсендә ул ҡалдырған хуш еҫ бәүелеп тора бирҙе лә, әкренләп таралды. Әйүптең ҡатын-ҡыҙ яҡынлығын тоймауҙан талсыҡҡан, зарыҡҡан тәне ут кеүек яна. Ах! Ошо хәлдә лә бит ул Мәликәгә яҡынлай алмай. Артабан нисек йәшәр улар? Ярай, Мәликә ҡыҙы менән ҡайтып та китер. Бер һөнәрһеҙ, хәҙер инде ситкә әйләнгән ерҙә нисек тәрбиәләр ул Флориданы? Әйүп көсәнеп күҙен йомдо. Ҡайһылыр бер арала ҡабаҡтары эленде, күҙ алмалары йоҡоға ойоғандай итте. Ана, товарняк өҫтөндә күлдәкыштанын флаг кеүек итеп елгә тотҡан, ташкүмер саңы һырыуҙан ҡап-ҡара шайтанға әйләнгән малай елә. Ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып шулай этләнмәҫ ине — хәшәрәттәр тәненә ҡаҙала, бөтөн ере тырнауҙан ҡутырлап, сейе сығып бөткән.

— Етемлек был, ағай. Мин аңлайым һине. Үҙең дә етем үҫкәнгәме, һине шундуҡ үҙ иттем.

— Атаҡ, Әптеләхәт түгелме һин?

— Мин.

— Ҡайҙа китеп бараһың?

— Китмәйем, ҡайттым. Мәҙинәгә ҡайттым. Улыма.

Шатланырға ла, иларға ла белмәй Әйүп. Бына уның күҙҙәренән йәш атылып сыҡты. Тик... ниндәй йәштәр улар? Күҙ йәштәре лә бит төрлө була.

— Әйүп, Әйүп! — юрғанынан кемдер тартҡанға һыңҡылдап илаған Камалетдинов иләмһерәп тороп ултырҙы.

— Кем, кем бар!?

— Тынысылан... Мә, һыу эс. Әйүп, унда кемдер ишек шаҡый.

— Ишек? — Әйүп ҡатыны ҡулынан стаканды алды, ҡалтыранған ҡулдары менән ирененә яҡын килтерҙе. — Ут ҡабыҙ.

— Ишеккә мин барайыммы?

— Үҙем. — Әйүп, аяҡтарына тапочка эләктереп, аҫҡа төштө.

— Кем бар унда?

— Әйүп Ғәзизович! Был мин — Әптеләхәт!

— Һин?! Әптеләхәт?!

Ағас кеүек ҡатҡан ҡулдарын көскә күтәреп, Әйүп Камалетдинов келәне күтәрҙе.

* * *

Яҙ, һуңлап килеүенең әжерен ҡайтарғандай, тирә-йүнде йәһәтләп, уңған килен егәрлелеге менән, йәшелгә, гөл-сәскәгә күмде. Мөһабәт һәм тантаналы йәшеллек менән ҡапланған урмандарҙы кәкүктең саф, күтәренке тауышы яңғыратты. Был тантанаға бала сығарыу шатлығына сумған башҡа ҡоштар ҡушылды. Хөсәйен, атын тапҡас, һыуы ҡайтҡан Тәрән үҙәк аша йылғаға бороло: Күгатты йыуып, үҙе лә һыу эсеп алыр. Юғиһә, бынау хәйерсене тапҡансы ахаллаҡайымға төштө. Ҡорһағы ла асты асыуға — уныһына түҙер. Кисеү буйында һыу йыуаһы, ҡымыҙлығы, ҡуҙғалағы етерлек — шулар менән алдар тамағын. Их! Хозурлыҡ. Йәш үлән араһына зәп-зәңгәр күҙҙәрен көлдөрөп күгәрсен күҙҙәре емелдәшә, болон томбойоҡтары, аҡ таждары менән

бәүеләһығыла йылмайып сәләм бирә.

Селектең һары сәскәләренә бал ҡорттары ҡунаҡлаған. Ошо саҡлы матурлыҡҡа әҙәм йөрәге нисек түҙә икән? Ошо тиклем гүзәллекте ни хәлдәр итеп эсеңә һыйҙырмаҡ кәрәк?!

Хөсәйен, атынан төшөп, бит-ҡулдарын йыуҙы, һыу эсте. Йылғаның икенсе яры — ҡая. Өҫкә ҡараһаң, кәпәсең осмалы. Ҡырҡылған күгек текә таш стенала бер нәмә үҫмәй тиерлек. Оҙағыраҡ аңшайып торһаң, өҫтөңә йоморо таш килеп төшөүе лә бар. Ҡаянан ҡолаған әҙме таш ята йылға эсендә. Таштар башлыса ҡыҙыл булғанлыҡтан, йылғаның һыуы ла ҡыҙғылт күгек.

Асыҡтырған. Эсеп алғас үлән баштарын йолҡҡоларға керешкән атын ботаҡҡа бәйләп, Хөсәйен ҡуҙғалаҡ йыя башланы. Әллә ни ҙураймаған әле улар, шунлыҡтан йомшаҡ һәм итлеләр. Һыу йыуаһының да ыуыҙ ғына сағы, үҙе сөсө, үҙе йомшаҡ. Тамаҡҡа ымһынған Хөсәйен донъяһын онотто. Ҡапыл ҡул аҫтынан тиерлек ҡош осоп сыҡты. Күрәһең, ояһы булған, баҫып ултырған. Бынағайыш! Был бит... ат һөлдәһе. Теге ҡош уның башына оя ҡорған булған. Хөсәйен, эйелеп, аттың күҙенән эскә ҡараны — ҡоро үлән, мамыҡ араһында дүртме, бишме сыбар йомортҡа ята. Әкәмәт. Туҡта, был ҡайһы аттың... Ҡапыл уның йөрәге йыш-йыш тибә башланы, сикә тамырҙары һулҡылданы — был бит Һарайғыр! Был уның һөлдәһе! Былтыр, ямғыр мул булғас, был ерҙәрҙә ҡуләүек ятты. Ә быйыл ҡар оҙаҡ һәм әкрен ирене, дым күпме булһа, шунса ергә һеңеп бөттө. Эх! Бына ҡасан осраштыҡ һинең менән, дуҫҡайым! Ғорур тәбиғәтле, сапсан холоҡло малҡайым! Әҙме кешеләрҙең һөйөүе, әҙме бәндәләрҙең зәһәр көнләшеүе ягылды һинең йылтырап торған мәғрүр һыныңа! Ә бейәләр... Уларҙың иң уҫалдары һинең ут бөрккән ҡараштарың аҫтында баҙап, ҡолаҡтарын шымартып ҡаушап ҡалыр ине... Һинең тояҡтарың аҫтында таштар осҡон сәсте, тупраҡ саң болотона әүерелде; ебәк ялдарыңды ямғыр, сыҡ йыуҙы, елдәр тараны. Эй Һарайғыр! Бер нәмә лә мәңгелек түгел шул был донъяла. Мин һинең ҡәҙимге ат түгел икәнеңә, толпарҙар, дөлдөлдәр затынан икәнлегеңә бөтә ауылды ышандырып бөткәйнем. Ә һин... Хөсәйен уның һерәйеп сығып торған ҡабырғаларына ҡараны. Туҡта, туҡта... Әллә инде ҡабырға һөйәктәрең ике ҡат һинең? Бына бит: өҫтәгеләре ҡыҫҡараҡ, улар ҡоймос һөйәгенә етмәҫ элек үк тамамланған... Һуң былар бит ҡанат эҙҙәре! Эйе! Эйе! Хөсәйендең инде ат һөлдәһен генә күргәне бар, ләкин бындайҙы... Һарайғыр! Һин ысынлап та толпар тоҡомонан булғанһың! Эй аҫыл мал! Ауылда әле бер ҡолон уйнаҡлап йөрөй, ул нәҡ һинең сабый сағың, ул ике тамсы һыу күгек һиңә оҡшаған! Күҙҙәре ҡап-ҡара, үҙҙәре Мәҙинә күҙҙәре күгек тонйорап, тамылйып тора. Һин Ерҙә нәҫелеңде ҡалдырып киткәнһең, малҡайым!

Хөсәйен йәштәрен тыйманы. Ана улар тупылдап болон томбойоҡтарына тама. Наҙлы күгәрсен күҙҙәренә аҫылына. Төшһөндәр. Аҡһындар. Хөсәйен бөгөн мең-мең йылдар артында ҡалған һәм Һарайғыр сифатында бөгөнгөгә тоташҡан Мәңгелектең үҙе менән ҡауышты.

* * *

Атлай-йүгерә һыуҙан ҡайтып килгән Мәҙинә арба тауышына башын күтәрҙе. Ҡарасәлең, үҙ уйҙарына күмелеп, кемдеңдер юлын ҡыя яҙған. Ярай әле арбалағы кеше атын туҡтатты. Ахыры, ҡатын-ҡыҙ үҙе. Мәҙинә, артҡа сигеп, дилбегә тотҡан оло ҡатынға өндәште:

— Үтегеҙ, инәй, Үтегеҙ...

Арбалағы ҡатындың үҙенә текәлгән ҡарашын тойҙо Мәҙинә.

— Шөкөр, тулы һыулы биҙрәләргә тап булдым.

— Мин, инәй, юлдыҡлы ул, — Мәҙинә шунда ғына был ҡарсыҡтың эргәһендә суҡайып ултырған баланы шәйләне, ә арбаның артында, баҡыр күҙҙәрен ялтыратып,

«һағыҙ»ын шартлата сәйнәп, тарбаҡ мөгөҙлө кәзә ята. — Ҡайҙа юлландығыҙ, инәй? Бәлки, туҡтап сәй эсеп китерһегеҙ, самауыр ҡайнаған.

Ҡарсыҡтың ҡарашынан айырыла алмайынса, Мәҙинә яурынын ботлоҡ биҙрәләр баҫыуын да онотто. Юлаусы ашыҡманы. Бына ул саңдан һаҡланып башына икенсе ҡат итеп ябынған ҡара яулығын сисеп һелкте, унан тамһынып, бер күрергә зар булған кешеһен ниһайәт осратҡандай, һағышлы, шул уҡ ваҡытта еңел бер һулыш менән көрһөндө:

— Мин килеп еттем, шикелле, балам. Туҡтар төйәгем ошонда минең, Мәҙинә ҡыҙым, — тине.

«Мәҙинә?!» Мәҙинәнең арҡа буйы зымбырланы, ҡапыл ғына йөрәге ҡабынып, тамағы кипте:

— Һин?! Фәүзиә инәй!..

— Мин. Ләкин Фәүзиә түгел, Барсынбикә. Һинең әсәйеңдең... Күкһылыуымдың әсәһе.

Мәҙинәнең мөлдөрәмә тулы биҙрәләре саңлы юлға дыңғылдап төштө, әммә түгелмәне. Дүрт пар дөм ҡара, ҡуйы оҙон керпектәр менән ҡаймаланған бер иш күҙҙәр бер-береһенә һынап, һорау һәм ғәжәпләнеү менән баҡты. «Был оҡшашлыҡты нисек мин элегерәк шәйләмәгәнмен. Ҡарағаттан да ҡараҡ күҙҙәрҙе минең башҡаса осратҡаным булманы!» тигәндәй йәш, шуға күрә лә ҡыҙыҡһыныусанлығын, балалығын юймаған ҡараш. «Бәндә бәндәгә был хәтлем дә оҡшар икән! Йә инде, тыуҙырған әсәһенә түгел, өләсәһенә ике тамсы һыу кеүек оҡшаған ҡолонсағым! Ярабби! Ошо саҡлы һылыулыҡты, камиллыҡты яратыр өсөн ниндәй ҡөҙрәт кәрәктер Хоҙайға!» — ти икенсеһе, олоһо.

— Ижауың бармы?

— Бар. — Мәҙинә эйелеп биҙрәнән һыу алып, Барсынбикәгә һонно. — Тамағыңа теймәҫме, һалҡын...

— Булһын. Төпкөл шишмәһенең һыуы. Күпме хыялландым шуны эсергә.

— Өләсәй... Мин дә! — Мәҙинәне бала тауышы һиҫкәндерҙе. Ҡайһылай матур бала! Ике күҙе — нур бөркkән күгәрсен күҙҙәре. Аһ! Әллә Биктимер менән Йәнтимер...

Ҡарсыҡ йомолоп, йотлоғоп һыу эскәс, ирендәрен ялап ижауға ынтылған балаға ҡараны:

— Эс, улым, эсәр һыуың, ейәр ризығың ошо ерҙә булһын. Бисмиллаһир-рахманир-рәхим...

Мәҙинә, ашығып, биҙрәләрен кире көйәнтәһенә элде:

— Ҡапҡаны асайым! Атыңдың башын беҙҙең өйгә бор, Барсынбикә өләсәй!

Ҡарсыҡ дилбегәне ҡул суғына йомарланы:

— Юҡ, ҡыҙым, минең нигеҙ ҡоромаған. Йәшәгән өйөм имен. Оло йорт урынына, Алла бирһә, өй күтәрербеҙ. Үпкәләмә, тик мин... үҙ тайсама туҡтайым. Әбүбәкер ҡустың яңы йорттоң төп хужаһы булыр. Олатаң Диңгеҙхан ҡорған төлөк бит әле ул.

Мәҙинә тулы һыулы биҙрәләре менән Барсынбикәнең нисәмә йылдар эйәһеҙ моңайып ултырған өйөнә йүнәлде, ҡырсын шығырлатып тәгәрәгән арбаны, арбалағы батшабикә ҡиәфәтле ҡарсыҡты, фәрештә сүрәтле малайҙы һәм баҡыр күҙле, тарбаҡ мөгөҙлө кәзәне һөйрәгән бейә, ял һәм ҡолаға һиҙенеп, кинәнеп бышҡыра-бышҡыра, ботлоҡ биҙрәләре мөлдөрәмә тулы һыу көйәнтәләгән йәш ҡатын артынан эйәрҙе.

* * *

Ауылда хәбәр «йүкә телефон» аша йәшен тиҙлегендә таралыусан булһа ла, Барсынбикәне күрергә ауыл халҡы һерлегешеп ағылманы. Күрәһең, ҡарсыҡтың ғәҙәти булмаған яҙмышы ҡамасауланы. Мәгәр Мәҙинә артынса Хашим, уның артынан Хашимдың һәр аҙымынан эҙ яҙлыҡтырмаған, ул ҡайтҡаны бирле йәшәреп, һырҙары яҙылып киткән Ғәзимә килеп инделәр. Дауытты күтәргән Маһинур ҙа үҙен оҙаҡ көттөрмәне. Барсынбикә үҙенә бар булмышы менән талпынған Дауытҡа ҡулдарын һуҙҙы:

— Собоханалла машалла! Атаинәле, оҙон ғүмерле бул, ҡолонсағым!

Бала менән Барсынбикә араһында күҙгә күренмәгән, ләкин күңелдән күңелгә күпер һалынғанын йөрәге менән тойоп өлгөргән балаһыҙ Маһинур шул саҡ ҡапыл йәненең шәме һүнеп, күңеленән толҡа китеүҙе тойҙо. Ул быға тиклем Дауытты Ғәзимәнән ҡыҙғанып ыҙалай ине, хәҙер быныһы... ҡарсығы...

— Инәй. — Аптырап ҡалған Маһинур бармаҡтарына кескәй ҡулдың ҡағылыуын тойҙо. — Инәй, алдыңа саҡ ҡына ултырып торайыммы?

Күҙенә шатлыҡ ҡатыш ҡаушау йәше эркелгән Маһинур Әбүбәкерҙе күтәреп күкрәгенә ҡыҫты:

— Ултыр, бәпесем. И алла, ҡайһылай бер матур балаһың!

Өй гөжләне. Ашъяулыҡҡа һыйризыҡ өйөлдө, самауырҙың уттыҡсаһы төтөн урғылтты, урын-ер ҡаралтыһы ҡағылып-һуғылып яңынан түшәлде. Бер арала Барсынбикә Мәҙинәне үҙ янына саҡырҙы. Шауҡал бармаҡтарын камзул кеҫәһенә тығып, бәләкәй генә күн моҡсай тартып сығарҙы.

— Бына...

Мәҙинә моҡсай эсенән сыҡҡан фирүзә ҡашлы алтын беләҙеккә ҡарап шаҡ ҡатты.

— Бер нәмә лә аңламайым. Мин уны төрмә һаҡсыһына... Мәскәүҙә... Әптеләхәт менән күрешеү хаҡына...

Барсынбикә йөҙө көлһыу төҫкә инеп ағарған ейәнсәренең ҡулын үҙенә яҡынайтты һәм беләҙекте һаҡ ҡына кейҙерә башланы:

— Улар икәү ине. Был һинекенең ише. Һыңары. Уның ҡайҙалығын Мөғлифә ҡарсыҡ, беҙҙең ҡәрҙәшебеҙ, Ҡөрьән ситенә яҙып ҡалдырған булған.

— Рәхмәт... — Мәҙинә ҡулын күтәрә биреп ҡарауға беләҙек ҡояш яҡтыһында меңләгән нур көлтәһе сәсте, фирүзәләр тағы зәңгәрерәк, баҙығыраҡ булып күренде. — Иҫ китмәле бүләк бит был, Барсынбикә өләс! Торғаны мөғжизә!

Барсынбикә үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр Мәҙинәнең башына ҡулын һалды, иплэп кенә унын йылҡылдап торған толомдарынан һыйпаны:

— Һин үҙең мөғжизә, балаҡайым. Ә хәҙер бар, кейен, әҙерлән.

— Кейенергә? Әҙерләнергә? Ә нигә?

— Шулай кәрәк, — бөтәһен дә ҡапыл асып һалып ейәнсәренең йөрәген ҡуҙғатыуҙан, ярһытыуҙан ҡурҡҡан Барсынбикә Мәҙинәне беләктәренән тотоп үҙенең эргәһенә ултыртты:

— Ҡайғы ғына түгел, шатлыҡ та сабырлыҡ һорай. Һине иҫкәртер өсөн юлға иртәрәк сыҡтым.

— Әллә... — Мәҙинә, урындыҡтан шыуып төшөп, Барсынбикәнең алдына тубыҡланды. — Әллә...

— Эйе, балам, ул, кейәү ҡайтып килә.

* * *

Барсынбикәнең ауыҙынан шул хәбәрҙе ишетеү менән юлға сығып йүгергән Мәҙинәнең хәле бөткәндән бөтә барҙы. Ферма үрен менгәс, алдында борғаланып ятҡан оҙон юлға ҡараны. Әлегә ул буп-буш. Ләкин күп тә үтмәне унда аҡ машина пәйҙә булды. Автомобиль яҡынайған һайын Мәҙинәнең йөрәге нығыраҡ туланы. Күкрәк ситлеге тар уға хәҙер. Йөрәк бына-бына уны емерер ҙә бынау икһеҙ-сикһеҙ зәңгәрлеккә һабантурғай булып олғашыр. Әптеләхәт! Йырҙан, моңдо ҡурайҙан яралған татлы һағыш кеүек яңғыраған был исем йылытты уның йөрәген! Ҡанат та, терәк тә булды уға ошо исем. Тик ниңә оҙаҡлай ул? Ниңә анау аҡ «Победа» түбәгә етмәй туҡтап ҡалды? Унан ике ир төштө. Ҡул бирешеп, ҡосаҡлашып хушлаштылар. Береһе машинаға кире ултырҙы, икенсеһе, арҡаһына биштәр аҫҡаны, былай атланы.

— Әптеләхәт! — Мәҙинә үҙ тауышын үҙе ишетмәне, йүгерер ине — аяҡтары тыңламаны. — Әптеләхәт...

Ул, тыны менән тартып алырҙай булып, ҡарашын ап-аҡ сырайлы, үҙенә табан ашыҡҡан яңғыҙ һынға төбәне.